✓ *Ахмаҡ һәм наҙан бәндәне ошо биш сифат аша танып була: ул сәбәпһеҙгә асыулана, урынһыҙ ерҙә һүҙ һөйләй, үҙенә ҡағылмаған эшкә ҡыҫыла, әленән-әле фекерен үҙгәртә, уға кем яуыҙлыҡ, кем изгелек теләгәнен дә айыра алмай.*

*(Г. Честертон).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18 - 24 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№25 (443)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Заманалар хәтәр булған һайын,**

Батыр тыуыр башҡорт ерендә!



6-7

**Өфө ҡалас ашатмай...**

әммә күңел бушлығын тултыра



8-9

**Арҙаҡлылар менән майҙан тотам,**

Ат шәп минең, атҡа ышанам...



10-11

**Өндәшмәҫ Сөләймәндең...**

ҡаһарман улдары



15

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Матур закондар ҡабул ителә, әммә улар үтәлмәй, тигән фекер менән килешәһегеҙме?

***Мәхмүзә ҒӘЙНУЛЛИНА, медицина фәндәре докторы, профессор, БР Йәмәғәт палатаһы ағзаһы:*** Эйе, килешәм. Беҙҙә бик төплө, һәйбәт закондар ҡабул ителә ул, тик шуныһы ҡыҙғаныс: уларҙы мотлаҡ эшләтеү механизмы, контроль юҡ, закондар эшләмәй. Әгәр бөтә ҡабул ителгән ошо закондар үтәлгән хәлдә, беҙ ниндәй һәйбәт тормошта йәшәгән булыр инек! Шундай осраҡтар ҙа бик күп: законға ҡаршы ла бармайҙар, ә оҫта ғына урап үтәләр. Бына шуның арҡаһында илебеҙ әлеге көрсөк хәленә килеп төкәлде лә бит инде. Ҡайһы ғына өлкәне алып ҡараһаҡ та, беҙ әлеге лә баяғы законды һанламау факттарын күрәбеҙ. Мәҫәлән, 1999 йылдың 15 февралендә ҡабул ителгән "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы законды ғына алайыҡ. Рус теле менән бер рәттән дәүләт теле статусына эйә булған башҡорт телен уҡытыу буйынса ниндәй ығы-зығы ҡуптарҙылар. Ә бит закон унан йөй эҙләү өсөн түгел, ә башҡарыу, ғәмәлгә ашырыу өсөн ҡабул ителә. Мәғариф өлкәһендә милли компоненттарҙы юҡҡа сығарырға маташыуҙар - ул да туранан-тура илдең, республиканың төп законы - Конституцияға ҡаршы барыу, уны боҙоу ул.

Насар ғәҙәттәр менән көрәшеү маҡсатында алкоголле эсемлектәр һатыуҙы сикләү, тәмәке тартыуҙы тыйыу тураһында ниндәй матур закондар ҡабул ителгәйне, үтәләме улар? Юҡ! Әйткәндәй, РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығының 83-сө һанлы бойороғо менән хәүефле һәм зыянлы шарттарҙа эшләүселәргә медосмотр үткәреүҙе финанслау мәсьәләһе буйынса ҡабул ителгән бойороҡ йылдың-йылы үтәлмәй килә. Закон һынлы закондар боҙолған саҡта бойороҡ нимә ул беҙгә, тип ҡарайҙар, ахыры.

***Спартак ИЛЬЯСОВ, халыҡ йырауы, яҙыусы, Учалы районы "Аҡһаҡалдар коро" рәйесе:*** Килешәм! Күпме закон ҡабул ителә, әммә улар ҡағыҙҙа ғына ҡала килә. Закондарҙың үтәлешен контролдә тоторға тейешле органдарҙың да хатта был мәсьәләгә "теше үтмәй". Ил мөлкәтен хосусилаштырабыҙ тигән һылтау менән бурҙар бөтә ил байлығын урланы, хәҙер олигарх булып танау сөйөп йөрөйҙәр. Колхоз, совхоз, башҡа предприятиеларҙы ла таратып, ябып, мөлкәтен ҡулға төшөрҙө вағыраҡ бурҙар. Ил байлығы бер төркөм ҡулына күсте, ә халыҡҡа бер ни ҙә тәтемәне, "аш табағына" яҡыныраҡ йөрөгәндәр эләктереп ҡалды.

Ер мәсьәләһендә лә эш шулайыраҡ тора. Һуңғы тиҫтә йыл эсендә генә лә Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Ер кодекстарынан башҡа ла ер-мөлкәт мөнәсәбәттәрен көйләргә тейешле әллә күпме закон ҡабул итте: "Дәүләт ер кадастры тураһында", "Ергә дәүләт милекселеген билдәләү тураһында", "Ер төҙөлөшө тураһында". Ошо һәм башҡа бик күп норматив акттар булыуға ҡарамаҫтан, ер мәсьәләһе һаман да закондар тарафынан көйләнә алмай, еребеҙ сит ҡулдарға күсә, һатыла тора. Ил һәм республика буйынса закондарҙың эшләмәүе йә булмаһа тейешле эшләмәүе ана шул ер мәсьәләһендә бик асыҡ сағыла. Ер бит ул халыҡтың йәшәү сығанағы, был хаҡта илебеҙҙең төп законы булған Конституцияла әйтелә. Шулай булғас, халыҡ ҡатнашлығынан тыш ситтәрҙең йә булмаһа айырым кешеләрҙең ерҙе үҙ белдеге менән һатып ебәрергә йә һатып алырға, ҡуртымға бирергә хоҡуғы юҡ.

Миҫал эҙләп әллә ҡайҙа йөрөргә түгел. Бына әле беҙҙең Учалы районында рухиәтебеҙҙең төп сығанаҡтарының береһе булған Әүлиә шишмәһен, уның тирә-яҡ биләмәһен шәхси кеше ҡулына биреү тураһында хәбәр йөрөй. Йәнәһе, ул бында мәсет төҙөйәсәк. Мәсет тигәне ул, әлбиттә, ҡармаҡ осондағы селәүс. Халыҡ белмәй ҙә ҡала, иң матур, иң уңдырышлы ерҙәребеҙ ситтәр ҡулына күсә лә ҡуя, сөнки бындай эштәр йәшертен эшләнә. Урмандарыбыҙ менән дә шундай уҡ хәл. Закондар эшләмәй, хоҡуҡ һаҡлау органдары күрмәмеш тә белмәмеш: урман биләмәләре һатыла, ағас ситкә ағыла.

Ҡабул ителгән закондар эшләһен өсөн уларҙы ныҡлы контролдә тотоу буйынса берәй эшлекле механизм булдырылһын ине ул...


**(Дауамы 2-се биттә).**


СОБХАНАЛЛА!

## НАРЫҪТАУ



*Киләсәктә был ерҙәргә*
*Хоҙай үҙе ҡыҙығыр.*
*Ш.Бабич.*

*Сәхәбәләр кәшәнәһе -*
*Эй, Нарыҫтау, Нарыҫтау,*
*Хаҡ Тәғәлә ҡаршыһында*
*һәр башҡортҡа фарыз тау.*

*Изгелеккә үтә яҡын,*
*Яуызлыҡҡа алыҫ тау.*
*Ҡиблаларға ишек асып,*
*Көткән беҙҙе Нарыҫтау.*

*Ербаҫарға көртә булып,*
*Ҡалҡан булып хаосҡа,-*
*Ун биш быуат халҡыбыҙҙы*
*һаҡлап ятҡан Нарыҫтау.*

*Сәхәбәләр йәне бында*
*Ожмах менән ҡауышҡан.*
*Бында нурҙар, моңдар ҡайнай*
*"Аллаһ!" тигән тауышҡа.*

*Эй, Нарыҫтау, Нарыҫтау,*
*һәр башҡортҡа фарыз тау.*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**


(Теманың дауамын 4-се биттә уҡығыҙ).

***✓ Закондар шул тиклем йыш үҙгәреп тора, кеше улар менән танышып та өлгөрә алмай. Ә инде законды белмәйһең икән, нимәнелер талап та итеп булмай. Ә чиновниктарға шул ғына кәрәк тә инде.***



УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# УЙЛАТА, УЙЛАНДЫРА...

**Аҙнаның һәр шәмбеһен һағынып көтөп алам. Был көндө яратҡан гәзитем "Киске Өфө"нө алып киләләр. Почта ташыусы ханым яғымлы итеп: "Вашу "Киску" принесла", - тип гәзитте ҡулыма тоттора. Был гәзитте яҙҙырып уҡыуыма өс йыл инде. Уға тиклем "Киске Өфө"нө "Вечерняя Уфа"ның тәржемәһе тип уйлай торғайным. Үҙебеҙҙең башҡорт гәзите икәнен белгәс, бик ҡыуандым һәм шунан бирле ул минең яҡын дуҫыма әйерелде.**

Иҫ китмәле бай теле, биҙәлеше, темаларҙың төрлөлөгө, тәрәнлеге рухты байыта, башҡорттарҙың аңын аса - ысын мәғәнәһендә илһөйәр баҫма! Башҡорт рухы менән һуғарылған "Киске Өфө"нө бөтә милләттәштәрем дә белмәй микән ни? Дәррәү яҙылып, берҙәмлек күрһәтеп, гәзиттең тиражын бермә-бер арттыраһы ине! Күтәрәйек гәзитебеҙҙең абруйын, бәҫен, милләттәштәр!

Фиҙаҡәр хеҙмәттәре өсөн гәзит журналистарына ҙур рәхмәтемде белдереп уҙам. Халыҡтың рухын дауалаусылар бит һеҙ. Гәзит уйлата, уйландыра, йәшәүҙең асылын төшөндөрә, гүзәл Башҡортостаныбыҙҙы, еребеҙҙе, телебеҙҙе һаҡларға һәм яҡларға өндәй. Ысынлап та, бөгөнгө болғансыҡ, боҙоҡ тормошта күпме матурлыҡтарҙы юғалтҡанбыҙ, ғәфләт йоҡоһона талғанбыҙ, вайымһыҙлыҡҡа тарығанбыҙ. Әгәр ошо сирҙән арынып, яраҡһыҙ ғәмәлдәрҙән тыйылып, изге еребеҙҙе, йәнтөйәгебеҙҙе һаҡлап ҡалыу маҡсатын байраҡ итеп күтәрмәһәк, беҙҙе кем ҡотҡарыр, кем яҡлар? Башҡорт милләте, хаҡ еребеҙ юғалмаҫмы?

Мине бигерәк тә ерҙе һатыу мәсьәләһе ныҡ борсой. Беҙҙең Ырымбур төбәгендә, минең тыуған яғым Соран буйындағы ауылдарҙа был хурлыҡлы аҙым яһалды инде. Ер һатып, кем йәлсегән? Нимәгә өлгәштеләр, тиһегеҙме? Ерҙе һөрөү, сәсеү, урыу - яңы хужаларҙың һағы аҫтында. Ауыл кешеләре әлегә тиклем кәртә тултырып мал аҫырап, тырышып донъяһын алып бара ине. Бөгөн хәл бер һыйырға ҡалып бара. Көтөүлектәр ҡыҫҡартылды, бесәнде ҡиммәт хаҡҡа һатып алып көн итеп була тиме ни? Малдарҙың тоҡомон алмаштырып, яңы техника алып килеп, бөтәһен дә һаҡ аҫтында тотоп, халыҡты батрак хәленә төшөрөп эшләтеп йыйған уңыштың күпме өлөшө эшләүселәргә тәтей? Хеҙмәт хаҡын биргән булалар, ә ерҙә тир түгеп уңыш үҫтергән игенсегә ашлыҡ юҡ. Һатып ала халыҡ. Хужалар, үҙҙәренең магазиндарын асып, ашлыҡты кешегә ҡиммәт хаҡҡа һата. "Аяҡ табаның аҫтында рәхәтләнеп баҫып йөрөгән ғәзиз ерең сит ҡулға ҡалыуы бик ҡыйын хәл икән. Йән әрней, был ғазаплы юғалтыу булды", - ти ауылдаштарым. Эйе, ер хәсрәте - ил хәсрәте, төҙәлмәҫ яра.

Башҡортостаныма ошо көнгә ҡалырға яҙмаһын. Гөлбаҡсалы йәнтөйәгебеҙ - ғәзиз еребеҙҙе һаҡлайыҡ, ҡәҙерен беләйек, яңылыштарҙан аяу булайыҡ!

**Мәбрүрә ЙӘНБУХТИНА.**
**Бәләбәй ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Матур закондар ҡабул ителә, әммә улар үтәлмәй, тигән фекер менән килешәһегеҙме?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Зөфәр САФИН, БР Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтай депутаты, Дәүләт төҙөлөшө буйынса комитет рәйесе:*** БР Дәүләт Йыйылышының Дәүләт төҙөлөшө буйынса комитетында "БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Башҡортостан Республикаһы закондарының үтәлеүенә контроле тураһында" Закон проекты буйынса эш башланды. Был закон проекты республика закондарына контроллек итеүҙе көйләүсе нормаларҙы камиллаштырыуға һәм закондарҙы үтәү механизмдарын тәртипкә һалыуға йүнәлтелә. Әлеге законды ҡабул итеү был эшмәкәрлеккә комплекслы үҙенсәлек биреп кенә ҡалмай, бәлки, республика закондарын ғәмәлгә ашырыуҙа юғары һөҙөмтәлелеккә өлгәшеүгә ярҙам итәсәк. Закон проектында ошо өлкәләге нормаль хоҡуҡи акттар ҡулланыу тәжрибәһе лә иҫәпкә алынған. Ҡайһы бер яңылыҡтар ҙа бар. Мәҫәлән, БР Президенты һәм БР Йәмәғәт палатаһы закондарҙың үтәлеүенә контроль булдырыу тураһындағы тәҡдим менән сыға ала.

Закон проектында контроллек итеү юлдары (парламент тыңлауҙары, парламент запростары, "Хөкүмәт сәғәте", даими комитеттар ултырыштарында республика башҡарма власы органдарының вазифалы кешеләрен тыңлау), сираттағы сессияға БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Президиумы тарафынан БР закондарын үтәүгә контроллек итеү менән бәйле саралар планын раҫлау тураһында положениелар индерелә. Башҡортостан Республикаһының аныҡ закондарын үтәүгә контроллек итеүҙе башҡарыу даими комитеттарға йөкмәтелә, улар закондың һөҙөмтәлелеген тикшерергә, контроллек итеү буйынса тәҡдимдәр индерергә, закондарҙы үтәүҙә ҡаршылыҡ булып торған сәбәптәрҙе асыҡларға хоҡуҡлы буласаҡ.

***Айгөл САҘРЫЕВА, эшҡыуар:*** Күптәрҙең фекеренә ҡушылып, илебеҙҙә һәм республикабыҙҙа ярайһы ғына файҙалы закондар ҡабул ителә, тип таныйым, ә бына уларҙың һөҙөмтәлелегенә килгәндә, икенсерәк төрлө фекерҙәмен. Эш беҙҙең ана шул закондарыбыҙға ҡарата мөнәсәбәтебеҙҙә түгелме икән? Күптәр бит берәй мәсьәләгә, ҡаршылыҡтарға, конфликтҡа килеп төртөлмәйенсә, ниндәй закондар барлығын да белмәй. Йә булмаһа, закондар шул тиклем йыш үҙгәреп тора, кеше улар менән танышып та өлгөрә алмай. Ә инде законды белмәйһең икән, нимәнелер талап та итеп булмай. Ә чиновниктарға шул ғына кәрәк тә инде. Закондарҙың үтәлмәү сәбәптәренең береһе, бәлки, ошондалыр ҙа. Закондарҙың теүәл, аныҡ үтәлеүен талап итеү өсөн уларҙы яҡшы белергә, грамоталы булырға кәрәк, тип уйлайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бер аҙнанан тамамлана. Июнь айында гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә башҡорт телендәге 10 "Ҡөрьән -Кәрим" китабы вәғәҙә итәбеҙ.**




**Ҡырмыҫҡалы районының башҡорт теле уҡытыусылары.**

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:** • Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ. • Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **210 һум**. • Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум.**

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн хаҡтар түбәндәгесә: 50665 индекслыһына **340 һум 92 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәстәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостанға Рәсәй һәм яңы бойондороҡһоҙ дәүләттәр менән сауҙа ассоциацияһы (РОТОБО, Япония) делегацияһы килде. Делегацияның сәфәр программаһы өс көнгә иҫәпләнгән һәм эшлекле форум үткәреүҙе, төбәктәге сәнәғәт предприятиеларына, ғилми ойошмаларға барыуҙы, республика ҡеүәте менән танышыуҙы үҙ эсенә ала. Былтыр ноябрҙә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте менән РОТОБО araһында хеҙмәттәшлек тураһында ниәттәр протоколына ҡул ҡуйылғайны.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Японияның РОТОБО делегацияһы ағзалары менән осрашты. Осрашыуҙа иҡтисадтың төрлө өлкәләрендә Япония менән Башҡортостандың хеҙмәттәшлек перспективалары тикшерелде. Билдәләнеүенсә, республикабыҙ 100 ил менән сауҙа мөнәсәбәттәре булдырған. Былтыр был хеҙмәттәшлектән тауар әйләнеше 10 млрд доллар тәшкил иткән. Ә Япония менән тауар әйләнешебеҙ 30 млн долларҙан артмай. Һөйләшеүҙә Япония менән буласаҡ хеҙмәттәшлектең бер нисә мөһим йүнәлеше билдәләнде.

✓ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар, бюджет ҡануниәтендәге үҙгәрештәр һәм республика закондары үтәлешенә контроль БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында төп темаларҙың береһе булды. Депутаттар барлығы 37 мәсьәләне тикшерҙе. Мәҫәлән, Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодекстың күп кенә статьяларында административ штрафтар күләме 100 һумдан 1 млн һумға тиклем арттырылған. Бынан тыш, хоҡуҡ боҙоуҙың ҡабатланыу нормаһы ғәмәлгә индерелгән. Был да штраф күләменә йоғонто яһай.

✓ Республикала күп йыллыҡ үләндәрҙе сабыу башланды. Ете районда мал аҙығы әҙерләүгә төштөләр. Быйылғы һауа шарттарында бесәнде ике-өс тапҡыр әҙерләргә мөмкин буласаҡ, тип иҫәпләй ауыл хужалығы эшсәндәре. Быйыл мал аҙығы культуралары 1,1 млн гектар майҙанда сәселгән. Бынан тыш, 1 млн гектар тәбиғи бесәнлек бар.

✓ 15 июндән 15 июлгә тиклем федераль трассаларҙа һауа температураһы 32 градустан артһа, ҙур йөк автомобилдәре хәрәкәте сикләнә. Федераль юл агентлығы әҙерләгән ҡарарҙың сәбәбе - эҫе көндәрҙә юлдарға зыян килтереүҙе кәметеү. Хәрәкәт ябылған саҡта ул киске 9-ҙан иртәнге 9-ға тиклем рөхсәт ителәсәк.

✓ *"Тоҡто ауыҙын бәйләп ҡуйырға урын ҡалдырып, самалап тултырырға кәрәк шул. Ул саҡта тоҡтағы нәмә бөтөн көйөнсә һаҡлана, уны урынынан күсереп ҡуйыу ҙа уңайлы..."*



*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*



# ДЕГӘНӘК АРАҺЫНДАҒЫ...

## сәскәнән һаҡлан

**Дегәнәк араһында үҫкән сәскәнән һаҡланырға саҡырыуҙы ике төрлө аңларға мөмкиндер. Беренсенән, сәскәнән, икенсенән дегәнәктән һаҡланыуға өндәү, тип. Шул ике йүнәлештә фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**

Ҡыҙыҡ, дегәнәк араһында үҫкән өсөн генә сәскәнең асылы үҙгәрәме икән? Юҡтыр. Әммә сәскәләр араһында үҫкән сәскә менән дегәнәк араһында үҫкәне араһында айырма бар. Ни өсөн тигәндә, беҙ сәскәлектәге айырым сәскәне күҙгә лә элмәйбеҙ, сөнки бер төрлө булған мендәрсә сәскәләргә күҙебеҙ ҡамашып, улар араһындағы айырым сәскәнең үҙенсәлеге шул дөйөмлөк менән буталып, юҡҡа сыға. Ә инде дегәнәк араһындағы яңғыҙ сәскә беҙгә тупаҫлыҡ, ҡырағайлыҡ араһында үҫкән берҙән-бер гүзәллек булып, ымһындырып, балҡып ултыра. Гүйә, донъялағы барлыҡ матурлыҡ, гүзәллек бары ошо сәскәгә генә тупланған кеүек. Барлыҡ хикмәт шунда: ни өсөн халыҡ аҡылы фәҡәт ошо сәскәнән һаҡланырға ҡуша һуң?

Иң тәүҙә шундай һорауға яуап эҙләйек: ни өсөн был сәскә һәм дегәнәк йәнәшлеге миҫал итеп алынған? Ни өсөн, мәсәлән, кесерткән йә әрем түгел? Аңлашыла, уйламаҫтан дегәнәк араһына барып инһәң, һуңынан кейемдәреңде тиҙ генә таҙартып алырмын тимә. Тимәк, дегәнәк араһындағы сәскәне өҙөргә ынтылған кеше, уны алған хәлдә лә, бер ыңғайҙан шул матурлыҡты ла ҡулға төшөрә, икенсенән, бысранып та өлгөрә. Матурлыҡ хаҡына бысрана, икенсе һүҙ менән әйткәндә, бысраныу иҫәбенә матурлыҡҡа эйә була.

Әйтемдә нимә хаҡында һүҙ барғанын аңлағанһығыҙҙыр инде. Теләгенә, нәфсеһенә баш була алмаған, сама белмәгән кеше һәр ваҡыт кейемдәренә дегәнәк сылбырҙары йәбешкән кеше кеүек, үҙен, күңелен бысрата. Йәғни дегәнәк араһында үҫкән сәскәне өҙөп алып, дегәнәклектән таҙа көйө сығып булмай. Был шулай уҡ һыуға сумып, унан ҡоп-коро килеш сығып булмауға тиң. Бында, әлбиттә, нәфсе объектын сәскә образы башҡара. Тормошта ла нәҡ шулай: ниндәйҙер ымһындырғыс әйбер, хыял, теләк артынан ҡыуған кеше үҙенең намыҫ принциптарына, әхлаҡ йолаларына ҡаршы барып, үҙ-үҙен бысрата. Ярай әле, ул бысраныу кейеменә йәбешкән дегәнәк ише генә булһа...

Нәфсе, уға баш булыу хаҡында был әйтем. Дини тәғлимәттә нәфсе төшөнсәһе тик бер яҡлы ғына аңлатылмай. Али ибн Талиб нәфсегә шундай аңлатма биргән: "Нәфсе хаҡында һөйләгәндә мин һарыҡтарын йыя алмаған көтөүсе хәлендәмен. Малдарымды өйөрөргә нисек кенә тырышһам да, улар шул тиклем ситкә тарала". Джавад Нурбахш нәфсенең бер нисә сифатын билдәләп үтә:

-Нәфсе - наҙанлыҡ билдәһе;

-Нәфсе - әшәке ҡылыҡтар һәм насар холоҡтар сығанағы. Нәфсене оҙаҡ ваҡыт һауытта тоноп ултырған һыуға ла тиңләйҙәр;

-Нәфсе - Аллаһы Тәғәләнең асыу ҡоралы, уның тәбиғәтендә яуызлыҡ тыуҙырыу һәләте бар. Аллаһы Тәғәлә нәфсене кешенең холоҡ сығанағы итеп яралтҡан да, уны төрлө төҫкә әйләндереп торор өсөн Иблесте ҡуйған;

-Нәфсе - һынташ, уға иғтибар итеү һынташҡа, ботҡа табыныуға тиң;

-Нәфсе тик ялғанда ғына үҙенә тыныслыҡ таба;

-Нәфсе кешенең эсендә булған сакта уға Аллаһы Тәғәлә күренмәй;

-Нәфсенең түбән тойоуҙан ләззәтләнгән кеше ысын ләззәттең тәмен тойоуҙан мәхрүм;

-Нәфсенең нигеҙендә ҡағиҙәләрҙе боҙоу ята;

-Нәфсе күп һандағы яуызлыҡтарҙа ғәйепле;

-Нәфсе һәр саҡ тыйылған нәмәне теләй;

-Нәфсе теләктәрҙең ҡоло. Ул кешеләрҙе тән рәхәтлеге алырға ҡоторта, матди байлыҡҡа ымһындыра;

-Нәфсе сикһеҙ алдаша;

-Нәфсе илаһилыҡҡа дәғүә итә, үҙе бер ваҡытта ла Аллаһы Тәғәләлә күңел тыныслығы таба алмай;

-Нәфсе - тәкәббер, үҙ-үҙен генә ярата. Башҡа кешегә ҡарата эшләгән бәләкәй генә изгелеген дә, үҙенең изге булыуы менән һоҡланып, йылдар буйына онотмай;

-Нәфсе - һаран, үҙгәреүсән;

-Нәфсе - ялҡау, үҙенең холҡон минут һайын үҙгәрткән хамелеонға оҡшаш, һ.б.

"Әҙәм балаһына нәфсеһенән ҡотолоуҙан да ауырыраҡ ғәмәл юҡ", тип әйтелә дини тәғлимәттә. Ысынлап та, күҙең ҡыҙған әйбер шул сәскә кеүек ниндәй генә урында урынлашмаһын, уны ҡулға төшөрөү әҙәм балаһын юғарыла һанап үтелгән нәфсенең сифаттарына юлыҡтыра, икенсе төрлө әйткәндә, нәфсеһенә баш була алмаған кеше шул сифаттарға эйә була, үҙен юҡҡа сығара.

Нәфсенән хатта кешенең йөрәге лә зыян күрә. "Кешенең йөрәге - берҙәмлек һәм күп төрлөлөк араһындағы тигеҙлек ул. Әгәр ҙә унда теләктәр яугиры - нәфсе хакимлыҡ итһә, йөрәк ҡыйрала һәм тотҡонға әләгә. Әгәр ҙә инде мөхәббәт ғәскәре нәфсене ҡыуып сығара алһа, рух тантана итә. Нәфсе - күп төрлөлөктө, йөрәк берҙәмлекте таный. Нәфсе - йөрәкте аҙҙырыусы, ә йөрәк - хакимлыҡ министры. Йөрәк - күп төрлөлөк менән берҙәмлек араһында барған һуғыш майҙаны, яу яланы. Йөрәкте таҙартыуҙың төрлө юлдары бар. Ҡайһы берәүҙәр нәфсеһе теләгәндең киреһен үтәп, үҙҙәренең холҡон үҙгәртеп ҡараны. Әммә холоҡтоң бер генә кире яғын үҙгәртеү өсөн дә тотош ғүмер талап ителә. Әгәр ҙә кеше саҡ ҡына онотолһа, нәфсе барыһын кире ҡайтара. "Нәфсе - ул аждаһа, кем уны, үлгән, ти һуң?" тигән Руми. Кеше тик осраҡлы уй-фекерҙәрҙән ҡотолоп ҡына нәфсенән һәм Иблес мөхитенән сыға ала", тиелә дини тәғлимәттә. Ошо абзацтан "йөрәк берҙәмлекте таный" тигәнендә бер тибештәге йөрәктәрҙе, йәғни бер маҡсаттағы ҡәүемде, халыҡты күҙалларға була. Бында нәфсеһенә бойһоноусы кеше ҡәүем, халыҡ йәшәйеше нормаларынан айырылған, ситләшкән булараҡ күҙаллана. Тимәк, үҙ-үҙен генә ҡайғыртып йәшәгән кеше - нәфсе ҡоло, ҡәүеменән ситләшкән бәндә.

Айырым ҡәүемдә, милләтте генә түгел, кешелектең үҙен тарҡалыу, юғалыу афәтенән һаҡларлыҡ милли идеяға тиң беҙ һүҙ башында телгә алған "Дегәнәк араһындағы сәскәнән һаҡлан" әйтеме.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# НӘФСЕНӘН НИСЕК АРЫНДЫРЫРҒА?

**Һуңғы йылдарҙа коррупция, бурҙар тураһында һүҙ әленән-әле ҡалҡып килә лә сыға. Хатта коррупция күҙәтелмәгән өлкә лә ҡалманы шикелле. Ҡыҙғаныс, әммә факт: коррупция эскелек, тәмәке кеүек үк зарарлы ғәҙәттәр рәтендә нығына бара көнитмешебеҙҙә.**

Шулай бер бер көндә өлкән генә бер ағай редакцияға килеп инеп, коррупция күренештәренә борсолоуын белдерҙе һәм:"Ниңә журналистар коррупция менән көрәшмәй? Ниңә ул турала яҙмайһығыҙ?"- тип хәбәр һалды. Коррупцияның көндән-көн сәскә атыуына журналистарҙың көрәшкә ҡушылмауы сәбәпсе һымағыраҡ килеп сыҡты. "Ә коррупция тураһында яҙылған мәҡәләләр кәрәкме икән уҡыусыға? Ул уға ниндәй фәһем бирә?"- тим ағайға. Бәхәсләшеп, барыбер үҙемдекенә инандыра алманым. Мин, коррупция менән хоҡуҡ һаҡлау органдары шөғөлләнергә тейеш, журналистың бурысы - үҙ мәҡәләләре аша уҡыусыһын бурлыҡ, кеше хаҡына инеү, нәфсеңә баш булмау насар икәненә инандырыу, тигән фекеремдә ҡалдым, ә ағай барыбер үҙенекен ныҡыны:"Һәр коррупция осрағын яҙырға, бурҙарҙы фашларға тейешһегеҙ!" Тағы кемдәр шулай уйлай икән уҡыусыларыбыҙ араһында?

Бурҙарға килгәндә...Бер көндө икенсе бер танышым  менән дә шул хаҡта һөйләшеп киттек. Улы Грецияла булған да, әсәһенә "Ғәҙеллек һауыты" тип аталған бер сувенир алып ҡайтҡан. "Ғәҙеллек һауыты"н борон заманда уҡ бер вәзир уйлап табып, хакимына бүләк иткән икән. Һауытта яртылаш һыу булғанда, ул түгелмәй ҙә, кәмемәй ҙә, бер көйөнсә тора. Ә уға тултырғансы һыу ҡойһаң, ни рәүешлелер ағып бөтә, бер тамсы ла һыу ҡалмай һауытта. Нәфсеңде үҫтерһәң, бына шулай бер ниһеҙ тороп ҡалыуың ихтимал, тигәнгә ишара был.Танышымдың әсәһе был сувенирға ҡарап, үҙенең аңлатмаһын биргән: "Тоҡто ауыҙын бәйләп ҡуйырға урын ҡалдырып, самалап тултырырға кәрәк шул. Ул саҡта тоҡтағы нәмә бөтөн көйөнсә һаҡлана, уны урынынан күсереп ҡуйыу ҙа уңайлы. Ә инде тоҡто лыҡа тултырып, бәйләргә урын да ҡалдырмаһаң, ул күсереүгә лә уңайһыҙ, йығылып китһә, эсендәге нәмәһе лә түгелеп, сәселеп китеп, юҡҡа сығыуы мөмкин..."

Бәлки әле еңейәт юлына баҫмаған, боҙолмаған, күңелендә боҙоҡлоҡ булмаған кешене ошондай фәһемле һүҙ һөйләп, уның инаныуҙарын нығытып ҡуйыу яҡшыраҡтыр? Нәфселеләр, бурлыҡ гонаһына батҡандар бит барыбер гәзитеңде лә, китабыңды ла уҡымай...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың ауыл хужалығы етештереүселәренә мал аҙығы әҙерләү, дизель яғыулығы һәм техника һатып алыуға сығымдарҙың бер өлөшөн компенсациялауға дәүләт ярҙамы күрһәтеләсәк. БР Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов ҡул ҡуйған Хөкүмәт бойороғо менән 442 млн һумлыҡ дөйөм ярҙам күләме билдәләнгән. Мал аҙығы әҙерләүгә субсидиялар биреү аҙыҡтың үҙкиммәтен 15-20 процентка кәметәсәк, тип көтөлә.

✓Башҡортостан автовокзалдарында билет өсөн теләһә ниндәй банк картаһы менән иҫәпләшергә мөмкин буласаҡ. Был яңылыҡты "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы халыҡҡа унайлы булһын өсөн индерҙе. Июндә республиканың һәр автовокзалында халыҡ-ара түләү системаларының пластик карталарын хеҙмәтләндереүсе терминалдар урынлаштырыласаҡ.

✓ВТБ банкыһы "Күҙ йәштәрһеҙ донъя" мәрхәмәтлек программаһы сиктәрендә 17-се ҡала балалар клиник дауаханаһына медицина ҡорамалдары һәм кисектергеһеҙ ярҙам күрһәтеү өсөн материалдар тапшырҙы. Алынған йыһаздарҙың дөйөм суммаһы 1,2 млн һум тәшкил итә.

✓Континенталь хоккей лигаһы 2011/2012 сезонының КХЛ чемпионаты календарын раҫланы. Киләһе сезонда КХЛ ике конференцияға бүленгән 24 команда форматына яңынан ҡайтасаҡ. Чемпионат 7 сентябрҙә Гагарин Кубоғының үткәндәге финалистары - "Салауат Юлаев" менән "Атлант" араһындағы Асыу Кубогы менән старт ала.

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының республика райондары буйлап гастролдәре дауам итә. Был көндәрҙә улар Әлшәй, Миәкә, Бишбүләк, Дәүләкән райондарында сығыш яһай. 21 июндән Ҡыйғы, Салауат райондарында, 25, 26 июндә Мәсетле районында сығыш яһаясаҡтар.

✓1 июлдән берҙәм федераль өлгөләге яңы һунарсы билеттары тапшырыла башлаясаҡ. Был документтың срогы һәм ҡулланыу территориялары сикләнмәй. Яңы билеттар алыу өсөн ғариза биргәндә иҫке һунарсы билетеһын күрһәтергә кәрәк. Шулай уҡ ике фотоһүрәт һәм шәхесте асыҡлаусы документ күсермәһе талап ителә. Билет тейешле документтар тапшырылып бөткәндән һуң биш көндә бирелә.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЯҢЫ ҺӨНӘР... кемде ҡыҙыҡтырыр?

**Башҡорт дәүләт педагогия университетында "превентология" һөнәре буйынса абитуриенттар ҡабул ителә. Балалар менән наркотиктарға ҡаршы эшмәкәрлек алып барасаҡ белгестәр превентологтар тип аталасаҡ. Был турала БДПУ ректоры Рәил Әсәҙуллин Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов рәйеслегендә үткән наркотиктарға ҡаршы көрәш комиссияһы ултырышында хәбәр итте.**

Превентологтарҙы БДПУ-ның, башҡа юғары уҡыу йорттарының уҡытыусылары һәм тейешле ведомстволар хеҙмәткәрҙәре уҡытасаҡ, тип аңлатма бирҙе Рәил Әсәҙуллин. Магистратура өсөн ректор республиканың наркохәл буйынса имен булмаған райондарынан маҡсатлы йүнәлтмә буйынса студенттар алырға тәҡдим итте. Педуниверситет етәксеһе шулай уҡ ҡыҫҡа курстар ойоштороу, белгестәрҙе ҡайтанан әҙерлек үткәреү һәм квалификация күтәреү курстары ойошторасаҡтары тураһында ла белдерҙе. "Бындай курстар Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Рәсәй дәүләт хеҙмәте академияһында булдырылған да инде. 12 көн өсөн тыңлаусылар 25 мең һумдан ашыу түләй. Беҙ үҙебеҙҙең белгестәрҙе күпкә кәмерәк аҡсаға ла уҡыта алабыҙ", - тине БДПУ ректоры. Ул йәнә бындай курстарҙы наркопостар хеҙмәткәрҙәре өсөн дә ойоштороп була, тип өҫтәне.

- Үҙегеҙҙең вузда һеҙ нисә превентолог әҙерләй алаһығыҙ? - тип ҡыҙыҡһынды республика Президенты.

- Беҙгә магистратураға 25 бюджет урыны, көндөҙгө бүлеккә 15 һәм ситтән тороп уҡыуға 10 урын бүлделәр, - тип яуапланы ректор. - Яңы һөнәрҙе ойоштороу буйынса эштәр ике йыл алып барылды һәм бына әле генә финанслау башланды. Асылда, тормош хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре буйынса уҡытҡан белгестәр ҙә наркоманияны профилактикалау өлкәһендә эшләргә әҙер, әммә бындай киңлемле мәсьәлә өсөн махсус әҙерлек үткән кадрҙар кәрәклеген яҡшы аңлайбыҙ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# АҠЫЛ... БҮЛЕШКӘНДӘН АРТА

**4-6 октябрҙә Өфөлә "Евразия киңлеге: XXI быуатта төрки телле илдәрҙең һәм Рәсәй төбәктәренең ҡеүәте" төрки донъяһы социологтарының IV конгресы үтәсәк. Уның тәүгеһе 2005 йылда -Истанбулда, икенсеһе - Ҡаҙағстанда, өсөнсөһө Ҡырғыҙстанда уҙған. Сараға Евразия илдәренән, сит илдәрҙән, БДБ илдәренән, Рәсәй төбәктәренән 300 кеше, шул иҫәптән Төркиәнән генә 60 ғалимдың килеүе көҙаллана.**

Был хаҡта матбуғат конференцияһында Истанбул университетының Евразия институты директоры, Төрки донъяһы социологтары ассоциацияһының вице-президенты Хайати Тюфекчи оглы, Профсоюз кадрҙарының квалификацияһын үҫтереү институты ректоры Ғәли Ғәлиев белдерҙе. Ғәли Ғәли улы әйтеүенсә, республикала социология бик үҫешкән, был хаҡта хатта сит илдәрҙә лә хәбәрҙарҙар, һәм конгресс гуманитар фәндәрҙе - артабан, социологияны фән булараҡ үҫтереүгә бер аҙым буласаҡ.

Был сараның ни өсөн тап Рәсәй ерлегендә, тап Башҡортостанда үтәсәген Хайати Тюфекчи оглы, беренсенән, ҡеүәтле социологик база булыуы һәм республика етәкселегенең сараға фатихаһын биреүенә, икенсенән, бында тупланған тәжрибәнең донъяуи әһәмиәтенә бәйләне. "Бөгөн көнбайыш социологияһы көрсөк кисерә, уларҙа этниклыҡҡа, үҙаң күтәрелеүгә иғтибар арта. Ә Рәсәйҙә, уның төбәктәрендә, атап әйткәндә Башҡортостанда күп милләтлелектең бай тәжрибәһе тупланған. Уны өйрәнеү беҙҙең өсөн файҙалы буласаҡ, - тине Төркиә вәкиле. - Беҙҙең маҡсат - социологтар менән туранан-тура аралашыу һәм киләсәктә берлектәге проекттар эшләү".

Башҡортостан социологтарының үҙҙәренең ассоциацияһы бар. Ғәли Ғәли улы әйтеүенсә, ассоциацияға берләшеү менән Австралиянан, халыҡ-ара социологтар ассоциацияһынан саҡырыу килгән. Ошо көндәрҙә Германия менән һөйләшеүҙәр алып барылған. Артабан улар шундай осрашыуҙарҙын, саҡырыуҙарҙың барыһында ла ҡатнашырға ниәтләй. "Бөтөн ерҙә социологияны ниндәйҙер картинаны күҙ алдына баҫтырыу, уны күрһәтеү тип ҡарайҙар, беҙ уны техниклаштырырға ынтылабыҙ. Коллегаларым тарафынан социаль аудит буйынса проект әҙерләнгәйне. Ул әлеге ваҡытта УМПО-ла уңышлы тормошҡа ашырыла. Ҡаҙаҡ дуҫтар ҙа уны беҙҙән алып, үҙҙәрендә ҡулланылышҡа индерә. Әле этник-ара мөнәсәбәттәр буйынса эштәр әҙерләнә. Беҙ, ғәҙәттә, этник-ара низағтарға иғтибарҙы күп йүнәлтәбеҙ, ә киреһенсә, иғтибарҙы милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе гармониялаштырыуға йүнәлтергә кәрәк", - тине ул.

Республикала иғлан ителгән Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылында ошондай конгрестың тап Башҡортостанда үтеүе, тимәк, осраҡлы түгел. Аҡыл бүлешкәндән арткан кеүек, ыңғай тәжрибәне донъяға таратыу ҙа киләсәктә үҙенең һөҙөмтәләрен биреренә ышанырға ғына ҡала.

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА.**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Матбуғат конференцияһынан һуң Истанбулдан килгән ҡунаҡтан - Хайати Тюфекчи оглынан Башҡортостан, Өфө тураһында тәьҫораттарын һорарыҡ.**

- Башҡортостанға, Өфөгә икенсе килеүем, - тине профессор. - Былтыр декабрҙә, ергә ап-аҡ ҡар ятҡан мәлдә килгәйнем. Ул ваҡытта ла ҡала тәбиғәте, архитектураһы, кешеләре менән һоҡландырғайны, ер йәшеллеккә төрөнгән мәлдә лә хозур, матур. Бөтөн Рәсәй, Башҡортостан халҡы йәйге ялында Төркиәгә барырға тырышһа, быйыл мин ял итеү урыны итеп, киреһенсә, Өфөнө һайланым. Алла бирһә, көндәр тағы ла матурланғас, ғаиләм менән килеп ял итергә уйлайым. Сөнки ул тәбиғәте менән дә, кешеләре менән дә үҙенә тартып тора. Башҡорттар, татарҙар үҙ телдәрендә һөйләшкәндә яртыһын тиерлек аңлайым, бәлки, ике-өс аҙна бында йәшәгәндән, ял иткәндән һуң унан да күберәк аңлай башлармын. Ғәҙәттә, шат күңелле кешеләр янында ял итергә тырышаһың, ә Башҡортостан - тыныс төбәк, бында күп милләттәр татыу һәм дуҫ йәшәй. Гелән шулай булһын.

СОБХАНАЛЛА!

# "СӘХӘБӘЛӘР - БАШҠОРТ ЕРЕНДӘ"

**Гәзитебеҙҙең үткән 24-се һанында "Сәхәбәләр - башҡорт ерендә" тигән мәҡәлә баҫтырғайныҡ һәм унда Миәкә районы Илсегол ауылы эргәһендәге Нарыҫтау башына ерләнгән сәхәбәләргә таш-ҡоролма ҡуйыласағы тураһында хәбәр иткәйнек.**

Был урынды элек-электән мосолмандарҙың Мәккәһе тип атап йөрөткәндәр. Урындағы халыҡ һөйләүенсә, Башҡортостандан ғына түгел, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан һәм башҡа яҡтарҙан да бында зыярат ҡылырға килеүселәр күп булған. Зыярат ҡылырға килеүселәрҙең юлы әле лә өҙөлмәй. Халыҡ бында килеп, ике тау түбәһендә күмелгән изгеләргә зыярат ҡылып, тау аҫтындағы Әүлиә шишмәһенән һыу эсеп, хатта һыу ҡойоноп ҡайтып китә. Был һыуҙың бик күп ауырыуҙарға дауа булыуы тураһында әллә күпме миҫалдар ҙа килтерәләр.

Нарыҫтау түбәләренең береһендә 1391 йылда Аҡһаҡ Тимер менән һуғышта башын һалған башҡорт батырҙары Иҙеүкәй менән Мораҙымдың ҡәбере урынлашҡан булырға тейеш, тиҙәр. Ә бына халыҡ хәтере, халыҡ телендәге риүәйәттәр икенсе түбәлә бәйғәмбәр, сәхәбәләр, изге кешеләр күмелгән тип раҫлай. Халыҡ тап ошо түбәләге изгеләр ҡәберенә зыярат ҡыла ла инде. Унда Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең 630 йылда Башҡорт еренә ислам динен таратырға ебәргән өс сәхәбәһенең икеүһе - Зөбәйер улы Абдрахман, Зәйет улы Зөбәйер ерләнгән. Был мәғлүмәт тарихи сығанаҡтарҙа ла сағылыш таба. Был турала гәзитебеҙҙең үткән һанындағы мәҡәләлә яҙып үткәйнек инде.

Үткән шәмбелә бөтөн республиканан йыйылған меңәрләгән мосолман ҡатнашлығында ошо сәхәбәләр ҡәберенә ҡуйылған таш-ҡоролманы асыу тантанаһы булды. Кипрҙа йәшәүсе әүлиәләр солтаны шәйех Мөхәммәт Наҙим Хаҡҡани Башҡортостандан барған мосолмандарға: "Сәхәбәләрҙең ҡәберҙәрен эҙләп табып, тәрбиәләгеҙ, зыяраттар ҡылығыҙ, халҡыбыҙға ошо мәғлүмәтте еткерегеҙ. Сәхәбәләрҙең рухтары ошо көнгә тиклем халҡығыҙҙың уяныуын көтә", - тигән һүҙҙәр әйткән. Ошо бурысты атҡарыусы бер төркөм мосолман егеттәре тырышлыҡы менән ҡуйылды был таш-ҡоролма. Проектын "Артстудия" проект институты архитекторы Салауат Илембәтов башҡарҙы.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**




## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлыҡы Павел Качкаевтың 2011 йылдың 14 майында ҡабул ителгән "Мәктәп уҡыусыларын ваҡытлыса эш менән тәьмин итеү өсөн аҡса бүлеү тураһында"ғы ҡарарына ярашлы, ҡала райондарына 4 миллион 500 мең һум аҡса бүленгән. Был аҡсаға 7 мең уҡыусы йәйге каникулдар ваҡытында ял һәм һауыҡтырыу үҙәктәрендә эшләй аласаҡ. Ошо хаҡта Өфө ҡала округы хакимиәтендә балаларҙың ялын, һауыҡтырыуын ойоштороу, мәшғүллеген тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса ведомство-ара комиссияның сираттағы ултырышында әйтелде.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлыҡы урынбаҫары Сынтимер Баязитов хәбәр итеүенсә, балаларҙың йәйге ялын һәм сәләмәтлеген нығытыуҙы ойоштороу маҡсатында республика бюджетынан быйыл 122 миллион 739 мең һум аҡса бүленгән. 16 июнгә тиклем барлыҡ ҡала янындағы учреждениелар эш башлаған. "Бер-нисә лагерҙы ҡарап сыҡҡас, тикшереүселәр лагерҙарҙың әҙерлеге яҡшы кимәлдә булыуын хәбәр итте", - тине Сынтимер Биктимер улы.

✓Өфөнөң Ҡулса урамындағы 128-се йортта 60 урынға иҫәпләнгән социаль ашхана асылды. Калинин һәм Орджоникидзе районындағы ауыр хәлдә ҡалған ғаиләләр бында бушлай туҡлана ала. Бушлай ашатыуға талондар райондарҙың Халыҡты социаль хеҙмәтләндереү комплекслы үҙәктәре тарафынан бирелә. Был БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Илдар Ғарифуллиндың икенсе мәрхәмәтлек проекты.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең "Кайнар пейджер"ына май айында 130 кеше мөрәжәғәт иткән. Мөрәжәғәт итеүселәрҙең күбеһен торлаҡ йорттарҙы ремонтлау, йорттарға йылы һыу биреү менән өҙөклөктәр, торбалар ағыуы, подъездарҙа ут булмауы, ихаталар торошо, автомобилдәрҙе газондар өҫтөнә мендереп парковкалау кеүек мәсьәләләр борсой. Кемдәрҙер ҡала урамдарындағы тәртипкә, әхлаҡ торошона, йәмәғәт тәртибен һаҡлауға ла битараф түгел.

✓15-17 июлдә Өфөлә Халыҡ-ара шашка буйынса Донъя чемпионаты, 18-24 июлдә халыҡ-ара шашка буйынса Донъя кубогы үтәсәк. Әле унда 17 илдән 100 спортсы ҡатнашырға теләк белдергән.

***✓ Улар инде егерме йылдан ашыу тел, милләт тураһында "хәстәрләүсе" билдәле кешеләр. Үҙәк матбуғат, радио-телевидение кәрәк саҡта уларҙы файҙалана, кәрәкмәгәндә үҙҙәре үк улар адресына тәнҡит эләктереп ҡуя.***

*ШУНДАЙ ХӘЛДӘР*

# БЕР ТЕЛДӘН ДӘ...

## телем кәм түгел!



**Ил сәйәсәтен күҙәтеп барған кеше унда ике мөһим мәсьәлә ҡуйыртылыуын белә. Кәрәк ваҡытта уларҙы тиҙ генә тәүге урынға сығарып, иғтибарҙы илдә барған башҡа көнүҙәк проблемаларҙан ситкә алып китеү өсөн файҙаланалар һымаҡ тойолоп китә хатта. Уларҙың береһе - милли, икенсеһе - тел мәсьәләһе. Уларҙы күтәреү менән тормошобоҙҙағы башҡа иғтибар талап иткән һорауҙар шунда уҡ икенсе планға күсә: иҡтисад та, экология ла, ВВП ла, пай бүлеүҙәр ҙә, инвестициялар ҙа. Әйтерһең дә, ошо мәсьәләләр булмаһа, барыһы ла ал да гөл алға китер, күптән коммунизмға етер инек... Милли һәм тел мәсьәләләре ҡабартылып киткән мәлдәрҙә арыу ғына проекттар, закондар ҙа ҡабул ителеп ҡуя. Мәҫәлән, үткән аҙнала Рәсәй сәйәсмәндәренең милли аҙсылыҡ тип ҡабатларға яратҡан милләттәре, ниһайәт, ҡыуаныслы яңылыҡ ишетеп шатланды: РФ Президенты Дмитрий Медведев "Мәғариф тураһында" РФ Законына үҙгәрештәр индереү тураһында" Федераль законға ҡул ҡуйҙы.**

Ул мәктәпте тамамлаусыларға төп предметтар буйынса Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырғандан һуң, өҫтәмә рәүештә үҙ теләгенә тап килтереп әсә теленән һәм туған әҙәбиәтенән имтихан тапшырыу хоҡуғын нығыта. Имтихандарҙың төп мәлдәрен һәм уның формаһын, тәртибен төбәктәрҙең башҡарма власть органдары үҙҙәре ойоштора, унда һәр милләттең төбәк, милли, этномәҙәни үҙенсәлектәре иҫәпкә алынырға тейеш. Ләкин законға ярашлы, бындай имтихандар БДИ формаһында булмаясаҡ. "Рәсәй Федерацияһы - күп милләтле дәүләт һәм беҙҙә рустар, башҡорттар, татарҙар, мордвалар, сыуаштар һ.б. иңгә-иң терәп йәшәй һәм уҡый. Шуға күрә милли республикаларҙағы сығарылыш синыф уҡыусылары туған телен, әҙәбиәтен өйрәнеү генә түгел, ошо дисциплиналар буйынса сығарылыш имтихандары тапшырырға ла хоҡуҡлы. Әммә бында уҡыусы үҙе ҡарар ҡабул итә, бер ниндәй ҙә мәжбүр итеү булырға тейеш түгел", - ти РФ Дәүләт Думаһының мәғариф буйынса комитет рәйесе Григорий Балыхин.

- РФ Президенты ҡул ҡуйған Законды беҙ ҡыуанып ҡабул иттек,- тине БР Мәғариф министрлығының милли мәғариф һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлек бүлеге начальнигы Рәйсә Күзбәкова,- сөнки сығарылыш синыфы уҡыусыларына әсә телдәренән, шул иҫәптән башҡорт теленән һәм әҙәбиәтенән имтихан биреүҙе индереү федераль закон менән нығытылып, күп кенә проблемаларҙы хәл итә. Беренсенән, башҡорт теленән берҙәм төбәк имтиханы ҡаласаҡ. Милли мәктәптәрҙә 11-се синыф уҡыусылары башҡорт әҙәбиәтенән дә имтихан тапшыра, быға тиклем дә һәр ваҡыт биреп килделәр. Ундай имтихандар ғүмер баҡый булған, шуға уларҙы хәҙер ошо документ нигеҙендә артабан да үткәреү еңелләшер, тип уйлайым. Быға тиклем йыл һайын башҡорт теленән Берҙәм төбәк имтиханын законлаштырыу өсөн Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең ҡарарын көтә торғайныҡ. Хәҙер уны бер ниндәй ҡарарһыҙ үткәрә аласаҡбыҙ. Бәлки, закон булғас, Берҙәм төбәк имтиханын Берҙәм дәүләт имтиханы тип тә әйтеп булыр. Әлбиттә, уны үткәреү формаһын уйлаясаҡбыҙ. Ул билеттар формаһында ла, берҙәм төбәк имтиханы формаһында ла булыуы мөмкин. Тағы шуны әйтеп китер инем: кем әсә теле буйынса филология факультетына уҡырға барырға йыйына, улар ошо имтихан һөҙөмтәләре нигеҙендә законлы рәүештә уҡырға инә аласаҡ.

Шул уҡ ваҡытта Үҙәк матбуғат, радио, телевидение журналистарына милли республикаларҙа милли телдәрҙе уҡытыу мәсьәләһе һаман тынғы бирмәй. Ошо көндәрҙә улар был һорауҙы Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов менән әңгәмәлә тағы күтәрҙе. Президент уларға яуап итеп башҡорт теленең матур, көслө, бөйөк булыуын, үҫешеүҙе дауам итеүен һәм ниндәйҙер айырым ярҙамға мохтаж түгеллеген белдерҙе: "Күптәр ике йәки өс телде белеү - өҫтөнлөк икәнен аңлай, - тине Рөстәм Зәки улы. - Башҡорт теле аша, мәҫәлән, төрки телдәр төркөмөнә сығырға мөмкин. Бөгөн халыҡтың бер өлөшө телде өйрәнергә теләмәй. Әммә Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәре өйрәнеләсәк. Тик теләге булмағандарҙы көсләп уҡытмаясаҡбыҙ. Көсләп асҡан күҙҙең нуры булмай".

"Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законы дәүләт телдәрен уҡытыу мотлаҡ тип ҡабул иткәйне. Тимәк, дәүләт телдәрен теләк буйынса ғына уҡытыу тураһында һүҙ күтәрер алдынан барыбер ҙә Законды камиллаштырыу кәрәк буласаҡ. Бында, моғайын, дәүләт телдәрен өйрәтеү һәм уҡытыу буйынса ниндәйҙер икенсе механизмдар, саралар тураһында ла уйлау урынлы булыр. Сөнки закон бар, уны ғәмәлгә ашырыу саралары уйланылмаған тиерлек. Шул арҡала килеп сыға ла инде ул "уҡыйым-уҡымайым" тигән һатыулашыуҙар. Ғөмүмән, ундай һатыулашыуҙар беҙҙә күмәк тауышҡа яңғырамағанын да беләбеҙ бит. Һатыулашыусылар кемдәр? Әле ишетелгән тауыштарға ҡарағанда, улар инде егерме йылдан ашыу тел, милләт тураһында "хәстәрләүсе" билдәле кешеләр. Үҙәк матбуғат, радио-телевидение журналистары кәрәк саҡта уларҙы файҙалана, кәрәкмәгәндә үҙҙәре үк улар адресына тәнҡит эләктереп ҡуя. Әйткәндәй, был журналистарға милли мәсьәләләрҙең улар тарафынан да ҡабартылыуын, был ҡыҙыҡһыныуҙарҙың яҡшыға алып килмәй торған бер шеш икәнен аңғартып ҡуйғанда урынлы булыр ине ул. Ысынында, коллегаларҙың әйләнә килеп башҡорт теле тураһында һүҙ ҡуйыртыуы тамам ялҡытты бит, йәмәғәт.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## БЫЛ АҠСА ТИМЕРҘӘН

**Рәсәйҙә 25 һумлыҡ тимер аҡса ҡулланылышҡа сығарылды**

1 июндән Рәсәй Банкыһы ҡулланылышҡа 25 һумлыҡ тимер аҡса сығарҙы. "Рәсәйҙең архитектура ҡомартҡылары" серияһына ҡараған көмөш аҡса Павлов ҡалаһындағы һарай-парк ансамбленә арналған.

Аҡсаның диаметры 60 миллиметр, ауырлығы 155,5 грамм. Өҫкө яғында аҡсаның номиналы һәм сыҡҡан йылы, икенсе яғында Павлов ҡалаһында урынлашҡан архитектура ҡоролмаларының һәм скульптураларының рельеф кәүҙәләнеше төшөрөлгән, аҫта "Павловск" яҙыуы бар.

- Аҡса 1,5 мең тираж менән сығарылды һәм Рәсәй Федерацияһы территорияһында түләү өсөн законлы ҡулаҡса булып тора, - тип белдерә Рәсәй Банкыһының Тышҡы һәм йәмәғәт бәйләнеше департаменты.

## ЭШҠЫУАРҘАР КҮБӘЙӘ БАРА

**Республикала бәләкәй эшҡыуарлыҡтың иҡтисади иҫәбен алыуҙың икенсе этабы тамамланды. Башҡортостан бәләкәй эшҡыуарлыҡ иҫәбе буйынса Рәсәйҙең 10 төбәге иҫәбендә**

Иҫәп алыусылар 12 муниципаль районда һәм 7 ҡалала эш алып барып, 38 мең эшҡыуарҙан (31,4 процент респондент) мәғлүмәт алды. Алынған мәғлүмәттәр Башҡортостанда 121,3 мең эшҡыуар барлығын күрһәтте (97,5 процент), шул иҫәптән 110,5 мең эшҡыуар (барлыҡ респонденттарҙың 88,7 проценты) үҙҙәренең эшмәкәрлеге хаҡында йәки 2010 йылда эшмәкәрлек алып бармауы хаҡында мәғлүмәт бирҙе. Тәүге иҫәпләүҙәр күрһәтеүенсә, 166 респондент (109 бәләкәй ойошма һәм 57 шәхси эшҡыуар) үҙҙәренең эшмәкәрлеген республиканан ситтә алып бара, 118-е - үҙ эшен ваҡытлыса туҡтатҡан (58 бәләкәй ойошма һәм 60 шәхси эшҡыуар), 111-е - банкротҡа төшкән (106 бәләкәй ойошма һәм 5 шәхси эшҡыуар), 403-ө - башҡа сәбәптәр арҡаһында эшҡыуарлыҡ алып бармай.

Башҡортостанстат белдереүенсә, эшҡыуарҙарҙан алынған мәғлүмәттәр визуаль тикшереү үтеп, 4 июндә Росстатҡа ебәрелгән. Унан алынған отчеттарҙан күренеүенсә, Башҡортостан Рәсәй төбәктәре араһында 10-сы урынды биләй. Беҙҙән алдағы исемлектә Брянск, Липецк, Тула, Тамбов өлкәләре, Алтай крайы, Ненец һәм Чукотка автономиялы округтары, Хакас һәм Алтай республикалары тора. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: һанап үтелгән региондарҙа тикшерелгән бәләкәй эшҡыуарлыҡ субъекттары 100 меңдән артмаһа, Башҡортостанда улар 125 мең тирәһе. Бөгөнгө көнгә теркәлгәндә хәбәр ителгән һәм эшмәкәрлек алып барылған адрестың тура килмәүе сәбәпле өс мең тирәһе бәләкәй ойошма хаҡында мәғлүмәт юҡ. Уларҙы асыҡлау буйынса эш алып барыла. Июлдә, Росстаттан сканерланған электрон өлгөләр алынғас, формаль-логик контроль үткәреләсәк, иҡтисади эшмәкәрлектең төрҙәрен, эшләп сығарылған сәнәғәт һәм ауыл хужалығы тауарҙарын кодировкалау үткәреләсәк. Иҫәп алыуҙың тәүге йыйылма мәғлүмәттәре ошо йылдың декабрь айында билдәле буласаҡ һәм Башҡортостанстат сайтында баҫыласаҡ: www.bashstat.ru

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Һуған



Һуғанды күп ашаһаң, мейе күҙәнәктәре таҙара, хәтер яҡшыра, сөнки һуған составындағы көкөрт ҡатнашмалары мейеның мөһим өлөштәренә яҡшы тәьҫир итә.

## Тоҙҙарҙан ҡотолоу

Бер дауалау курсы өсөн ун биш шыршы тубырсығы кәрәк. Кистән бер тубырсыҡты термосҡа һалып, өҫтөнә 250 мл ҡайнаған һыу ҡойорға. Иртәнсәк тубырсыҡты алып ташларға һәм ярты стакан төнәтмә эсергә. Иртәгеһенә ҡалғанын эсеп бөтөргә. Шулай бер ай дауалანғандан һуң, ун көн ял итеп алырға кәрәк.

## Ҡан тамырҙары киңәйһә…

Бала тапҡандан һуң ҡатындарҙың аяҡтарында, ғәҙәттә, ҡан тамырҙары киңәйә. Быны булдырмау өсөн йәшел сәйҙе порошок хәленә килтереп ыуырға һәм даими рәүештә аҙыҡҡа өҫтәп ашарға.

Ҡара тал ҡайырыһы төнәтмәһе ҡушылған ванна ла аяҡтар өсөн файҙалы. Аяҡтарҙы һыуҙа 20 минут тирәһе тоторға.

## Күреү насарайһа…

❖ Күреү насарайһа, катаракта булғанда һәм күҙгә аҡ төшкәндә күҙҙәрҙе ысыҡ менән йыуырға һәм һалҡын боҫлама (компресс) ҡуйырға. ❖ Көнөнә ярты литр һөт эсеү ҙә катарактанан һаҡлай, был ауырыу башланған булһа, даими рәүештә һөт эсеү уны аҙҙырмай. ❖ Кишер һәм петрушка һутын 3:1 өлөштә ашар алдынан көнөнә 3 тапҡыр эсергә. ❖ 2 балғалаҡ тырнаҡ гөл сәскәһен 3 стакан ҡайнар һыуға һалып 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 4 мәртәбә яртышар стакан эсергә. Шул уҡ төнәтмә менән күҙҙәрҙе йыуырға була.

## Себен бәшмәге

Ревматизм йонсотҡанда ыуып ваҡланған себен бәшмәген ҡаймаҡ менән бутарға һәм сепрәккә һылап, ауыртҡан урынға ябырға. Был дауа полиатриттан, бил-һигеҙгүҙ ридикулитынан да (ишиас) ярҙам итә. Ревматик сир ваҡытында мышар һутына бал һәм һөт ҡушып эсеү файҙалы. Ярты стакан мышар һутына шул уҡ күләмдә һөт һәм 1 ҡалаҡ бал ҡушырға һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**Ижадсы булараҡ, йыш ҡына һоҡландырыуы ҡатыш аптыратып та, ғәжәпләндереү ҡатыш көнләштереп тә ҡуя Рафаэль Нариман улы. Бер ҡараһаң, ул Башҡортостандың Рәсәй менән берләшеүенең 450 йыллығына бағышлап киң ҡоласлы "Башҡортостан юлы" тигән эпик поэма яҙа, бер ҡараһаң, йә балсыктан, йә гипстан, йә бронзанан, йә бетондан башҡорт батырҙары Һары Мәргәнде, Сәйет Садуровты, Алдар Исәкәевты, Тәтегәс бейҙе, Бәпәнәй Торопбирҙинды, Ҡараһаҡалды, Батыршаны, Салауат Юлаевты, Кинйә Арыҫлановты, Әхмәтзәки Вәлидиҙе, Америка индеецтары ҡәбиләләренең яу башлыҡтарын, Иван Герасимов, Игорь Карпесь, Устин Кармалюк кеүек шәхестәрҙе һынландыра, бер ҡараһаң, шәрҡтең бөйөк шағирҙарының робағиҙарын башҡортсаға ауҙара, бер ҡараһаң... Рафаэль Зинуровтың киң яҡлы эшмәкәрлеген күҙ алдына баҫтырыу өсөн уның вазифаларын һәм шөғөлдәрен һанап сығыу ҙа етә: Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары, юридик фәндәр докторы, профессор, Башҡортостан, Рәсәй яҙыусылар, рәссамдар, журналистар союздары ағаһы, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Этнологтарҙың һәм антропологтарҙың халыҡ-ара ассоциацияһы ағзаһы, тәржемәсе, скульптор... Үҙенең төп дәүләт хеҙмәтенән тыш, Рафаэль Зинуров ниндәй генә ижади эшкә тотонмаһын, был ғәмәлде үҙ йөрәге ҡушыуы буйынса башҡара. "Ысын ижад гонорарға иҫәп тотмайынса, энтузиазм башланған ерҙә башлана" тигән формула буйынса ҡараһаҡ, Рафаэль Нариман тап шундай энтузиаст. Стәрлебаш районы үҙегендә яныраҡ Рафаэль Нариман улының үҙ иҫәбенә башҡорт батыры Ҡаранай Моратовҡа бронза һәйкәл эшләп ҡуйыуы ла шул хаҡта һөйләй. Батырҙың образын булдырыуҙа, һәйкәл ҡуйыуҙа авторға Ҡаранай батыр вариҫтары: медицина фәндәре докторы Марс Юлдашев, тарих фәндәре кандидаты Салауат Таймасов, Стәрлебаш районы хакимиәте башлығы Фәнил Ҡаҙаҡбаев, Миәкә районы дауаханаһы баш табибы, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Илдар Атанғолов ярҙам итешә. Был да күп нәмә тураһында һөйләй. Ҡаранай вариҫтары батыр иҫтәлегенә тоғро.**

**Салауат Юлаев көрәштәше, Алдар батырҙың ейәне Ҡаранай батырҙың һынын тыуҙырыр өсөн автор тынғыһыҙ һәм көсөргәнешле ижади эҙләнеү миҙгелдәре кисергән. Ҡаранай батырҙың һынына нигеҙ итеп уның ошо районның Ҡаранай ауылында йәшәгән вариҫы Тимербулат Ҡаранаевтың һынкилбәте алынған. Кемгә нисектер, мине, мәҫәлән, барыһынан бигерәк Ҡаранайҙың ҡарашы әсир итте. Эйе, бәлки Ҡаранай батыр ошо бронза һындағыса ла булмағандыр, әммә скульптор уның ҡарашын дөрөҫ биргән. Ул ҡараш тап башҡорт батыры Ҡаранай Моратовтыҡы. Үҙ заманының йәбер-золомона, халҡының әсе яҙмышына ҡарата асырғаныу ҙа, властарға протест та. Әйткәндәй, шул уҡ ҡараш хәҙерге заман ысынбарлығына ла ҡарай төбәлгән. Авторҙың төп уйының, беҙҙенсә, тап ошонда, батырҙың һәр быуатҡа тап килерлек күҙ-ҡарашын һынландыра алыуындалыр.**

**Ҡаранай Моратовҡа һәйкәл асыу тантанаһына Өфөнән ғалимдар, шағирҙар, матбуғат хеҙмәткәрҙәре, райондың барлыҡ ауылдары вәкилдәре, шул иҫәптән батырҙың тыуған Ҡаранай ауылы халҡы йыйылды. Әйткәндәй, һәйкәл асыу тантанаһында яңғыраған сығыштарҙа халҡыбыҙ батыры Ҡаранай Моратов шәхесенә ҡарата баһа бирелеп кенә ҡалманы, тарихи һәм хәҙерге күҙлектән өр-яңыса әйтелгән фекерҙәр ҙә яңғыраны. Был фекерҙәр берҙәй үк Ҡаранай батырға ла, тарихыбыҙға һәм хәҙергебеҙгә лә ҡағыла. Һеҙҙең иғтибарға шул сығыштарҙан өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.**

# ЗАМАНАЛАР ХӘТӘР БУЛҒАН ҺАЙЫН,

## Батыр тыуыр башҡорт ерендә!

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре докторы:**

- Беҙгә: "Һеҙҙең милли геройҙарығыҙ бунтарҙар, милләтселәр, власҡа ҡаршы барыусылар", - тип әйтеүселәр ҙә бар. Эйе, беҙҙең милли геройҙарыбыҙ халҡыбыҙ азатлығы өсөн көрәшеүселәр, сөнки тарихыбыҙ шундай. Беҙҙең милли геройыбыҙ Салауат, Кинйә, Ҡаранай, Вәлиди, Бабич, Рәми...

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Ҡаранай Моратовтар һымаҡ, көрәште беҙгә хәҙер ҙә дауам итергә тура килә. Көрәш хәҙер ҙә бара, хәҙер ҙә республикабыҙҙы, халҡыбыҙҙы инҡар итергә тырышыусылар бар. Республикабыҙҙы, халҡыбыҙҙы, уның телен, булмышын һаҡлап ҡалыр өсөн әлеге көндә лә көрәш дауам итә. Рафаэль Зинуровтың Ҡаранай батырға ҡуйған һәйкәле лә шул көрәштең бер формаһы. Әлбиттә, һәйкәлдәр Сыртлановтарға, Туҡаевтарға, Шаһишәрип Мәтиновҡа, Бабичҡа ла кәрәк. Үҙебеҙҙең бөйөк шәхестәребеҙҙе хәҙер күтәреп ҡалмаһаҡ, күп нәмәгә һуңлауыбыҙ бар. Ни өсөн тигәндә, заман шул тиклем үҙгәрә һәм шул арала үҙ тарихын белмәгән бер нисә быуын йәштәр үҫеп өлгөрә. Етмәһә, беҙҙән Дәүләт Думаһына киткән депутаттарҙың ҡайһы берҙәре: "Ни өсөн һеҙ Вәлидиҙе, Салауатты күтәрәһегеҙ? Ниңә был республика Башҡортостан тип атала?" - тигән дәғүә менән дә сығыш яһай.

Ҡаранай Моратов тураһында һөйләгәндә, уның Пугачев полковнигы булыуы хаҡында телгә алырға яраталар. Пугачев етәкселегендәге крәҫтиәндәр һуғышы менән башҡорт күтәрелешен бутарға ярамай. Улар икеһе ике төшөнсә. Пугачевсылар күберәк социаль мәсьәләләрҙе күтәреп сығыш яһаһа, башҡорт халҡы милли азатлыҡ өсөн көрәшкән. Ҡаранай Моратов - башҡорт халҡы хоҡуҡтарын яҡлаусы милли азатлыҡ хәрәкәтенең бөйөк етәксеһе. Уны Пугачевҡа ғына бәйләп ҡарау дөрөҫ түгел.

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ, филология фәндәре докторы:**

-Әле хәтеребеҙ тере саҡта батырҙарыбыҙҙың, күренекле шәхестәребеҙҙең иҫтәлегенә таш ҡуйып булһа ла, унда яҙыуҙар ҡалдырайыҡ. Үҙебеҙҙең ҡулдан килгәнде эшләп ҡалайыҡ. Киләһе быуындар уларҙы үҙ заманына ҡулай әйбер менән алыштырыр. Ҡаранай Моратовҡа һәйкәл бик унайлы урынға һәм мәғәнәле итеп ҡуйылған. Ҡаранай алдында рәткә теҙелгән һалдаттар кеүек ике Советтар Союзы Геройына һәйкәл - Сафа Хәсәнов менән Абдулла Әхмәтов баҫып тора. Уларға полковник Ҡаранай Моратов "Равняйсь! Смирно! Равнение на середину!" тип, халҡына батырҙарының сафҡа теҙелеүе хаҡында килеп рапорт бирер кеүек. Башҡорттар һәр ваҡыт Рәсәй менән килешеү мөнәсәбәтендә йәшәгән. Салауат та, Ҡаранай ҙа шул килешеүҙәр бер яҡлы боҙолған өсөн ҡан түккән. Был һәйкәлде асыу ҙа беҙҙең ошо йолабыҙҙы иҫкә төшөрә: "Беҙ һәр ваҡыт килешеү яҡлы, беҙҙең менән шаярырға ярамай..."

**Илгиз СОЛТАНМОРАТОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:**

-Батырҙарыбыҙға һәйкәлдәр күп кәрәк әле. Ҡаранай батыр тураһында "Салауаттың ҡылысташы, Кинйәнең дә яу юлдашы" тип йырлана. Ҡаранай аҡылы менән дә, көсө менән дә дан тотҡан, катмарлы тормош юлы үткән шәхес. Нисек кенә булмаһын, һуңғы ваҡытта батырҙарыбыҙҙы иҫкә алыу, уларҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса байтаҡ эш башҡарыла. Яңыраҡ ҡына Көйөргәҙе районының Яҡшымбәт ауылында Мишәүле Ҡарағужаҡ бейгә һәйкәл, Благовар ерендә мең ырыуының данлыҡлы Ҡәнзәфәр бейе исемендәге тарихи-мәҙәни үҙәк асылды. Шулай ҙа әлегә тиклем беҙҙә аяғүрә баҫып торған башҡорт батырының һәйкәле юҡ. "Искра" кинотеатры алдындағы бестәтәү малай һәйкәлен беҙ был исемлеккә индерә алмайбыҙ. Әлегә беҙ Баймаҡ районы менән һөйләшеүҙәр алып барабыҙ. Скульпторыбыҙ был район үҙәгенә ҡуйыр өсөн Алдар батырҙың аяғүрә баҫып торған һәйкәленең эскизын эшләп ҡуйған. Алла бирһә, Баймаҡ ҡалаһының уртаһында Ҡаранай Моратовтың ҡартатаһы Алдар батырҙың һыны ҡалҡыр, тип ышанабыҙ. Һәйкәлдәр асыу ғына түгел, батырҙарыбыҙҙың исемдәре онотолмаһын өсөн уларҙың исемен балаларыбыҙға, ейәндәребеҙгә, бүләрҙәребеҙгә, тыуарҙарыбыҙға ҡушайыҡ.

**Марс ЮЛДАШЕВ, медицина фәндәре докторы, Ҡаранай батыр вариҫы:**

-Ҡаранай батырға һәйкәл асыу ғына түгел, исеме лә юғалып барғанда тарихсыларыбыҙ оло ҡаһарманлыҡ яһаны, уның тураһында өйрәнеп, һынын һәйкәл кимәленә тиклем күтәрҙе. Бынан бер нисә йыл элек кенә беҙ был хаҡта хатта хыяллана ла алмай инек. Рәхмәт уларға! Рафаэль Зинуровҡа рәхмәт! Хәҙер инде Ҡаранай батырыбыҙ хаҡында бар республика белә. Ни өсөн кәрәк һуң беҙгә бындай һәйкәлдәр? Һәйкәлдәр тереләр өсөн кәрәк. Батырҙарын данлаған, үткәнен һанлаған халыҡтың ғына киләсәге бар. Замандың емерткес еле беҙҙең Ҡаранай ауылына ла килеп ҡағылды. Ауылыбыҙ бөтөүгә табан бара, унда мәктәпябылды, өйҙәр һәм кешеләр һаны кәмей. Ошондай шарттарҙа Ҡаранай батырыбыҙға һәйкәл асылыуҙың ауылыбыҙ киләсәгенә йоғонтоһо булырына өмөтләнәбеҙ. Ҡаранай ауылы ҙур шәхестең нигеҙ һалған ауылы, уның ауылын һаҡлау батыр иҫтәлегенә тоғролоғобоҙҙо ла иҫбат итер.

Ҡаранай Моратов Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫланов менән бер рәттә тора торған шәхес, бөрйән ырыуы батыры. Ул 1773-1774 йылдарҙа көньяҡ-көнсығыштағы барған барлыҡ яу хәрәкәттәренең етәксеһе.

**Нәҙир ҠОЛБАХТИН, тарих фәндәре докторы:**

-Ҡаранай батыр минең күҙаллауымда иң беренсе нәүбәттә яугир. Мин Ҡаранай Моратовты башҡа яу башлыҡтарынан нығ айырған тарихи факттарға барып юлыҡтым. Ҡаранай Пугачевтан һәм Зарубиндан ҡала хәрәкәт итеү масштабы һәм ғәскәрендәге яугирҙар һаны буйынса өсөнсө урында тора. Уның ғәскәренең һаны 12 меңгә барып еткән. Зарубинда - 15, Пугачевта - 25-35 мең самаһы. Ҡаранай Моратов хәрәкәт иткән майҙан да ҙур ғына булған. Марат Мәхмүт улы менән килешәм, Ҡаранай Моратов, һис шикһеҙ, башҡорт милли азатлыҡ хәрәкәте башлығы, әммә ул был сикте лә үтеп, Рәсәй масштабындағы һынға әүерелә.

1773 йылдың ҡышында Һарытау губернаһы крәҫтиәндәре үҙҙәрен ҡан илатып йәшәткән помещикты ҡулға төшөрә. Уларҙың помещикты язалап үлтереү хоҡуғы булмағанлыҡтан - был хоҡуҡ тик Петр III батшала (Емельян Пугачевта) ғына була - улар Һарытауҙан алып Минзәләгә тиклем юл үтә. Улар был юлда бик ныҡ арый, асыға,

> **ҠАРАНАЙ БАТЫРҒА**
>
> *Яҙыҡмы ни, әгәр яугирлыҡты*
> *Ҡаранайға тиңләп үлсәһәк?!*
> *Заманалар барған алышынып,*
> *Ә Ҡаранай илдә үлмәгән.*
> *Ҡабатлана ул һәр йәш быуында,*
> *Ҡаранайҙың ҡөре бөтмәгән!*
>
> *Ҡаранайҙың оран исеме бөгөн*
> *Яңғырай ерҙә һәр кем теләндә.*
> *Батыр данын тоғро дауам итеп,*
> *Ҡаранайҙар тыуыр илемдә.*
> *Заманалар хәтәр булған һайын*
> *Батыр тыуыр башҡорт ерендә!*
> *Ҡаранайҙар тыуыр бөгөн дә...*
>
> **Ҡәҙим АРАЛБАЙ, шағир, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.**

✓ *Ҡаранай грамоталы булған, төрки, рус телдәрен яҡшы белгән. Уның Пугачевтың хәрби коллегияһы секретары менән алышҡан хаттары һаҡланған. Ул хаттарҙа коллегия секретары Ҡаранайға "хөрмәтле полковник" тип өндәшә.*





йонсойҙар. Шул рәүешле улар саманан тыш оҙон көүҙәле, ҡарағусҡыл йөҙлө, ҡара һаҡаллы Бүгәс полковнигы Ҡаранай Моратов ҡаршыһына барып баҫа. Ҡаранай уларға яҡты йөҙ күрһәтә, юлсылар мунсала йыуына, тамаҡ туйҙыра һәм йоҡларға ята. Крәҫтиәндәр иртәнсәк йоҡонан тороуға дар ағасында аҫып ҡуйылған помещикты күрә. Ошо бәлкәй генә деталь Ҡаранайҙың Пугачевтан башҡа ла ошондай ҡарарҙар сығара алырлыҡ үҙ аллы полководец, яу башлығы булыуы хаҡында һөйләй.

Тағы бер факт. 1773 йылдың 25 октябрендә Тимашевҡа Таулыҡай ауылында барлыҡ башҡорт яу башлыҡтары йәшеренеп ятыуы хаҡындағы хәбәр килеп етә. Яу башлыҡтарын Таулыҡайҙан 25 саҡрым алыҫлыҡта Ирәндек тауҙарында ҡулға алалар. Тимашев барлыҡ яугирҙарҙы Ҡаҙанға оҙаттыра, тик Ҡаранайҙы ғына үҙенең янында ҡалдыра. Дөрөҫөн әйткәндә, Ҡаранайҙың абруйы ҙур була һәм ҡайһы юлдан алып барғанда ла башҡорттарҙың ҡарауылға һөжүм итеп, Ҡаранайҙы азат итеүенән ҡурҡа. Тимашев Рейнсдорпҡа ошо шиген белдереп хат яҙа. "Һин минә уны депеша менән ебәр. Башҡорттар уны ҡулға алынмаған тип уйлаһын", тип яуап бирә Рейнсдорп. Ҡаранайҙы ошондай хәйлә менән Ырымбурға алып килеп, Ҡаҙанға оҙаталар. Был факт властарҙың Ҡаранайға тейергә ҡурҡыуы хаҡында һөйләй. Властар хатта уның тотҡон булыуын танырға ла ҡурҡа. Кемдер уның үҙ ирке менән килеп баш һалыуы хаҡында һөйләһә, был ысынбарлыҡҡа тура килмәйәсәк. Потемкин Ҡаранайҙы Мәскәүгә алып килеүҙәрен талап итеп хат яҙа, әммә уны Мәскәүгә тотҡон сифатында түгел, ә ҡәҙимге кеше рәүешендә алып килергә ҡуша. Ҡаранай Моратов ике пугачевсыны Мәскәүгә оҙатыусы отделение һалдаттарының командиры сифатында Мәскәүгә килә. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: баш күтәреүсегә властарҙың бындай мөнәсәбәтен бары тик Ҡаранайҙың абруйы менән генә аңлатып була бит.

**Салауат ТАЙМАСОВ, тарих фәндәре кандидаты, Ҡаранай батыр вариҫы:**

-Дәүләт хоҡуғы теорияһына нигеҙ һалыусы XVII быуаттың күренекле инглиз философы Томас Гот кешеләрҙең тәбиғи хоҡуҡтарын инҡар итеүсе власҡа ҡаршы ойошторолған ихтилалды хуплай. Крепостнойлыҡ йәшәгән Рәсәйҙә социаль, сәйәси иҙеү, ғәҙелһеҙлек һәм ҡанһыҙлыҡ хөкөм һөрә. Шуға күрә Емельян Пугачев етәкселегендәге ихтилалда Рәсәйҙең күп ҡатламлы халҡы ҡатнаша. Насар ҡоралланған баш күтәреүселәр ике йыл буйына донъяның иң көслө профессиональ армияһына ҡаршы батырҙарса һуғыша. Ихтилалдың үҙәгендә башҡорттар була, ә Нуғай юлы бигерәк тә тәүге этапта ихтилалдың төп хәрәкәт йүнәлеше һанала. Нуғай юлының яу башсыһы Ҡаранай Моратов Ырымбурҙан алып Ҡаҙанға тиклемге арауыҡта хәрәкәт итә. Уның ғәскәрендә башҡорттар, рустар, сыуаштар, мариҙар, удмурттар, ҡалмыҡтар һуғыша. Ә инде Юрматы улусы яугирҙары Ҡаранай ғәскәренең иң төп өлөшөн тәшкил итә. Ҡаранай батыр һымаҡ шәхестәребеҙҙең исеме тарихҡа ғына түгел, хәҙерге көндә лә данлауға хоҡуҡлы. Беҙ Ҡаранай батырға һәйкәл асып, атай-олатайҙарыбыҙҙың рухы алдында үҙебеҙҙең әхлаҡи бурысыбыҙҙы үтәйбеҙ.

**Инна ГВОЗДИКОВА, тарих фәндәре докторы:**

-Ҡаранай Моратов, һис шикһеҙ, 1773-1775 йылғы крәҫтиәндәр һуғышының бөйөк полководецы булған. Ҡаранай, Салауат батырҙарҙың яу юлдары киҫешмәһә лә, улар икеһе лә бер үк ваҡытта Емельян Пугачевтан ихтилал мөхитен киң йәйелдереү буйынса фарман ала. Был фарманды үтәү өсөн Салауат Көңгөргә, Ҡаранай Сарапулға табан ҡуҙғала. Ошо урында бер генә фактҡа туҡталғым килә. Юл ыңғайында Әнгәсәк ҡалаһында Ҡаранай священникты саҡырып һөйләшеп, уны Сарапул улусына килешергә ебәреп, ҡан ҡойошһоҙ ғына уларҙың ҡаршы алыуын ойоштора. Шулай итеп, Ҡаранай Моратовтың 2 мең яугирҙан торған отряды ҡаршылыҡһыҙ ғына үҙенә Сарапул улусын ҡушыуға өлгәшә. Был ваҡиға Ҡаранайҙың мәшһүр ойоштороусы булыуын да дәлилләй. Артабан Ҡаранайға хәҙерге Татарстан еренә һуғыш хәрәкәттәре алып барырға тура килә. Ул Минзәлә һәм Алабуға ҡәлғәләренә һөжүм ойоштора. Нуғай юлында ла Ҡаранай хәрәкәт итеп, Ҡаҙан яғына юлланған Пугачев ғәскәре артынан төшөүселәрҙе тотҡарлай.

Архивтарҙа Ҡаранай Моратовтың эшмәкәрлеге хаҡында байтаҡ ҡына тарихи материалдар, батырҙың үҙ ҡулы менән яҙған документтары һаҡлана. Ҡаранай грамоталы булған, төрки, рус телдәрен яҡшы белгән. Уның Пугачевтың хәрби коллегияһы секретары менән алышҡан хаттары һаҡланған. Ул хаттарҙа коллегия секретары Ҡаранайға "хөрмәтле полковник" тип өндәшә, эштәрендә уңыш, ныҡлы һаулыҡ теләй. Был шулай уҡ Ҡаранай Моратовтың ниндәй шәхес булыуы хаҡында һөйләй. Восстание башлыҡтарының береһе Тороновтан һорау алыу протоколдарынан күренеүенсә, Ҡаранай Моратов мародерҙар, кеше талаусылар менән аяуһыҙ көрәшкән. Ихтилал тамамланғас, батша хөкүмәте Ҡаранай Моратовҡа үҙенең волосы менән етәкселек итеү бурысын ышаныс тапшыра. Был ышаныста иң беренсе нәүбәттә халыҡтың үҙ шәхесенә мөнәсәбәтен күрмәү ҙә мөмкин түгел. Ихтилал тамамланған 1775 йылда уҡ башҡорттар Рәсәйҙең көньяҡ сиген һаҡлау өсөн ике мең ярым яугир ебәрә.

**Марсель ФАРХШАТОВ, тарих фәндәре кандидаты:**

-Ҡаранай Моратовҡа һәйкәл асҡанда мин бөтөнләй икенсе юҫыҡта ла уйландым. Германияла, Францияла, Бельгияла йөрөгәндә уларҙа беҙҙәге кеүек батырҙар, күренекле шәхестәргә һәйкәлдәр юҡ. Уларҙа булған һәйкәлдәр лирик пландағы ғыналар. Был хәл мине уйландырмай ҡалманы, әлбиттә. Үҙемсә уларҙың батырҙары юҡмы икән ни, тип тә уйландым. Һуңынан шундай һығымтаға килдем: әгәр ҙә кеше, милләт закон тарафынан яҡлаулы һәм һаҡлаулы булһа, уның ирекле үҫеше һәр йәһәттән тәьмин ителһә, бының өсөн шарттар тыуҙырылһа, кем белә, бәлки, һәйкәлдәр ҙә кәрәк булмаҫ ине. Был, әлбиттә, минең генә фекерҙәрем. Шулай ҙа беҙҙең ил үҫешенең был этабында һәйкәлдәр кәрәктер тип уйлайым. Әммә Ислам диненең һәйкәлдәргә, һындарға табыныуҙы тыйыуы ла юҡҡа ғына түгел. Һәйкәлдең ихтыяжы шунда: кеше ауырлыҡ кисергән саҡта батыр йә изге кешенең һәйкәле янына барып, унан ярҙам һорай. Мин был фекерҙе геройҙар беҙгә кәрәкмәй, тигән принциптан сығып әйтмәйем. Шул уҡ ваҡытта йәмғиәт камил булһа, ундай геройҙар ихтыяжы ла, һәйкәлдәр ихтыяжы ла үҙенән-үҙе юҡҡа сығыр ине. Ҡалайтаһың, беҙҙең илгә һәйкәлдәр кәрәк әле. Бер яҡтан ҡарағанда, һәйкәлдәр цивилизация күрһәткесе, икенсе яҡтан ҡарағанда, киреһенсә лә. Мин, мәҫәлән, Өфөнөң матур бер урынында Мөхәмәтша Буранғоловтың һынын күрергә теләр инем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Марсель Фархшатов менән килешергә лә, килешмәҫкә лә була. Ысынлап та, беҙ әлегә камил йәмғиәт төҙөп, илебеҙҙә йәшәгән һәр бер граждандың, һәр милләт ағзаһының ирекле, тулы ҡанлы йәшәйеше һәм үҫеше өсөн шарттар тыуҙыра алмайбыҙ. Әммә беҙгә һәйкәлдәр уның өсөн дә кәрәк түгелдер, сөнки һәйкәлдәр беҙгә тарихыбыҙҙы рухыбыҙға һеңдереү, тарихыбыҙ менән ғорурланыу өсөн дә кәрәк. Икенсенән, алға киткән илдәрҙә һәйкәлдәргә ихтыяж йәшәү шарттарының яҡшы булыуы менән инҡар ителһә лә, улар үҙ геройҙары тураһында бар донъя ҡарай алырлыҡ бына тигән фильмдар төшөргән. Ҡаранай батыр кеүек башҡорт батырҙарына асылған һәйкәлдәрҙе ошо мөһим ғәмәлдең тәүге баҫҡысы итеп күрге килә.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БАТЫРҘАРҘЫҢ ИСЕМЕН БЕЛ!*



# УРАЛТАУ ОСОРҒАН БӨРКӨТТӘР

## Фәттәх Ибраһимов

Фәттәх Әҙелмырҙа улы Ибраһимов 1892 йылдың 22 мартында Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Әлмөхәмәт ауылында (хәҙерге Әбйәлил районы) тыуған. 1917 йылғы революцияға тиклемге биографияһы тураһында мәғлүмәттәр юҡ. 1918 йылда аҡтар яғында башҡорт армияһы сафтарында, 1-се Башҡорт кавалерия полкында хеҙмәт иткән булырға тейеш.

1920 йылда Польша фронтында ул Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһында 28-се кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы вазифаһында була. 1920 йылдың июнендә Киев операцияһы барышында ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була.

1921 йылдың 17 февралендә сыҡҡан Реввоенсоветтың 57-се фарманында былай тиелгән: "1920 йылдың 5 июнендә Башҡорт кавалерия бригадаһы Пиняево ауылына һөжүм иткән ваҡытта ул бер эскадрон менән дошман батареяһының артына үтеп инеп, ҡапыл ябырылып, уларҙы ҡасырға мәжбүр итеп, кешеләре менән бергә ике орудиены, боеприпастарҙы, 2 пулемет һәм ике ылауҙы ҡулға төшөрҙө". Ҡыҙыл Байраҡ ордены уға 1922 йылда тапшырыла.

Фронттан ҡайтҡас, 1922 йылға тиклем Бөрйән-Түңгәүер кантоны хәрби комиссары булып хеҙмәт итә. Артабан Иркутск ҡалаһында Себер тау институтында уҡып, тау инженеры һөнәрен үҙләштерә. Баҡырүҙәк һәм Ишбирҙе мәғдәнлектәрендә эшләй, артабан Түбә мәғдән идаралығының (рудоуправление) управляющийы вазифаһын башҡара. БАССР-ҙың почетлы таусыһы (горняк) исемен ала. 30-сы йылдар аҙағында эҙләнеүҙәр партияһы начальнигы булып эшләй. Репрессия елдәре Фәттәх Ибраһимовты ла урап үтмәй, 1937 йылдың 21 августында ҡулға алына. Шул уҡ йылдың 8 декабрендә Өфөлә атыла.

## Һарун Мортазин

Һарун Фаварис улы Мортазин 1893 йылда Ырымбур губернаһы Вернеуральск өйәҙе Күбәләк-Тиләү улысының (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Әхмәҙей Мортазиндың бер туған, Муса Мортазиндың ике туған ҡустыһы.

Һарун Мортазин 1918 йылдан Әмир Ҡарамышев етәкселегендәге 1-се Башҡорт кавалерия полкында хеҙмәт иткән булһа кәрәк. Артабан ошо полк составында ҡыҙылдар яғына сығып, 1919 йылдың март аҙағында Муса Мортазин менән кире аҡтарға китеп, август аҙағында Башҡорт кавалерия бригадаһы сафында ҡабат ҡыҙылдарға сыҡҡан.

1920 йылда ул Муса Мортазиндың кавалерия бригадаһында взвод командиры булып йөрөй. М. Мортазин үҙенең китабында яҙыуынса, Һарун Мортазин Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән. Әммә "Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием" исемле китапта (Мәскәү, 1926) Һ.Ф.Мортазиндың исеме телгә алынмай.

Ләкин был китапта тулы исемлек бирелгән тип әйтеп булмай. Мәҫәлән, М.Мортазиндың исемлегендә Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы штабы начальнигы Заһит Гәрәев Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән тип телгә алына. Әммә "Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием" китабында З.Гәрәевтың да исеме юҡ. Ләкин уның был орденға лайыҡ булыуы тураһында ышаныслы мәғлүмәттәр бар.

Муса Мортазин Һарунды үҙенең китабында килтергән исемлектә "үлде", тип телгә ала. Әммә "Яу ҡырында һәләк булды", тип яҙмай. Тимәк, Һарун Мортазин Польша фронтында иҫән ҡалып 1920-1927 йылдар тирәһендә донъя ҡуйған булып сыға.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

*✓ Ауылда көнө буйы нимә менән шөғөлләнәсәгеңде белеп тораһың, ә бында күп нәмә һинән генә түгел, ә транспорттың нисек йөрөүенән, юлдағы тығындарҙан һәм башҡаларҙан да тора.*

# Өфө ҡалас ашатмай...

## әммә күңел бушлығын тултыра

**Өфө һәр башҡорт кешеһе өсөн ниндәйҙер бер тылсымлы көскә эйә булған ҡалалыр ул. Һәр кем бында тартыла, әммә текәрәк холоҡло был ҡала бер кемде лә ҡолас йәйеп ҡаршы алмай. Шул уҡ ваҡытта ниндәй генә ауырлыҡтар күрмәһен, Өфөнән берәү ҙә ҡайтып китергә ашыҡмай, сөнки Өфөнө аңлау ҙа, яулау ҙа мөмкин түгел, уны тик яратырға ғына була. Өфөгә һыйынып, унын ҡағиҙәләренә, йолаларына, талаптарына күнеп, үҙ кеше булып китер өсөн, ғәҙәттә, тотош ғүмереңде һалырға тура килә, тиҙәр. Ә бөгөнгө геройҙарыбыҙ - Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡытыусылары Флүрә һәм Юлдаш ШАҺИҒӘЛИНдар баш ҡалаға йәш саҡта түгел, ауылда йорт һалып, балалар үҫтереп, ғүмерҙең ярайһы ғына өлөшөн шул нигеҙҙә үткәргәс килергә батырсылыҡ иткән. Шуға ла әңгәмәбеҙ Шаһиғәлиндар ғаиләһе тураһында ғына түгел, ә Өфөнөң матур урамдары һәм, әлбиттә, сәйер ғәҙәттәре хаҡында ла.**

**▸ Һуңғы ваҡытта ауыл кешеләре - ҡалаға, ҡаланыҡылар ауылға ынтыла. Ярай, йәш кешене ҡалала барған төрлө мәҙәни саралар, белем усаҡтары, күңел асыу урындары әүрәтә икән, ти, ә һеҙҙе, ауылдың иң абруйлы, иң ихтирамлы һөнәр эйәләрен был йәштә ҡалаға нимә тартты?**

**Флүрә апай:** Йәшәгән урынды алыштырырға ынтылыу тәбиғи хәл, тип иҫәпләйем. Был кешенең тәбиғи асылы менән бәйлелер ул. Күңелендә ниндәйҙер бушлыҡ барлыҡҡа килә икән, әҙәм шуны тултырыу мөмкинлеген эҙләй башлай. Ә Өфө - ул башҡорт ҡалаһы, башҡорт иленең баш ҡалаһы, рухи үҙәк, бында һинең бар хыялдарың тормошҡа ашыр кеүек. Өфө мине бәләкәй саҡтан уҡ үҙенә гел тартып торҙо. Үҙем Әбйәлил районынан, беҙҙең эргәлә ҙур ҡала - Магнитогорск булғас, һәр кем балаһын шунда уҡытырға тырыша. Яҡын булғас, йыш ҡайтып йөрөргә, аҙыҡ-түлеген ташырға мөмкинлек бар, икенсенән, бала һәм ата-әсә араһындағы яҡынлыҡ һаҡланып ҡала. Мин уҡырға Өфөгә китәм, тигәс әсәйем бер аҙ ҡаршы килгәйне, мин үҙ һүҙемдән тайпылманым һәм юғары белемде баш ҡалала алдым. Йүнәлтмә буйынса Йылайыр районы Йомағужа ауылына эшкә ебәргәйнеләр, шунда кейәүгә сыҡтым. Ашҡаҙар ауылында яңы мәктәп асылғас, йәш белгестәр булараҡ, унда эшкә киттек. Ике йылдан кире Йомағужаға ҡайттыҡ һәм шунда торҙоҡ та ҡалдыҡ. Өфө тағы бер матур хыял ғына булып ҡалды. Балалар бәләкәй саҡта һиҙелмәһә лә, улар ҙурайып, ситкә китә башлағас, күңелдә бушлыҡ биләп алды. Шул арала Хәйҙәр ҡустым Өфөгә йәшәргә күсте, уның еле лә ҡағылғандыр инде. Икенсе ҡыҙым Гөлгөнәне уҡырға индерергә алып килгәндә мин эстән генә Өфөлә йәшәйәсәгебеҙҙе хәл итеп тә ҡуйҙым.

**Юлдаш ағай:** Пенсияға сыҡҡас, былай ҙа Сибайға йәки Өфөгә күсеп йәшәрбеҙ, тигән уй бар ине барлыҡҡа. Пенсияға тиклем түҙмәнек инде, бар кешене аптыратып, ҡорған донъябыҙҙы ташлап, сыҡтыҡ та киттек. Флүрәнең мәсьәләне ҡапыл ғына хәл итә торған холҡо быға булышлыҡ итте. Ғөмүмән, кеше һәр ваҡыт үҙен раҫлап йәшәй. Бәлки, беҙ ҙә үҙебеҙҙең хыялдарыбыҙҙы тормошҡа ашырып бөткәс, кире ауылға ҡайтырға теләк тыуыр, кем белә инде? Әлегә Өфөгә килеүебеҙгә бер тапҡыр ҙа үкенгәнебеҙ булманы.

**▸ Өфө нисек ҡаршы алды һеҙҙе? Баш ҡаланың ниндәй сәйер ғәҙәте һаман да хайран ҡалдыра, нимәгә өйрәнеп китеүе ауырыраҡ булды?**

**Флүрә апай:** Тәжрибәле математик булараҡ, эш табыуы ҡыйын булманы. Тик русса уҡыта башлауы ауырыраҡ булды. Телде шымартыу өсөн иң тәүге шарт - шул телдә күберәк аралашыу инде, хәҙер был йәһәттән проблемалар юҡ. Тауышҡа оҙаҡ өйрәндем, урамда машина тауыштары баҫылмайынса, ҡайһы саҡта йоҡлай ҙа алмайым. Ауылда көнө буйы нимә менән шөғөлләнәсәгеңде белеп тораһың, ә бында күп нәмә һинән генә түгел, ә транспорттың нисек йөрөүенән, юлдағы тығындарҙан һәм башҡаларҙан да тора. Ваҡыт та ҡалала тиҙерәк үтә, йәшәү темпы ла тиҙерәк. Шуға ла ғүмер тиҙерәк аҡҡан кеүек, барыһы ла күҙ асып йомған арала үтеп бара.

**Юлдаш ағай:** Ауылда гел кешеләр араһындаһың, гел кем менәндер аралашаһың. Ә ҡаланың үҙ ҡанундары, бында бер йортта йәшәгән кешеләр бер-береһен танымай. Хатта милли берҙәмлек тә юҡҡа сыҡҡандай бында. Шулай тиһәм дә, хәҙерге йәштәрҙең үҙ милләттәштәре менән тығыҙ аралашып йәшәүен, башҡортса сараларға йөрөп күңел асыуын беләм, тимәк, киләсәктә был юҫыҡта ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр тағы буласаҡ. Ҡалаға сығып китәм, тип хәл итеү - бер, бында йәшәү урыны ла табырға кәрәк бит әле. Тәүге мәлдә Флүрәнең туғандарында йәшәп торҙоҡ, унан ятаҡтар буйлап йөрөргә тура килде. Килгәс тә, төҙөлә башлаған йортҡа аҡса һалғайныҡ, быйыл инде фатирлы булырбыҙ, тип торабыҙ. Ауылда эш күп, тик ҡалала ла ҡул ҡаушырып ултырып булмай. Унда туғандар ярҙам итә, бында барыһын да үҙең өсөн үҙең эшләйһең.

**Флүрә апай:** Ҡала ауыл түгел, былай ҙа һәр мөйөшөнән һалҡынлыҡ бөркөлгәндәй тойола, етмәһә, беҙ күскән йылда ҡыш бигерәк һыуыҡ булды. Ҡыҙҙар юғары уҡыу йорттарында уҡығас, ятаҡта йәшәне. Ғәзинур улыбыҙ тәүҙә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡыны. Уны етенсе яртыла уятып, сығарып ебәрә инек. Әле үҙебеҙ эшләгән 158-се башҡорт гимназияһына күсерҙек. Шуға Ғәзинурға әҙерәк ыҙаларға тура килде инде.

**▸ Бер нисә йыл Өфөлә йәшәп ҡараған кешеләр булараҡ, ауылды маҡта ла, ҡалала тор, тигән әйтемде хәҙер нисегерәк аңлайһығыҙ?**

**Юлдаш ағай:** Беҙ, ҡалала кешеләр аҡ ҡалас ашап йәшәй, тип, анһатҡа өмөтләнеп килмәнек. Ҡалала бушыраҡ ваҡыт һәм, әлбиттә, мөмкинлектәр күберәк, был балалар тәрбиәләүҙә бик мөһим. Улыбыҙ, мәҫәлән, футбол, баскетбол уйнарға ярата, бер нисә йыл кикбоксинг менән шөғөлләнде, хәҙер һуғыш самбоһы секцияһына йөрөй. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, ҡаланың өҫтөнлөктәре күберәк. Шулай ҙа ауылда ла, ҡалала ла тырыш булмаһаң, донъя көтөүе ауырға тура килә.

**Флүрә апай:** Һәр ерҙә лә сәмләнеп йәшәргә кәрәклеге менән мин дә килешәм. Ауылда һәр эш ҡул көсө талап итә. Мал булғас, бесәне кәрәк, иртәнге эштәрҙе бөтөрәм дә, балаларҙы өйҙә ҡалдырып, бесән сабырға китәбеҙ. Йылайырҙағы нигеҙебеҙ бигерәк ырыҫлы булды, малыбыҙ ныҡ уңа торғайны. Етешәр баш эре мал, утыҙлап һарығыбыҙ бар ине. Мәктәптә эшләгәс, ваҡыт та әҙерәк, шуға малды күбәйтмәйек тигәйнек тә, яҡын тирәлә ҡала булмау сәбәпле, унда малдан килем алып булмай.



Һөт әрәм булмаһын тип эшкәртәһең, тик һунынан ҡорот, май кеүек аҙыҡтарҙы ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырап бөтә инем. Әсәйемдәр хеҙмәт менән тәрбиәләгәс, эштән ҡурҡып ултырылманы инде. Төнгә тиклем дәрес әҙерләйем, тандан торам. Балалар үҫкән саҡта балалар кейеме булманы, шул саҡта бәйләп кейҙерә инем.

**Юлдаш ағай:** Флүрә минең иң бәләкәй ҡустымдың класс етәксеһе. Мин әрмелә саҡта әсәйем ҡапыл мәрхүмә булып ҡалғас, бөтә класс менән килеп ярҙам итеп тә йөрөгәндәр. Тағы бер ҡустым әрме сафтарында ине, атай ауырый, өйҙә ҡустымдан тыш, һеңлем дә бар, шуға миңә әрменән иртәрәк ҡайтырға тура килде. Әрмегә тиклем Сибай педучилищеһын бөтөп, бер йыл тирәһе мәктәптә эшләп киткәйнем, кире балалар уҡыта башланым. Был тырыш, аҡыллы ҡыҙ күңелемә бик ятты һәм бер йыл үткәс, беҙ өйләнештек. Шуға ла ул минең туғандарым өсөн әсәй ҙә булды. Мин юғары белем алған саҡта ла, йорт һалғанда ла терәк була белде, ҡул менән дә, һүҙ менән дә ярҙам итте. Күптәр ир һәм ҡатын бер урында эшләргә тейеш түгел, тиҙәр, беҙ, киреһенсә, Өфөгә килгәс, бер йыл ғына икебеҙ ике урында эшләп ҡараныҡ һәм кире бер гимназияла уҡыта башланыҡ.

▸ **Икегеҙ ҙә уҡытыусы, йәш быуын менән эшләйһегеҙ. Баш ҡала балалары ауылдыҡынан нимәһе менән айырыла?**

**Флүрә апай:** Ауылда ата-әсә ни өсөндөр баланың уҡып белем алыуын төп урынға ҡуймай. Арттарынан баҫтырып йөрөп, үҙебеҙ уҡыта инек. Бында улай түгел, һәр бала аңлы рәүештә белем ала, үҙен камиллаштыра. Тик бына компьютер артында күп ултырыуҙан сәләмәтлектәре насарыраҡ булыуына аптырайым. Иҡенсе, өсөнсө партала ултырып, таҡтанан насар күргәндәр бар. Тәүҙә уҡыта башлағанда дәресенде нисек тә үткәреп ебәреү тураһында күберәк уйлаһаң, тәжрибә туплай килә һәр баланы үҙ балаң кеүек яратырға өйрәнәһең. Шуға минең өсөн уҡыусылар араһында айырма юҡ.

**Юлдаш ағай:** Мин хеҙмәт, һыҙма дәрестәренән уҡытам. Ауылда хеҙмәт дәресенә малай кешенең иҫе лә китеп бармай, сөнки ул бәләкәй сағынан ҡулына балға, балта алып үҫә. Ә башланғыс класта ҡағыҙ, сепрәк менән генә булышып ултырып үҫкән ҡала балалары өсөн мастерской әллә ниндәй серле урын кеүек. Хеҙмәт дәресен улар ысын ир-ат дәресе итеп ҡабул итә. Шулай ҙа мин уларҙы ҡатыраҡ тоторға тырышам, тәртип талап итәм.

▸ **Бала - ғаиләнең эске булмышын сағылдырыусы көҙгө, тиҙәр. Балаларығыҙҙың рухлы, әҙәпле булып үҫеүе һеҙҙең ҡаландыра. Тәрбиә сере менән уртаҡлашһағыҙ ине.**

**Флүрә апай:** Уҡытыусының үҙ балаһын тәрбиәләргә ваҡыты ҡалмай, тиеүҙәрендә дөрөҫлөк тә бар инде. Махсус рәүештә ниндәйҙер тәрбиә ысулы ҡулландыҡ, тип әйтеп булмай. Һәр башҡорт ғаиләһендәге кеүек үк, балаларыбыҙ менән башҡортса һөйләштек, гәзит-журналдар уҡыныҡ. Йорт эштәренә үҙемә эйәреп йөрөп өйрәнделәр. Бигерәк тә өлкән ҡыҙым Лилиә йорттағы ҡатын-ҡыҙ эштәренә сос булды. Ә Гөлгөнә - атай ҡыҙы. Ауылда саҡта атаһының һәр әйбере, һәр эш ҡоралы ҡайҙа ятыуына тиклем белгәс, шаярып, завхоз тип йөрөттөк үҙен. Гөлгөнә тыуғас, дауахана уны исемлеккә малай тип яҙып, элеп ҡуйғандар. Ауыл ерендә хәбәр тиҙ тарала. Мин ауылға шылтыратып, ҡыҙ, тип әйтеп өлгөргәйнем. Юлдаш Йылайырға минә килергә сыҡҡан да, юл буйындағы ауылдарҙан, малай, тип ишетеп, шул хәбәргә ышанып килгән. Ошо ҡыҙыҡлы тарих ҡыҙыбыҙҙы атай балаһына әйләндерҙе лә ҡуйҙы шикелле, ул тыштағы атаһы менән ир-ат эшен эшләп үҫте.

**Юлдаш ағай:** Ә Гөзинурҙы ҡала малайы тиһәң дә була. Бәләкәйҙән һалдат кеүек булды ул: иртә менән ятып йоҡлай, иртә тора. Ике апайы булыуға ҡарамаҫтан, үҙенә ҡурсалау бөтөнләй теймәне, үҙ аллы үҫте. Хатта улыбыҙға ҡатыраҡ та булғанбыҙҙыр, тип уйлап ҡуям. Эшһеҙ йөрөмәне, гел эргәмдә булды. Ауылда ла ағастан һырлап төрлө әйберҙәр, йорт йыһаҙдары яһай инек, Өфөгә күскәс тә улым мин алып барған секцияларға йөрөнө, әле лә конкурстарҙа ҡатнаша. Ҡулы ыҫ белә, хәҙер уҡыуҙың мөһимлеген дә аңлай.

**Флүрә апай:** Балаларҙың тормошта лайыҡлы йәшәргә мөмкинлек биргән һөнәр һайлауын теләгәйнем. Ҡыҙҙарыбыҙ икеһе лә яҡшы уҡыны, икеһе лә миҙалсы булды. Лилиә Башҡорт дәүләт аграр университетының иҡтисад факультетын да ҡыҙыл диплом менән тамамлап, эшләп йөрөй, башҡорт егетенә кейәүгә сыҡты. Гөлгөнә быйыл Башҡорт дәүләт авиация-техник университетын тамамлай. Быға тиклем йоҙаҡлаған ҡыҙыллыҡ килтергәндәре юҡ, артабан да һынатмаҫтар, тип ышанам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хәҙер инде бер нисә йыл баш ҡалала йәшәп, яйлап Өфө кешеһенә әүерелә барған Шаһиғәлиндар менән аралашҡан саҡта уларҙың ауыҙынан яңылыш ҡына булһа ла зарланыу һүҙе ишетмәнем. Тормошта үҙен раҫлай алмағандар үҙенең уңышһыҙлыҡтарында башҡаларҙы ғәйепләп йөрөгән саҡта Флүрә апай һәм Юлдаш ағай кеүек көслө кешеләр үҙ яҙмышын үҙе яҙа, милләтенең дә бәҫен күтәрә. Тап шундай көслө шәхестәрҙе Өфө үҙ итә лә инде, ҡалғандар уның шау-шыуы аҫтында йотолоп ҡала.**

Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЙРАМДАР ШӘП...

## иҫеректәр булмағанда



**Уҙған аҙнала баш ҡалабыҙҙа бер юлы өс байрам: Ҡала көнө, Рәсәй көнө һәм милли батырыбыҙ Салауат Юлаев көндәре билдәләнде, ошо айҡанлы ҡаланың бөтә ял парктарында ла концерттар, байрам программалары, спорт саралары ойошторолдо. Йылдағыса, төп саралар В.И.Ленин исемендәге майҙанда барҙы. Быйыл бында тәүге тапҡыр профессиональ ижади коллективтарҙың "Өфө - дуҫлыҡ һәм берҙәмлек ҡалаһы" тип аталған фестивале уҙҙы. Фестивалдә Мәскәү, Силәбе, Ырымбур, Тольятти ҡалаларынан килгән ижади коллективтар, шулай уҡ Учалы ҡалаһы филармонияһы коллективы һәм "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле сығыш яһаны. Байрам саралары байрам салюты менән тамамланды. Көндөң болотло, йонсоу, өшәндергес булыуы баш ҡала халҡының кәйефен бер ҙә төшөрмәне: улар рәхәтләнеп күңел асты, дәртләнеп бейене, төрлө уйындарҙа ҡатнашты. Ошо йәһәттән, тамаша ҡылырға килгән бер нисә кешенән, байрам тураһындағы тәьҫораттары, ғөмүмән, баш ҡалабыҙҙа уҙғарылған ошондай байрамдар тураһында фекерҙәрен белештем.**

**Флүзә АБДРАХМАНОВА, студент:** Был байрамға тамаша ҡылырға быйыл икенсе тапҡыр сыҡтым. Халыҡтың күплеге! Байрам концерты бик оҡшаны, йыйылған халыҡ та ямғыр тип торманы, алҡышлап, бейеп, йырлап торҙо. Халыҡтың кәйефен һауа торошо ғына боҙа алмай икән, тип уйлап ҡуйҙым. Шулай ҙа быйыл былтырғыға ҡарағанда кеше әҙерәк булды. Беҙ дуҫтарыбыҙ менән бергә килдек: имтихан, зачеттарҙан бер аҙ арынып, туйғансы бейенек, күңел астыҡ. Бигерәк тә байрам салюты оҡшаны.Тик иҫеректәрҙең күп булыуы ғына күңелде ҡырҙы: етмәһә, йәмһеҙ итеп һүгенәләр, әҙ генә лә тәртип белмәйҙәр. Әйтерһең дә, был байрам уларға эсер өсөн ойошторолған. Шундай тәртипһеҙлектәрҙе бөтөрә алһаҡ, байрамдар тағы ла күңеллерәк үтер ине.

**Ирина АБДУЛЛИНА:** Мине шуныһы аптыратты: һауа торошо боҙолоп тороуға ҡарамаҫтан, олоһо ла, кесеһе лә тамаша ҡарарға сыҡҡан. Быйыл концертҡа Мәскәүҙең эстрада йондоҙҙарын саҡырмағандар, үҙебеҙҙекеләр генә булды. Быныһы ла яҡшы, беҙҙекеләр нимәһе менән кәм?! Тик әлеге лә баяғы йәштәрҙең һәр икенсеһе иҫерек булыуы күңелде төшөрҙө. Ҡулдарына һыра шешәләре тотоп халыҡ араһында иркен йөрөйҙәр, саҡ ҡына булһа ла уңайһыҙланыу булһасы! Тәмәке тураһында әйтеп тораһы ла түгел, тәтөнөн йөҙгә өрөп китәләр хатта, берәй ерендә өтөп китмәһендәр, тип ҡот осоп торҙо. Ҡыҙҙар бигерәк йәмһеҙ ҡылана, улар өсөн оялып торҙоҡ. Ошондай йәмһеҙ күренештәр бөтә байрамдың йәмен боҙа.

**Рөстәм ВӘЛИЕВ:** Ҡала көнө - һабантуй кеүек оло байрам, ниндәй генә саралар уҙғарылмай, рәхәтләнеп ял итеп алырға мөмкинлектәр күп. Байрамды шулай ҙур кимәлдә ойоштороғандары өсөн етәкселәргә ҙур рәхмәт. Бөгөн балаларыбыҙҙың да ҡыуанысының сиге юҡ, улар өсөн дә мауыҡтырғыс саралар күп булды. Шулай итеп, был көндә ғаиләм менән йыл һайын ял итеп, күңел асып ҡалабыҙ. Шулай ҙа байрам ваҡытында ҡуҙәтелгән кире яҡтар тураһында ла әйтмәй булдыра алмайым: иҫереп йөрөгән йәштәр күп булды. Был хәл, әлбиттә, йыл һайын ҡуҙәтелә. Бәлки, берәй нисек шуға нөктә ҡуйып булыр? Юғиһә, айыҡлыҡ, тәртип, бөхтәлек яратҡан кешеләр тиҙҙән байрамға сыҡмай башлаясаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тамаша ҡылырға килгән халыҡтың фекерен хуплап, мин дә шуны әйтеп үтер инем: ысынлап та, әллә иркенлектән файҙаланып, әллә тыйыуҙар булмағанға һылтанып, был байрамда йыл һайын йәштәрҙең күпләп эсеүе ҡуҙәтелә. Бөгөн республикабыҙҙа айыҡ һабантуйҙар, айыҡ туйҙар, айыҡ байрамдар уҙғарыла башланы, бәлки, киләһе йылдарҙа Ҡала көнөндә лә әҙ генә булһа ла тәртип индереп булыр? Байрам үҙ матурлығында, үҙ бәҫендә һаҡланып ҡалһын, йыйылған бөтә халыҡ та кәнәғәт ҡалһын өсөн әлеге лә баяғы эскелеккә ҡәртә ҡуйырға кәрәк шул.**

Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.

ЗАУЫҠ

# АРҘАҠЛЫЛАР МЕНӘН МАЙҘАН ТОТАМ,

## Ат шәп минең, атҡа ышанам...

**Тамара Ғәниева бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтенең иң егәрле әҙибәләренең береһе. Күп төрлө жанрҙарҙа ижад итеүсе яҙыусы публицистик мәҡәләләре, уйланыуҙары, замандаштары ижады хаҡындағы ентекле һәм етди мәҡәләләре, үҙе уйлап тапҡан жанрҙағы фәһемле парсалары, бигерәк тә юғары художестволы кимәлдәге шиғриәте менән халҡыбыҙҙың уй-фекер кимәлен нәфис әҙәбиәт юғарылығында сағылдырыуға һәләтле замана ижадсыһы булыуын иҫбатланы. "Ул тиклем егәрлелек ҡайҙан?" тигән һорауға шағирә: "Мин халыҡ мөхәббәте солғанышында йәшәйем, шул рухландыра", - тип яуап бирә. Бөгөн беҙ шағирәгә бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек:**

**-Тамара Әхмәтшәриф ҡыҙы, һеҙ бөгөн танылған шағирә. Ә үҙегеҙ шағирә икәнлегегеҙҙе ҡасан аңланығыҙ?**

- Берәүҙәрҙең, өс йәштән үк, тип яуап биреүе мөмкин. Мин иһә, 13 йәштәрҙә әнейем Әминә Аллабирҙе ҡыҙы иһамландырыуы менән шиғырҙар "әтмәлләй" инем, шуға ҡарамаҫтан, бала сағымда шағир булырға хыялланманым. Шағир булырға хыялланыу, батша булырға теләйем, тигән хыялға тиң булыр ине. Батшалар батшанан тыуғаны өсөн генә батша булған кеүек, шағирҙар ҙа Аллаһ тәғәйенләнеше менән генә шағир булып китә. Һеҙҙең гәзиттә дин юлына баҫҡан элекке бухгалтер ханым шағирәләрҙе кәмһеткән фекерҙәр әйткәйне. Нишләп ундай фекергә килде икән? Аллаһтың ҡөҙрәте киң. Ул һәр кемгә үҙенең Ул бүләк иткән мөмкинлектәрен тормошҡа ашырырға рөхсәт итә. Сикләүҙәр уның өсөн ят. Сикләүҙәр кешеләр тарафынан уйлап сығарыла.

Минең шағирлыҡҡа килгәндә... Башта мин күңел торошона, уй-кисерештәр даирәһенә мөрәжәғәт итеп, лирик шиғырҙар яҙҙым. Уларҙы телебеҙ, рухыбыҙ, инаныстарыбыҙ, халыҡ ижады өлгөләре юғарылығы кимәленә еткерге килеү хыялы менән ижад иттем. Халҡыбыҙ зауҡының тамырҙарын пенсияға сыҡҡандан һуң түгел, тыумыштан үҙләштергән кеше булараҡ, беләм: беҙҙә моң-һағышҡа һалған, әле лә бәсен юғалтмаған башҡорт халыҡ йырҙарының авторы - ҡатын-ҡыҙ. Ирҙәре ил мәшәҡәте, яу менән мәшғүл булырға мәжбүр башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары "Сәлимәкәй", "Уйыл", "Сибай", "Зөлхизә" һәм башҡа йырҙарыбыҙҙы ижад итмәһә, беҙ, бөгөнгөләр, моңобоҙ асылын ҡайҙан белер инек?

Шиғриәт юлындағы иң тәүге етди хеҙмәтем - "Ҡыпсаҡтар" поэмаһылыр. Уны халҡыбыҙ, үҙем дә көтмәгәнсә, юғары баһаланы. Поэманы 39 йәшемдә яҙҙым. Шунан һуң тотҡан ҡибламдың ни рәүешле етди һәм яуаплы булыуын бөтә тәрәнлегендә аңланым.

**- Юғары мәҙәниәт иләге аяуһыҙ. Бөтә ижадсы ла, үлгәс булһа ла баһаларҙар әле, тип өмөтләнә."Бөйөклөк" статусын тере саҡта уҡ тырышып-тартышып яулаған бәгзеләрҙең ижады ла үҙҙәре менән бергә үтә лә китә. Ваҡыт аямай, һеперә лә түгә. Киләсәк үлсәүен самалайһығыҙмы?**

- Әлбиттә. 20-30 лирик шиғырыма, "Ҡыпсаҡтар", "Йыһан", "Уралым" поэмаларына, "Тамарис" трагедияһына башҡорттар битараф була алмаҫ ул.

Хәйер... Күп яҙыусылар үҙем үлгәс булһа ла данға сумырырҙар әле тип өмөтләнә, тигәнегеҙ хаҡ. Әммә үҙҙәре тере саҡта "арҙаҡлы" һаналған бәгзеләрҙең ижады үҙҙәре менән бергә үтә лә ҡуя шул. Быныһы ла ысынбарлыҡ. Мин үҙемде гений тип һанамайым. Генийҙар йәшәп килгән системаны үҙгәртеү һәләтенә эйә. Минең ижадым донъяны үҙгәртеп ебәрмәне. Әммә замандаштарымдың күңел һәм зиһен даирәһенә бер ни тиклем йоғонто яһаны шикелле. Телебеҙҙең, художестволы фекер кимәлебеҙҙең мөмкинлектәренә таяндым. Шул рәүешле үҙебеҙ хаҡында һөйләнем.

**- Өҫтәлегеҙҙә нимәләр ята?**

- Уф-ф-ф... Өҫтәлдә түгел, компьютерҙа. Күп нәмәләр. Проза, шиғриәт. Ә Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә балалар өсөн хикәйәләр китабым (1996 йылдан бирле), донъя классикаһынан тәржемәләр китабым, "Наедине с собой" тип исемләнгән рус телендәге беренсе китабым туҙан һурып, илап ята. Мин үҙем иламайым. Йәштәрем кипкән...

**- "Ватандаш" журналында эссегыҙ донъя күрҙе...**

- Шул тиклем күп матур һүҙҙәр ишеттем улар тураһында. Илапилап шылтыратыусылар булды. Аптыраным. "Алдамағанһың. Үҙеңде әллә кем итеп күтәрмәгәнһең. Заманыбыҙ ҡатын-ҡыҙының ысын образын тыуҙырыуға өлгәшкәнһең", тиҙәр. Күп, бик күп райондарҙан шылтыраттылар. Үҙемдең райондыҡылар ғына шылтыратманы... Уҡыманылар микән... Шылтыратыусылар маҡтай. Маҡтауҙы кем яратмаһын. Ныҡ күңелем булды.

**- "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға нимә әйткегеҙ килә?**

- "Киске Өфө"нөң тәүге һанына уҡ сәләмләү мәҡәләһе яҙғайным...

Һуңынан да яҙышып тоҙом. Артабан да дуҫ булырбыҙ тип өмөтләнәм. Гәзиттең тотҡан ҡиблаһы минекенә оҡшаш.

*Тамара ҒӘНИЕВА*



### Миҙгелдәр

Эй йөлләне ҡышын инә мышы
Мөгөҙҙәре йомшаҡ боланды.
Беҙ ул йылды никтер һиҙмәнек тә
Самаларҙан сыҡҡан буранды.

Беҙ ул йылды үтә гәмһеҙ инек,
Биләмәбеҙ - һөйөү яланы.
Тик икебеҙ генә сиккән бәхет
Кемебеҙҙең икән даланы.

Ә ул яҙҙа унды умырзая -
Күҙ ҡыҙырлыҡ шәлкем бәйләме.
Тыйылыуҙан уҙған күңелебеҙ
Майҙандарға беҙҙе әйҙәне.

Тыйылыуҙан уҙған күңелебеҙ
Тауҙар ашты, дала ҡыҙырҙы.
Баш сайҡаны елдәр,
Киҫәтепме
Тиҙ уңа, тип, үтә ҡыҙылды.

Ә ул йәйҙә һөтлөгәндәр һутлы,
Ҡуҙғалаҡтар ҡымыҙ татлы ине.
Арыштарҙы баш әйҙереп үпкән
Миләүшәләр бигерәк саф ине.

Миләүшәләр ҡайһы араларҙа
Күҙ алмаңды күккә буяған.
Олаҡты ла йәнем дарьяларға
Ысҡынып та китеп ҡаянан.

Ә ул көҙҙә бигерәк һыуыҡ булды,
Иртә һуҡты ҡырау миләште.
Йыл башында яҡҡан усағыбыҙ
Һүнмәйем тип ҡалай көрәште.

Һүнмәне бит!
Ҡарасай ҙа үтер,
Көн боҙоғо ни ул оҙаҡмы?!
...Тәүләп күрҙем...
Күкһел ҡараштарың
Торналарҙы моңһоу оҙатты...

### Ыҡ йылға

*Фажиғәләр иҫебеҙҙә әле...*

Наҡыҫайған ярың,
Ниндәй һағыш
Эскеңәндә өйкәй,
Талғын Ыҡ?
Һин кисергән, хәйер, иҫкә төшһә,
Ярҙарыңдан сығып иларлыҡ.

Минзәләлә башҡорт баштарынан
Төрмә бурағанда аҡ батша,
Һине кисеп ирҙәр яу саптымы,
Үңәсенә элмәк һалмаҫҡа.

Таш бәгерме башҡорт бисәләре -
Буйһонмайым, тиеп быңауға
Сабыйҙарын ҡыҫып түштәренә
Ташланған да ҡуйған Ыҡ-һыуға.

Һыуҙарыңды кисәм,
Беҙ тере, беҙ иҫән,
Һарғаймасы әле, Ыҡ-йылға.
Әжәл эҙләп килеүҙәрем түгел,
Ниәттәрем - зыярат ҡылыуға.

Ыҡҡа килер,
Әммә ғәрлек тиер,
Баш эйеүҙе халҡым әле лә.
Ыҡ-ышығы уның -
Ил-төйәге,
Тик азатлыҡ гәзиз йәненә.
Ығыш ҡына, наҡыҫ ағымыңа
Тәңкә һибеп китәм, Ыҡ-йылға.
Данлы-зарлы башҡорт хәтерендә
Ҡоромаҫның барыбер күп йылға.

### Йәй таңы

Елбер-елбер томан
Ысыҡ-ысыҡ
Бал тәмләтә сәскәгә.
Һырттан шарлап нур аҡты ла
Бейеп китте сәхрәгә.

Йәй елдәрен ҡосаҡлайым
Йәйәм дә ҡосағымды.
Йәтеш килдегеҙ,
Бергәләп
Терелтербеҙ томан япҡан
Кисәге усағымды.

Таңдарға таң ҡалып бағам,
Ҡанған танһыҡ өҫтөнә.
Етте, елдәр, буямағыҙ
Сәсте ҡылған төҫөнә.

Көнләшеп бер булғандар бар,
Һеҙ арбап һынатмағыҙ.
... Йәнә...
Тәҡәттән арманһыҙ
(Йәҙән күрегеҙ, эй ғорур!)
Йәремде уятмағыҙ!

### Ҡатил

Килтереп тороп хәнйәр ҡаҙанылар!..
Арттан килеп.
Тик мин таныным.
Ник ауманым һуң ул...
Дөмөкмәнем?
Ундайын да мәкер барлығын
Һыйҙырайым нисек эстәремә?
Остоммо мин,
Һуҙылып яттыммы?
Ә дошманым күҙемә баҡтымы?
Һыным ҡатты!
Ҡайҙан ундай нәфрәт?
Яҡшы тигән кешеләр -
Ҡатилмы?
...Ҡаҙанылар хәнйәр...

Йөрәк тере!..
Бәғерем микән саҡма ҡаҡ таштан?
Ҡан түгел,
Ғәр тама осҡайынан...
Аҙағанмы хәнйәр ҡаушауынан?..
Үҙе илай.
...Ҡатил шаҡ ҡатҡан...

## Таң

Наҡаҫ һыуҙа сайҡап аҡ толомон.
Ай хушлашты күкһел Ер менән.
Томан уҙҙы, йырлап аҡҡош йырын.
Һауаланы...
Осто төйләгән.

Һауаланы...
Күктең сөм сүлендә
Күҙ ҡарамдан кесе - бер нөктә.
Йылғам иһә ярына һыйына төштө,
Иреүҙәнме ҡурҡып киңлектә.

Һил һиҙҙерҙе:
Ташҡа, усаҡтарға
Һеңеп ҡалған тауышың -
Ишеттем.
...Йәнәш донъя үҙ ғәменә ҡайта...
Тотҡаһы ла арбай,
Тик ҡурҡыта...
Күҙгә салынып ҡалған ишектең.

Үрмәләне усыма бер ҡырмыҫҡа, -
Эй ҡыуандыҡ яңы көнгә беҙ.
...Аһ был донъя...
Кемебеҙ алдан китер,
Ҡырмыҫҡамы, минме?..
Билдәһеҙ...

## Ысынмы?..

Аяҙ көндә йөшен,
Ҡышҡы ләйсән,
Ҡая ҡырлап елгән күк юртаҡ
Тертләткәндәй,
Тетрәндерер өсөн
Яуланыңмы мине ҡороҡлап?

Йәшәүенең йүне китте, тиеп,
Күнеп бөткәс икәс,
Ҡояштың
Артынан ҙа ҡалмай тағылып йөрөп,
Нур телләнгән Айға мин үҙемдең
Фиғелемде шул саҡ оҡшаттым.

Яуҙы сыуаҡ,
Иңде нәзәкәтлек
Үрәпсеүҙән арыған иңемә.
Донъя йәнә минең яҡлы ине,
Ғүмер тәме балдан татлы ине,

Һорғолтлана яҙған күҙемә
Яғылдымы йәйғор буяуҙары?
(Илап ирей бәғерем ҡырауҙары),
Ҡарашыңдан - илһам осондо.
Әле һаман ышанмайымсы мин...
Һин әйткәндәр...
Ысын-ысынмы?..

## Шаярыу ҡатыш

Тиҙҙән минә шундай көндәр килә:
Ҡулда таяҡ,
Үҙем ямаҡ.
Сабый холоҡло,
Һүҙ күтәреү ҡыйын.
Түргә ултырталар.
Ҡыуанам.

Тиҙҙән килә минә битарафлыҡ.
Көндәр ҡыҙыҡ түгел,
Төн оҙая.
Йән һыҙлауы дауаланыр бәлки,
Тән һыҙламаҫ саҡтар
Аҙая.

Оҙаҡламай дан-шөһрәткә сумам,
Байрамдарға алаҫаҡтар килеп.
Орден тағам.
Талант өсөн түгел -
"За выслугу лет".

## Майҙан тотам

Арҙаҡлылар менән майҙан тотам,
Ат шәп минен,
Атҡа ышанам.
Үҙем ишкән йүгән,
Эйәр - ҡашлы,
Көмөш даға айға оҡшаған.

Хужаһына тартып тиктомалдан
Ҡайырылһа юлдан бер ары.
Һыҙғырмағыҙ.
Еңеүҙәрҙән былай,
Әйҙәй беҙҙе елеү ҡомары.

Йә тапшырҙыҡ,
Елеп бер үтәйек,
Күрһәтәйек сәмде, таһылды.
...Тышауланған!
Елдем һыпырмайса!
...Һөрләктөрҙөм бәйге атымды.

## Балам

Ҡарыныма һыйған ғәзиз балам,
Ҡуйынға ла инде һыймаҫ буйың.
Әммә кендек киҫелгәндән бирле,
Урталайға ярылдым бит инде.
Үҙем-үҙем түгел...
Һиндә - уйым.

Әсә күңеле гел балала...
Эйе...
Һин далала саҡта,
Мин - һағауыл.
Хәтеремдә -
Ҡолонсағым инең...
Айҡашҡаным,
Өйрәлткәндә ағым...
Ҡәлгә булдым -
Ҡупҡан саҡта дауыл.

Буйым менән күтәргәнем кеүек,
Уйым менән күтәрәмен,
Балам.
Ғорурланам,
Ҡайсаҡ бөгәләп төшәм,
Түбәм күктә
Йә ишелә түшәм.
Һин - өмөтөм,
Һин - һулҡыған ярам.

Иман,
Тәүфиҡ,
Мөхәббәт бир,
Раббым!
Ғәзиземде
Мәхрүм итмә гәмдән!
...Ерҙән тороп күккә мин инәләм...
Үҙ Анамдың изге теләктәре
Аҡ нур булып ағыла
Ғаләмдән...

* * *

Йөрәгемдең уйсан ҡараштарҙан
Хыялыйҙар булған мәлгенәһе.
Аҡ-ҡараны белмәй атыла бит
Мөхәббәтле бәхет сәңгелдәге.

Һөйөүемде мин ҡулсалап ҡуям,
Сынйырҙарҙа торһон,
Торһон бәйҙә.
Йөрәгемә ауыр таш бәйләйем,
Аҡыл төптәренә батһын әйҙә.

Тик аҡылым яна,
Дөрләп яна
Йөрәк ҡабындырған ялҡындарҙан.
Минең әле шундай мәлем еткән:
Мөхәббәтем
Үҙе аҡылланған.

## Ауылдаштар

Ауылдаштар!
Тәкбир әйтәм һеҙгә -
Кис энерҙә, шәфәҡ таң атҡанда.
Түгелешеп илап йәлләнегеҙ
Ғәзиз әнейемде юғалтҡанда,
Атай мәрхүмемде оҙатҡанда.

Иң ҡуйҙығыҙ сикһеҙ хәсрәтемә
Уртаҡлашып алып өй беренсә.
Усағынан ырыҫ-ҡотоғоҙҙоң
Ауыл эсе йылы шул көйөнсә,-
Иҫ ингәндән танып белеүемсә.

Зыяратлап рухын әруахтарҙың
Сауап алып ғүмер иткәнгәме -
Йөҙөгөҙҙә һәр саҡ иман нуры,
Күҙегеҙҙә бөтмәҫ һағыш моңо,
Серәшептәр донъя көткәнгәме?

Ауылдаштар!
Күрҙем изгелектәр
Бәрәкәтле генә ҡулығыҙҙан.
Ҡамалдым да төйәк хозурынан,
Ҡомар алдым мәжлес йырығыҙҙан,
Рәхәт сигеп тәғәм-һыйығыҙҙан.

Ташламаған кеүек беҙҙе хәсрәт,
Шатлыҡтар ҙа килер күмәртәләп.
Ҡаҙан аҫып Наҡаҫ тугайында
Һурпа эсәһе бар сеүәтәләп,
Ҡымыҙ уртлайһы бар көйәнтәләп.

## Торатау

"Бына мин!" -
Тип һөрәнләмәгәс тә
Кем битараф булһын аңлауға?
Тауҙа йәшәгәндәр -
Тауҙы күрмәҫ,
Далаларҙың күҙе -
Тауҙарҙа.

Тау умрауын нәфсе умырғанда,
Инрәү иңмәй ниңә илдәргә?
Ишелеп китте лә ти,
Үлде лә ти...
Тәҡдирен һуң кемгә тиңләргә?

Ир яҙмышы,
Тиеп әйтер инең...
(Кәмһетеүем түгел ирҙәрҙе)
Хоҙай биргән кәрҙе күтәрә алмай
Ыҙалана ҡайны берҙәрҙе.

...Торатауҙың олпат дәрт-дарманы
Халҡым тарихына ишара.
Аяу көҫәһә лә сәбәләнмәй,
Үҙ рухына ғына ышана.

Серәшер ҙә...
Һыныр умыртҡаһы,
Ишелер, бәлки, беҙҙең алдарға...
...Мин үҙем дә ҡойолоп төшөрмөн бер
Мохтажлыҡтан һеҙҙең аңлауға.

# КӘЗӘ БАШЛАҒАН ҺАБАНТУЙ

## Хикәйә

Быйылғы һабантуй Ҡыҙылтамаҡ ауылы халҡы өсөн гөрләп үтте. Юҡ, улар һабантуйҙың үҙендә әллә ни дан ҡаҙана алманы. Йөҙҙән ашыу ҡарт-ҡоронан торған иҫке йорт-ҡуралы халыҡ ундай урында ниндәй уңышҡа өлгәшһен дә, ниндәй бүләккә лайыҡ булһын, ти инде. Ана, сусҡалай һимергән Сирбай, 120 кило тартҡан ауырлығымды күтәрә алмаҫтар, тип майҙанға алпан-толпан баҫып сыҡҡан да бит, ҡаланан килгән бер штангист алған да елдергән. "Лып" итеп барып төшкәс, башын күтәреп: "Их, тағы бер 20 килоға һимермәгәнмен, күтәрә алмай ине", - тип үкенеп ята, ти. Киреһенсә, ҡаҡ һөйәктән торған Тимеркәй ҙә йүгереп маташҡан. Хәле бер "круг"ҡа ла етмәгән. Ул да: "Кисә сәмәйҙе күберәк һелтәп ташлағанмын, юҡһа, беренсе урын өсөн телевизор эләктерер инем", - тип, яр башындағы балыҡ һымаҡ ауыҙын бер асып, бер йомоп аҡланып маташа икән. Ярар, ни хәл итәһең, һәр кемгә еңергә тимәгән. Уның ҡарауы, береһе емереп ашай, икенсеһе һемереп эсә белә. Ошо дан да еткән уларға.

Ҡыҙылтамаҡтың үҙ байрамы байрам булды. Уны ҡарт-ҡоролар башланы. Эш шунда, район һабантуйына юлланыусыларҙың юлы улар аша үтә. Бөтә яҡтан килгән машиналар Ҡыҙылтамаҡтың ҙур урамынан елдерә. Бер нисә миҙгел инде. Үткән йылды ла улар аша уҙҙылар. Ауыл сауҙаһы ла бына шул көн башланып китте. Уға Ғәйшә әбейҙең берҙән-бер кәзәһе сәбәпсе булды. Тыуған ауылында һигеҙ тиҫтәгә яҡын йәшәгән әбейгә, килене бәпес табып ике ай үтеүгә, улы Әүхәҙи: "Әсәй, зинһар, килеп ярҙам ит. Юҡһа, семья бизнесенә кәнец килеүе бар", - тип шылтыратты. Ҡаланы яратмаһа ла, нихәл итһен, барырға булды. Өйөн ныҡлы бикләп, күршеһенә йортона күҙ-ҡолаҡ булырға һөйләште. Тик бына уларға кәзәһен генә ҡалдырғыһы килмәне. Бигерәк үҙ һүҙле, бер кемдә лә тормаясаҡ. Кешегә бәлә генә булыр. Өйрәнгән малынан айырылыу ҡыйын булһа ла, Ғәйшә әбей кәзәһен һатырға уйланы. Күршеһе менән кәңәшләшкәс, ике көндән үтәсәк район һабантуйына барыусылар юлына кәзәне сығарырға булды. Әбей кәзә муйынына "Үләнле йылда 6 литр һөт бирә, мамығы 2 ҙур шәлгә етә, оло йөк тартырлыҡ көскә эйә" тигән яҙыу ҙа элеп ҡуйҙы. Тик ун минут та торманы, ҙур ҡара машинанан бағаналай ике ир килеп сыҡты ла, хаҡын әйтер-әйтмәҫтән, ике йәшел аҡса тоттороп, кәзәне тейәп алып та китте. Быны күреп тороусылар Ғәйшә әбейҙең берҙән-бер кәзәһен һатып ебәреү хәбәрен Ҡыҙылтамаҡҡа таратты. Ҡайһы берәүҙәр ваҡ малын шул көндө үк алып сыҡты. Һабантуйҙан ҡайтыусыларға тағы ла бер кәзә, ике һарыҡ, ә инде ҡош-ҡорттарҙан өс тауыҡ һатылды. Хатта Бәлһейә әбейҙең, маҡтай торғас, бер генә сысҡан да тотмаған "Ялҡау" исемле бесәйенә лә алыусы табылды. Бәлки, алмаҫтар ҙа ине, һатып алыусыларҙың 4-5 йәшлек ҡыҙҙары уны ҡосаҡлап алды ла ҡулынан ысҡындырманы ла ҡуйҙы. Атаһына йөҙлөктө сығарып биреүҙән башҡа сара ҡалманы. Ә бына итәк аҫтынан ғына "сәмәй"ен һатырға самалаған Сараның сауҙаһы килеп сыҡманы: уны "Айыҡ ауыл" призы өсөн көрәшеүсе әбейҙәр шул минутта уҡ ҡыуып ебәрҙе. Бер йүнһеҙ бисә арҡаһында милициянан үҙҙәре ҡыуылһындармы?

Әсауҙа бында йылдан-йыл көс ала барҙы. Бигерәк тә быйылғы һабантуйҙа. Бер нисә өҫтәл ҡуйылған, таҙартылған һәм йыйыштырылған юл буйына кем нимә генә алып сыҡманы! Ана Юғары урамынан Тайба әбей улының ун йыл элек ташлап ҡуйған ямауға ғына ярарлыҡ салбарын килтергәйне. Бер нәҙек билле ҡыҙ әйләндереп-тулғандырып ҡараны ла, хаҡын әйткәс, тейешле аҡсаны биреп, салбарҙы кейеп алғас, тубыҡтарынан иҙрәп торған урындарын йыртҡылай башланы. Әбей-бабайҙарҙың иҫе китеп ҡарап торғанын күргәс:

- О'кей, бабушки! Еще раз приеду, если у вас есть такие штаны! - тине.

Бер әбей телен шартлатып ҡуйҙы ла:

- Миндә лә бар ине шул салбарҙың өҫтө, хәйерһеҙ, күкәй һалған тауығым кәрзинәһенә түшәгәйнем бит әле, - тип үкенде.

- Джемпер что ли? Иди, принеси, - тине ҡыҙ, шатлығын йәшермәй. Әбей, янғын сыҡҡанды күргәндәй өтәләнеп, өйөнә йүгерҙе.

Быйылғы Ҡыҙылтамаҡ баҙарында әбей-бабайҙар нәмәләр генә һатманы: ҡыҙыл армеецтарҙың "Буденовка"һы, шуға тиңдәштәге һалдат шинеле, балаҫ һуғыу станогы, күмер һалып ҡыҙҙыра торған үтек, ике пар сабата, бал батманы - бөтәһенә лә эйә табылды. Байтаҡ кеше ҡайһы бер нәмәләргә заказ да биреп китте. Әйтерһең, уларҙы эшләп-яһап сығарырға станоктары бар!

Бына шулай үтте Ғәйшә әбейҙең кәзәһе башлап ебәргән сауҙа һабантуйы. Киләһе йылға әбей-бабайҙар тағы нығыраҡ әҙерләнергә һөйләште. Ҡайһы берәүҙәрҙең эре мөгөҙлө малдарын һатырға ла иҫәбе юҡ түгел. Эшҡыуарлыҡты ауылда ла үҫтерергә ваҡыт!

Сауҙанан арыу ғына аҡса эләктергән әбей-бабайҙар, йорт-ҡураларын рәтләп, айыҡлыҡ хәрәкәтенә лә өлөштәрен индермәкселәр. Кәзә һатыуҙан ғына башланған эш ҙур сауҙа һабантуйына әүерелергә тейеш. Ҡыҙылтамаҡтар әрәмтамаҡтар булманы! Булмаҫ! Улар кемдән кәм?

**Риф МИФТАХОВ.**

✓ *Мейе әүҙемлегенең иң юғары мәле кеше 22 йәшкә еткәндә була. Эксперттар әйтеүенсә, 27 йәштә мейелә тәүге үҙгәрештәр башлана, ә 37 йәшкә еткәс, хәтер ныҡлап насарая башлай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠУРҠҠАНҒА...

## ҡуш күренә

■ Ҡытай һәм Япон халҡы араһында айҙың һәр дүртенсе көнө бәхетһеҙ, тигән ышаныу йәшәй. Табиптар был фекерҙең кешеләрҙең һаулығына йоғонто яһаймы, юҡмы икәнлеген тикшереп ҡараған. Улар 200 мең үлем тураһындағы таныҡлыҡты өйрәнеп, шуны асыҡлаған: һәр айҙың дүртенсе көнөндә үлем осраҡтары йышыраҡ теркәлгән. Ошондай уҡ статистика Европа халҡы араһында ла бар, тик ул 13 һаны менән бәйле.

■ Гарвард университеты ғалимдары фекеренсә, һыйыр, һарыҡ ите, аҡ май, һөт өҫтө, ҡаймаҡ, аҡ икмәк һәм ондан яһалған башҡа аҙыҡ оло йәштә матдәләр алмашыныуын боҙа. Бындай аҙыҡ-түлек ҡулланған 40 йәште үткән ир-ат араһында шәкәр диабеты һәм артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар 60 процентҡа күберәк. Гарвард табиптары был иттәрҙе балыҡ һәм тауыҡ итенә алыштырырға, аҡ икмәк урынына ҡара икмәк ҡулланырға кәңәш итә.

■ Великобританияның биотехнологик компанияһы томаттан яңы дарыу уйлап сығарған. Тикшеренеүҙәрҙә йөрәк-ҡан тамырҙары менән сирләүсе 150 кеше ҡатнаша һәм уларҙың барыһында ла был препаратты ҡабул иткәндән һуң холестерин күләме кәмегән. Ғалимдар быны томаттарға ҡыҙыл төҫ биреүсе каротиноид пикопен менән бәйләй. Тиҙҙән был дарыуҙар Англия дарыуханаларында һатыла башлаясаҡ.

■ Йәшелсә һәм емеш-еләкте күп ашаған үсмерҙәр араһында психик ауырыуҙар һирәгерәк осрай. Ә ит, тәм-том, аҡ икмәк ашаған, татлы газлы һыу эскән балалар араһында агрессия һәм депрессия билдәләре йышыраҡ күҙәтелә икән. 1985 йылдан алып дөрөҫ туҡланмау һөҙөмтәһендә артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы балалар һәм үсмерҙәр һаны өс тапҡырға артҡан. Бынан тыш, пассив йәшәү рәүеше алып барған балалар һаны ла йылдан-йыл арта бара. Дөрөҫ туҡланыу һәм йәшәү рәүеше алып барыу менән киләсәк быуындың физик ҡына түгел, ә психик һаулығы ла туранан-тура бәйле икәнен был тикшереүҙәр тағы ла бер ҡат раҫлай.

■ Ғалимдар күберәк алма ашарға тәҡдим итә - был емеш мускулдар атрофияһын булдырмауҙың иң яҡшы ысулы тип табылған. Мускулдар атрофияһын булдырыусы сәбәптәр билдәле булһа ла, быға тиклем был сирҙән дауа табылмаған. Айова университеты тикшеренеүселәре мускулдар менән бәйле гендарҙың әүҙемлеген тикшергән ваҡытта был сирҙе булдырмаҫҡа ярҙам итеүсе компоненты алманың ҡабығында тапҡан. Ҡомаҡтарҙа үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, был матдә мускул массаһын 15 процентҡа арттырырға булышлыҡ иткән. Бынан тыш, алма ҡандағы шәкәр күләмен, зарарлы майлы кислоталар һәм холестеринды кәметергә ярҙам итә. Табиптар фекеренсә, алманың тәбиғи үҙенсәлектәре диабеттан да файҙалы.

■ Американың Вирджиния университеты ғалимдары белдереүенсә, баш мейеһенең ҡартайыу процесы бик иртә башлана. Күп йылдарға һуҙылған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, мейе әүҙемлегенең иң юғары мәле кеше 22 йәшкә еткәндә була. Эксперттар әйтеүенсә, 27 йәштә мейелә тәүге үҙгәрештәр башлана, ә 37 йәшкә еткәс, хәтер ныҡлап насарая башлай. Шулай ҙа артыҡ ҡурҡып китмәгеҙ, ти белгестәр, сөнки кеше ғүмер буйы нимәләр өйрәнә һәм был белем мейелә кеше ҡартайғансы һаҡлана.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Әсә менән бала һаулығын хәстәрләү бөгөн дәүләт кимәлендәге төп мәсьәләләрҙең береһе. Үҙенең киләсәген ҡайғыртҡан илдә тап шулай булырға тейеш тә. Юғиһә, был мәсьәләнең төбөндә йылдың-йылы кәмей барыусы халыҡ һанына бәйле киҫкен демографик проблема ята. Әсә һәм бала проблемаһы республикабыҙҙың һаулыҡ һаҡлау системаһында тотош бер ҙур йүнәлеште тәшкил итә. БР Һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары, БР-ҙың атҡаҙанған табибы Рәлиҙә Муса ҡыҙы ШАКИРОВА әсәлек һәм балалыҡ һаулығын һаҡлау буйынса күрелгән саралар, мәсьәләнең ҡайһы бер социаль һәм әхлаҡи нигеҙҙәре, табип һәм ауырыу мөнәсәбәттәренә ҡағылышлы уй-фекерҙәре менән уртаҡлаша.**



# ӘСӘЛӘР, БАЛАЛАР ҺӘМ...

## уларҙың сәләмәтлеген хәстәрләүселәр тураһында

### Сәләмәт сабый - беҙҙең бәхет

Эшебеҙҙең төп маҡсатын ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ үҙҙәрен бәхетле әсә итеп тойһон өсөн бөтәһен дә эшләүҙә күрәм. Үҙ ҡарамағыбыҙҙа булған бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланырға тырышабыҙ бының өсөн. Сәләмәт ҡатындан сәләмәт бала донъяға килергә тейеш - ошо беҙҙең эшмәкәрлектең төп маҡсаты. Бының өсөн әсәләр һаулығын күҙәтеү даими иғтибарға алына: уларҙың сәләмәтлеген һаҡлау, нығытыу, һәр төрлө сирҙәрҙе иҫкәртеү, шул уҡ ваҡытта ауырлы ҡатындарҙың сәләмәт тормош рәүеше алып барыуына өлгәшеү. Беҙҙең йүнәлеш ауырлы ҡатындарға медицина ярҙамы күрһәтеүҙең өс этабын тәьмин итә: әсәләрҙе ауырлы ваҡытта, бала тыуҙырғанда һәм бала донъяға килгәс даими контролдә тотоу. Ауыры 12 аҙнаға тиклемге һәр бер ҡатын иҫәпкә торорға бурыслы. Был тиҙерәк бала тыуҙырыу сертификатын ҡулға алыу өсөн генә лә түгел, ә буласаҡ әсәнең сәләмәтлек торошон тикшереп, асыҡланған сирҙәрҙе тиҙерәк дауалауға тотоноу өсөн дә кәрәк.

Әсә булырға хәл иткән ҡатын-ҡыҙ өсөн иң яҡшыһы, әлбиттә, ауырға ҡалыуҙы алдан планлаштырыу. Үкенескә ҡаршы, күптәре "булыры булғас" килеп инеп, медиктар өсөн дә, үҙҙәре өсөн дә ҡатмарлыҡтар тыуҙыра. Аҙаҡ асыҡланған сирҙе дауалау ярапһыҙ үҫеше өсөн ҡурҡыныс тыуҙыра. Шуға күрә буласаҡ әсә үҙ хәлен, унан бигерәк тыуасаҡ балаһы яҙмышын алдан уйлап хәл итергә, врачтар менән ваҡытында кәңәшләшергә тейеш. Өфөнән алыҫ районларҙа, ауылдарҙа йәшәүселәр өсөн бының бер мәшәҡәте, ауырлыға ла юҡ, сөнки буласаҡ әсәләр хаҡындағы бөтә мәғлүмәт беҙгә берҙәм мәғлүмәт туплау үҙәге - ауырлы ҡатындарҙың интернет-программа мониторингына килеп тә етә. Урында үткән медицина тикшереүҙәре, тапшырған анализдарына тиклем ошо мониторинг ҡарамағына һалына. Ул мәғлүмәттәр интернет аша Өфө табиптары, белгестәр тарафынан тикшерелә, кәрәк тип табылһа, улар буласаҡ әсәләргә квалификациялы кәңәштәрен бирә.

Тәүге медицина-санитар ярҙам күрһәтеү буйынса урындарҙа район үҙәк больницалары эште ни тиклем яҡшы ойоштороһа, ауырлы ҡатындарға бала табыуы ла шул тиклем еңелерәккә тура килә, ҡатмарлашыу осраҡтары булмай, тип әйтерлек. Ә инде кемдәр был йүнәлештә медицина ярҙамына мохтаж тип табыла, улар район-ара үҙәктәрҙә йә булмаһа республика перинаталь үҙәгендә ятып дауалана.

Әлеге көндә ауырлылар араһында иң күп таралған сир - аҙ ҡанлылыҡ (анемия). Был, әлбиттә, уларҙың социаль тормош кимәленә бәйле. Һәйбәт итеп туҡланырға, стрестарға бирешмәҫкә, ваҡытында йоҡларға, саф һауала күберәк булырға кәрәк. Әйткәндәй, аҙ тәьмин ителгән ғаиләнән булған ауырлы ҡатындарға бала тыуҙырыу сертификаты буйынса бушлай өҫтәмә туҡландырыу ҡаралған. Ошо сараға ла бәйле, күрәһең, анемия менән яфаланыусылар һаны кәмей төштө.

### Бала - бауыр ите

2011 йылдың 1 ғинуарына ҡарата Башҡортостан Республикаһында 17 йәшкә тиклемге 834 мең бала йәшәй. Һуңғы биш йылда балаларҙың дөйөм һаны 77,4 меңгә (2006 йылда 911 мең ине), шул иҫәптән 14 йәшкә тиклемге балалар 6 меңгә кәмене. Былтыр республикабыҙҙа 57093 бала тыуҙы, был биш йыл элеккегә ҡарағанда 12 меңгә күберәк.

Башҡортостанда һөҙөмтәле дәүләт социаль сәйәсәт үткәрелеү менән бәйле яңы тыуған сабыйҙарҙың ауырыу кимәле тоторокло рәүештә кәмеүгә табан йүнәлеш алды. Үкенескә ҡаршы, медицина статистикаһында сабыйҙар үлеме тигән күрһәткес тә бар. Бында иҫән-һау тыуған 1 мең балаға бер йәшкә тиклемге сабыйҙар иҫәпкә алына. Былтыр был күрһәткес 395 сабыйҙы тәшкил итеп, 2009 йылға ҡарағанда 8 балаға күберәк булды һәм былтырғы статистик күрһәткес мең балаға 6,9 коэффициентын тәшкил итте. Һуңғы биш йылда был күрһәткес шулай уҡ кәмеүгә табан бара. Шуныһы күңелгә бер аҙ йыуаныслы: республиканың 25 районында сабыйҙар үлеме уртаса республика күрһәткесенән кәмерәк, ә бына Йылайыр, Ҡариҙел һәм Федоровка райондарында бындай осраҡтар, бәхеткә күрә, бөтөнләй теркәлмәне.

Республикабыҙҙа тыуым кимәленең дә арта барыуы ҡыуаныслы күренеш. Алда әйтеүемсә, былтыр 2009 йылға ҡарағанда тыуым 2,7 процентҡа артты. 6 ҡала һәм 28 муниципаль районда артыу күҙәтелде. Тыуым кимәле иң юғары күрһәткесте тәшкил иткән төбәктәр иҫәбенә Бөрйән (22,1 процент), Әбйәлил (18,9), Баймаҡ (18,2), Хәйбулла (18,1) райондары инә. Ә бына Йәрмәкәй (9,7), Борай (10,9), Федоровка (11,4), Бүздәк (11,4), Балтас (11,7) райондарында һәм Салауат ҡалаһында (11,6) иң түбән күрһәткестәр.

Бынан алдараҡ әйтеүемсә, тыуым коэффициенты быйыл мең кешегә ҡарата 14-те тәшкил итә. 2009 йылдан һуң был һан тыуымдың үлем кимәленән артығыраҡ булыуын күрһәтте.

### Аҡса өсөн генә түгел…

Миңә ҡайһы бер ҡатындар баланы аҡса өсөн генә таба, тигән фекерҙе йыш ишетергә тура килә. Үкенескә күрә, бар ундай осраҡтар ҙа. Ауылда эш юҡ, аҡса юҡ, ләкин был аҡса өсөн бала табыу күренешен аҡламай, әлбиттә. Төрлөсә була: бар балаларын һәйбәт ҡараған ҡатындар ҙа. Йөрәген ярып сыҡҡан балаһын ҡарамай, ни эшләнен? Бала - бауыр ите, тип юҡҡа әйтмәгәндәр бит. Аҡса хаҡына ғына бындай аҙымға бармаһындар өсөн йәштәргә, айырыуса йәш ғаиләләргә матди ярҙам кәрәк. Мәҫәлән, торлаҡ ипотекаһы буйынса бурысты ғаиләлә һәр бер бала тыуған һайын өлөшләтә кәметә барғанда, йортло ла, күп балалы ла булыр ине йәш ғаиләләр. Юғиһә, әсәлек капиталына ғына йорт һалып инеүе йәки уны һатып алыуы, ай-һай, бик ҡыйынға тура килә йәки был мөмкин дә түгел, айырыуса ҡалаларҙа.

Сабыйҙар тулы, сәләмәт һәм имен ғаиләләрҙә көтөп, теләп алынған хәлдә генә шатлыҡ һәм бәхет сығанағы була. Үкенескә күрә, бөгөн йәш әсәләрҙә балаһын ҡарауҙа фиҙаҡәрлек етешмәй. Йыш ҡына шундай күренештең шаһиты булырға тура килә: йәш ҡатын бер ҡулы менән коляска йөрөтөп бара, ә икенсе ҡулында - тәмәке йә булмаһа мотлаҡ һыра шешәһе! Тағы ла шундай хәлгә тап булаһың: әсә балаһын саф һауаға алып сыға ла уның хаҡында онота, йә телефондан, йә үҙе кеүек уҡ берәй ҡатын менән гәпләшә. Балаһын түгел, ә эттәрен йөрөтөргә алып сыҡҡан кешеләргә оҡшап тора улар. Ә бит бала менән бала булырға ла кәрәк. Бергә уйнарға, һөйләшергә, сабыйҙы донъя менән таныштырырға кәрәк. Ҡайһы бер әсәләр кәрәккәнгә-кәрәкмәгәнгә лә больница юлын тапауҙы өҫтөн күрә. Тора-бара шул асыҡлана: балаға бер ниндәй дарыу ҙа, табип та кәрәкмәй, бары тик әсә көнөнә ике тапҡыр еүеш сепрәк менән туҙандарҙы һөртөп, иҙәнде йыуып сығырға тейеш. Балаларҙа йыш осрай торған аллергияға ҡаршы шулай көрәшәләр.

3 йәшкә тиклем бала менән эшләмәй ултырыуҙы бәгзе берәүҙәр өйҙә ирәүәнләп ял итеп, эшһеҙ ятыу тип аңламаһын ине. Баланы тапҡанһың икән, уның һау-сәләмәт, шат күңелле, туҡ булыуы өсөн ал-ял белмәй фиҙаҡәрлек күрһәт! Йәш әсәләргә минең теләгем бына шундай.

### Кемдәр улар, әсәлектән баш тартыусылар?

Илдәге киҫкен социаль кризис ғаиләләрҙең матди хәлендә генә түгел, әхлаҡи сәләмәтлек торошонда ла сағылыш тапты. Әле һаман дауам иткән социаль-иҡтисади һәм сәйәси тотороҡһоҙлоҡ шарттарында, балалар һаны кәмегән бер ваҡытта сабый йәшендәге социаль етемдәр һанының артыуы күҙәтелә. Мәҫәлән, Сабыйҙар йортонда тәрбиә-

ләнеүселәрҙең социаль статусын алып ҡарағанда, шул күҙгә ташлана: ҡараусыһыҙ тороп ҡалған балаларҙың ни бары 2-3 проценты ғына етемдәр, ә ҡалғандары ата-әсәһе иҫән көйө етем булып иҫәпләнә. Ундайҙарҙың ата-әсәләре йә бала ҡарау хоҡуғынан мәхрүм ителгән, йә әсәйҙәре бала тыуҙырыу йортонда уҡ сабыйынан баш тартҡан, йә табылдыҡ (ташлап кителгән) балалар, йә ата-әсәләре төрмәлә ултыра. Уларҙың һәр береһенең, әлбиттә, үҙҙәренә күрә объектив сәбәптәре лә барҙыр, ләкин был бер нисек тә ата-әсәнең үҙ сабыйына битарафлығын аҡлай алмай.

Әлеге балалар йортон социаль етемдәр менән "тәьмин итеүсе" ҡатындар кемдәр икәнен асыҡлау, ундайҙарға ҡарата ниндәйҙер саралар күреү, кәрәк була ҡалһа, ярҙам итеү маҡсатынан беҙ иң тәүҙә уларҙың социаль портретын төҙөп алырға булдыҡ. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тарафынан аноним анкета формаһы эшләнде, уларҙы беҙ бала тыуҙырыу йорттарына таратып сыҡтыҡ һәм сабыйҙарынан баш тартҡан ҡатындарҙан яуаптар алдыҡ. Был мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, 2010 йылда республикала балаһынан баш тартыусылар һаны 97 булып (2009 йылда 158 булған), шуларҙың 62-һе (63,9 проценты) ҡалала, 35-е (36,1 проценты) ауылда йәшәй, 18-25 йәшлектәре - 45 кеше, 26-35 йәштәгеләре - 30, ә бына 18 йәшкә тиклемгеләр - 9 һәм 35 йәштән өлкәндәр бөтәһе 13 ҡатын булып сыҡты. 56 ҡатын, йәғни дөйөм һандың яртыһынан күберәге (57,7 проценты ) урта белемгә эйә, 16-һы тулы булмаған урта белемле, 17-һе урта махсус һәм 8 ҡатын юғары белемле. Ҡатындарҙың яртыһы эшләмәүен белдергән, ҡалғандары (берәү - мәктәп уҡыусыһы) даими эш менән тәьмин ителгән. Дөрөҫ, бөтәһенең дә эш хаҡы бик түбән. 48 ҡатын кейәүгә сыҡмаған, 11 ҡатын иренән айырылған, 12-һе граждандар никахында йәшәй, ә бына 26 ҡатын законлы никахта тороуын белдергән. Анкетаға яуап биргән ҡатындарҙың яртыһының үҙ торлағы юҡ, ҡайһы берәүҙәре ата-әсәһе менән йәшәй, 18 кешенең торлағы бар, ә 22 ҡатын ваҡытлыса фатир яллап тора. Баланан баш тартыу сәбәптәрен улар матди яҡтан етешһеҙ йәшәүҙәре, йәшәү шарттарының булмауы, эш юҡлыҡ менән аңлата, 25 ҡатын бала тыуыу унын хәлен ҡатмарлаштырасаҡ тип иҫәпләүҙән күрһәтә. Анкетаға яуап биреүсе ҡатындарҙың күпселеге зарарлы ғәҙәттәрҙән азат булыуын белдерһә, 23-ө - тәмәке тарта, 10-һының алкоголгә бәйлелеге асыҡланды, 5 ҡатын наркотиктар ҡабул итеүен таныған.

Шулай итеп, анкета мәғлүмәттәрен ентекләп өйрәнгәндән һуң бала табыу йортонда сабыйынан баш тартҡан ҡатындарҙың шундай социаль портреты хасил була: 25 йәшкә тиклемге, урта һәм махсус урта белемле, даими эш менән тәьмин ителмәгән, кейәүҙә түгел, матди ярҙамға мохтаж, үҙҙәренең социаль статусын насар йәки ҡәнәғәтләнерлек түгел тип иҫәпләүсе һәм, әгәр ҙә тейешле шарттар тыуҙырылған хәлдә, балаға ҡағылышлы ҡарарҙарының үҙгәреүе ихтимал, тип иҫәпләгән ҡатындар. Был мәғлүмәтәр, һис һүҙһеҙ, социаль етемлекте иҫкәртеү буйынса сәйәсәт программаһын төҙөүҙә кәрәк буласаҡ.

Ауырлы ҡатындарҙың социаль хәле менән ҡыҙыҡһыныу, уларҙың ихтыяжын хәл итеүгә ынтылыш эҙһеҙ ҡалмай барыбер. Сағыштырыу өсөн шундай һандарҙы килтереү ҙә етәләр: 2006 йылда 288 ҡатын балаһынан баш тартһа, 2009 йылда улар - 128, ә былтыр 73 осраҡ булды. Эш бында уларҙы матди ҡыҙыҡһындырыуҙан бигерәк, әсәлек бурысының яуаплылығын һәм бөйөклөгөн тойорға өйрәтеүҙәләр, тип иҫәпләйем.

### Рәхмәтле була беләйек

Ошо аҙнала билдәләнеүсе медицина хеҙмәткәрҙәре көнө алдынан булған был һөйләшеүҙә табип - ауырыу мөнәсәбәттәре хаҡында ла бер нисә һүҙ әйтеп китеү кәрәктер, тип уйлайым. Беҙҙең мөхиттә беренсе урында кеше факторы хәл иткес роль уйнай. Әйтәләр бит: медицинала иң шифалы дарыу - ул врач, тип. Ысынлап та, шулай, әгәр был табип кешелекле, белемле, үҙ һөнәренә фиҙакәр булһа. Ниндәй генә яңы ҡорамалдар, препараттар файҙаланмайыҡ, ауырыуҙың яҙмышы барыбер табиптар ҡулында, һығымтаны ул яһай, ул ҡарар ҡабул итә. Тик һәҙөмтәле дауаланыу өсөн был ғына етмәй, ауырыуҙың үҙенең дә тырышлығы, табипҡа ышаныуы кәрәк. Мин сирле, мине дауалаһындар әйҙә, тип, үҙ ихтыяжыңды ғына ҡайғыртыу яҡшы түгел. Кемдәрҙер үҙ һаулығын үҙе ҡайғыртып, һаҡсыл йәшәмәгәнлектән, күп осраҡта дөрөҫ, сәләмәт тормош рәүеше алып бармағанлыҡтан, алкоголь, тәмәке, наркотиктарҙан, самаһыҙ тыйылыу белмәй ашауҙан, башҡа төрлө алама ғәҙәттәр арҡаһында сирлегә әйләнә. Шуға күрә ауырыуҙы еңеү өсөн табип менән бергәләп көрәшергә, унын кәнәштәрен тоторға, уға ышанырға кәрәк. Уйлап ҡараһаң, кешелек өсөн врачтарҙан да күберәк эшләгән һөнәр эйәләре юҡ. Шуға күрә баһалайыҡ улар хеҙмәтен, рәхмәтле булайыҡ уларға.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

НИКАХТАР КҮКТӘ ЯРАЛА

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -

## ерҙәге ожмах сағылышы ул



### Балаларға мөнәсәбәт

**Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) балаларҙы бик яратҡан, уларҙы үпкән, баштарынан һыйпаған һәм уларға ҡарата ҡаты, тупаҫ булмаған. Ғәйшә (радиаллаху анху) һөйләүенсә, бер көндө Бәйғәмбәребеҙгә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ислам тураһында белер өсөн бер бәҙәүин килгән. Был ваҡытта Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ейәндәрен иркәләп ултырған. Теге кеше аптырап: "Һеҙ үҙегеҙҙең балаларығыҙҙы үбәһегеҙме? Ә беҙ бер ҡасан да үҙебеҙҙең балаларыбыҙға ундай мөнәсәбәт күрһәтмәйбеҙ" - тигән. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бәҙәүиндең Аллаһы Тәғәләнең ниғмәте булған балаларға ҡарата ихтирамһыҙ мөнәсәбәтенән һәм ҡатылығынан күңеле төшөп: "Аллаһ һинең йөрәгеңде мәрхәмәтлектән мәхрүм иткән икән, мин нимә эшләй алам?" - тип яуап биргән. Ошо хәҙистән аңлашылыуынса, мосолмандың йөрәге Аллаһы Тәғәләнең аманаты - балаларға ҡарата һөйөү һәм мәрхәмәт менән тулырға тейеш.**

Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡайһы саҡта сабыйҙарҙы үҙенең изге ҡулдарында тотоп намаҙ ҡылған, ә сәждә ваҡытында уларға арҡаһына менергә юл ҡуйған, ә кемдер балаларҙы алырға маташһа: "Балаларҙы тыныслыҡта ҡалдырығыҙ, әйҙә, ҡәнәғәтләнһендәр!" - тигән. Ә балалар илауын ишеткән саҡта Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шунда уҡ намаҙын туҡтатҡан. Бер ваҡыт намаҙ ваҡытында Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бала илаған тауыш ишеткән. Ул шунда уҡ намаҙын бөлгән һәм өйҙәгеләргә: "Бала илаған тауыш мине нисек ҡайғыға һалғанын һеҙ белмәйһегеҙме әллә?" - тигән.

Шуға күрә лә Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ваҡытында үҫкән балалар зирәклектең, гүзәл әхлаҡтың бөтөнләй икенсе нигеҙендә тәрбиәләнгән. Түбәндәге ваҡиға быға миҫал булып тора: "Бер ваҡыт Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әсәргә һыу алып килгәндәр. Ул һыуҙы бер аҙ эскән. Был ваҡытта унын уң яғында сабый бала, ә һул яғында бер нисә оло кеше ултырған. Әфәндебеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яғымлы итеп балаға: "Рөхсәт итһәң, мин һыуҙы иң тәүҙә оло кешеләргә бирәм", - тип өндәшкән. Быға яуап итеп бала көтөлмәгәнсә, шул уҡ ваҡытта лайыҡлы һәм маҡтаулы яуап биргән: "Әфәндем! Мин һеҙҙең ҡулдан алғанды бер кемгә лә бирмәйем!". Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең ҡулдары менән һауытты балаға биргән.

Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәҙистәренән дә унын балаларҙы тәрбиәләүгә ни тиклем ҙур мәғәнә биреүе күренеп тора: "Үҙегеҙҙең балаларығыҙҙы хөрмәтләгеҙ һәм уларға яҡшы тәрбиә бирегеҙ". "Атай кеше балаһына яҡшы тәрбиәнән дә ҙурыраҡ бүләк бирә алмай". "Баланы яҡшы итеп ашатыуға ҡарағанда уға бер тапҡыр яҡшы итеп аҡыл биреү күркәмерәк". "Кеше үҙенән һуң ҡалдыра алған иң яҡшы нәмә - ул уға доға ҡылыусы балаһы, сәҙаҡа-джарийә һәм ғилем"."Ата кешенең балаһы алдындағы төп бурыстарының береһе уға лайыҡлы исем ҡушыу һәм яҡшы тәрбиә биреү". "Өс ҡыҙ үҫтереп уларҙы һаҡлаған, яҡшы тәрбиә биргән, кейәүгә оҙатҡан һәм уларға изгелек эшләүҙән дауам иткән кеше йәннәткә инер". "Ике ҡыҙы тураһында улар бәлиғ булғансы хәстәрлек күргән кеше Ҡиәмәт көнөндә минең янымда булыр"."Ҡыҙҙар үҫтереүселәр улар тураһында хәстәрлек күрһендәр, сөнки улар уттан һаҡлаусы кәртә булырҙар".

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Аҡса менән эш иткәндә

Иҫәптәрегеҙҙе түләргә аҡса табылды тип тынысланмағыҙ. Психиатрҙар һәм психологтар аҡсаға мөнәсәбәттә йыш ҡүҙәтелгән характер һыҙаттарын һәм невротик симптомдарҙы асыҡлаған. Был тоҙаҡтар беҙҙе ҡабат элекке урыныбыҙға ҡайтарыуы мөмкин. Уларҙы тикшереүҙән алда шуны аңлау зарур: аҡсаның килер урыны булғас, унын китер урыны ла булырға тейеш. Әлбиттә, һеҙ аҡсағыҙҙың бер өлөшөн һаҡларға тейешһегеҙ, әммә Илаһтың байлығы даими әйләнештә йөрөргә тейешлеген онотмағыҙ. Һеҙ - ошо байлыҡты үткәреүсе генә.

Аҡса мәсьәләһендә ҡайһы берәүҙәр алдына аныҡ маҡсат ҡуя белмәй. Һәҙөмтәлә улар аҡсаны енел-елпе туҙҙыра, магазиндарға ашыға, ҡиммәтле әйберҙәр алып, үҙбаһаларын күтәрергә тырыша. Нисек кенә булмаһын, аҡсаны нимәгә туҙҙырыуығыҙҙы күҙәтегеҙ. Әгәр кредит карточкаһы менән иркен тотонаһығыҙ икән, түбәндәге ҡайтанан программалаштырыуҙы үтегеҙ:

***Мин Илаһты биргән байлығы өсөн яратам.***

***Мин ул байлыҡты аҡыллы итеп, Илаһҡа ихтирам менән тотонасаҡмын.***

Көсөргәнештән арынығыҙ һәм был ҡуйылышты бер нисә көн дауамында көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатлағыҙ. Һуңынан, моғайын, магазинға һирәк йөрөп, ысынлап та кәрәкле генә әйберҙәр ала башлауығыҙҙы аңларһығыҙ.

Бәғзеләр өсөн аҡса - ҡомарлы уйындарҙа ҡатнашыу мөмкинлеге. Улар ипподромдарҙа, казинола йәки биржала ставкалар ҡуя. Еңеү кәйефен яҡшырта, еңелгәндән һуң еңеү шатлығын ҡайтарыу өсөн уйынды дауам итергә мәжбүр була. Әгәр һеҙ ҡомарлы предприятиеларға битараф түгел икән, тимәк, ҡәнәғәтлектең бындай сығанағына өйрәнгәнһегеҙ. Ҡомар секс йәки наркотиктар кеүек үк, үҙенә ылыҡтыра. Мин һеҙҙән үҙегеҙҙе ҡайтанан программалаштырыуығыҙҙы һорарға йыйынмайым. Бары тик уйын төрөн үҙгәртеп, аттарҙан кешеләргә күсергә тәҡдим итәм. Кеше ярышында ставкалар күпкә ҡыҙыҡлыраҡ. Ҡыҙыҡһыныу даирәгеҙҙе алмаштырырға ярҙам иткән аффирмацияларҙы ҡабатлағыҙ:

***Мин Илаһты алдымда йәйрәп ятҡан байлыҡ өсөн яратам.***

***Көн һайын алған байлыҡты, тормош уйынында ставка яһап, ижади һәм конструктив ҡулланасаҡмын.***

Шундай кешеләр ҙә бар, уларҙа аҡса йыйыу ҡомар уята. Характерҙың был һыҙаты аҡсаны туҙҙырыусылар һәм ҡомарлы уйындар яратыусылар осраған ҡыйынлыҡтарға килтермәй, шулай ҙа кешенең төмәлдәге уңыштарына ҡамасаулауы бар. Кеше көрсөккә эләгеп, тормоштағы байлығынан ҡолаҡ ҡаҡҡас, уға икенсе юл эҙләргә кәрәк. Беҙ байлыҡ үткәреүселәр - шатлыҡ юлын үткәреүселәр булғас ҡына үҙебеҙгә байлыҡты тарта башлайбыҙ. Әгәр ағым менән ингән аҡсаның бер өлөшөн үҙегеҙҙең шатлыҡты, тәләкәтерегеҙҙе һәм өмөттәрегеҙҙе тормошҡа ашырыу өсөн йәлләйһегеҙ икән, тимәк, тормош энергияһының аҡса формаһында булған тәбиғи ағымы юлына кәртә ҡуяһығыҙ. Булдыра алғандан аҙерәктә эшләйһегеҙ. Әгәр аҡсаны сейфҡа һалып һаҡлайһығыҙ икән, тимәк, "ҡара көн" килеүенән ҡурҡаһығыҙ. Үҙ-үҙегеҙҙә ышанысты күтәреүсе алдағы күнекмәләрҙә языылған аффирмациялар менән ҡайтанан программалаһығыҙ. Бынан тыш, ошондай ҡуйылыш менән ҡуллана алаһығыҙ:

***Мин Илаһты мине урап алған байлыҡ өсөн яратам.***

***Мин байлыҡты именлеккә әйләндереү һәм киләсәккә лә байлыҡҡа өлгәшеү юлын эҙләйем.***

***Мин Ижадсының миңә биргән ҡатнашыусы ролен намыҫлы үтәйем.***

Был аффирмацияны көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатлау бүреләр ҙә туҡ, һарыҡтар ҙа иҫән булыу мөмкинлеген бирәсәк.

**Роберт СТОУН.**



## 20 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Серафима прекрасная", 4-я серия. Мелодрама
22.30 "Крепость", 1-я серия. Военная драма
23.30 Ночные новости
23.50 "Борджиа", 3-я серия
00.50 "Вертикальный предел"
03.00 Новости
03.05 "Паприка"

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 77-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 105-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 182-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Бежать", 1-я и 2-я серии. Сериал
22.50 "Тайны следствия", 1-я серия. Сериал
23.45 "Городок"
00.45 "Вести+"
01.05 "Профилактика"
02.15 "Наблюдающий незнакомец". Триллер
04.00 "Догадайся. Спаси. Юрий Визбор"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Ярость". "Внештатный сотрудник". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "Суд присяжных"
02.45 "До суда"
03.45 "Прокурорская проверка"

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00, 18.30, 22.0, 00.45 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 Концерт. Поет Альфия Каримова**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**19.00, 00.30 "Надо знать!"**
**19.15, "Лики времени". А. Г. Чучалин**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться" (на русск. яз.)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Башкортостан в годы войны"**
**23.30 "Петербургские тайны"**

## 21 ИЮНЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Серафима прекрасная", 5-я серия. Мелодрама
22.30 "Крепость", 2-я серия. Военная драма
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Безумцы", 4-я серия. Сериал
01.40 "Конец света"
03.00 Новости
03.05 "Конец света". Продолжение
04.00 "Спасите Грейс"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Они погибли за Францию"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 78-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 106-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 183-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Бежать", 3-я и 4-я серии
22.50 "Тайны следствия", 2-я серия
23.50 "Вести+"
00.10 "Директива № 1. Война". Док. фильм
01.00 "Профилактика"
02.10 "Горячая десятка"
03.20 "Честный детектив"
03.50 "Закон и порядок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Очная ставка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Ярость". "Выстрел в парке". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "НТВшники"
00.35 "Кулинарный поединок"
01.35 "Без следа-7". Сериал
02.30 "Суд присяжных"
03.30 "До суда"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться" (на русск. яз.)**
**10.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Царь горы"**
**11.30 "Фархат - принц Персии"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 19.00, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Байык-2011"**
**14.00, 23.30 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.10 "Быстрее ветра". Вечер памяти Г. Кадырова**
**17.15 "Тэмле" (на башк. яз.)**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Лики времени". Н. Гареева**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30, 00.45 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Башкортостан в годы войны"**

## 22 ИЮНЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Серафима прекрасная", 6-я серия. Мелодрама
22.30 "Крепость", 3-я серия. Военная драма
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Белый воротничок", 10-я серия. Сериал
00.40 "Калифрения"
01.15, 03.05 "Сочувствие госпоже месть"
03.00 Новости
03.40 "Спасите Грейс"
04.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Первые четыре часа"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 79-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 107-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 184-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Бежать", 5-я и 6-я серии
22.50 "Тайны следствия", 3-я серия
23.50 "Вести+"
00.10 "Огонь, батарея! Неизвестная драма Севастополя"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Во бору брусника"
03.50 "DEADLINE"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Кто "прошляпил" начало войны". Док. фильм
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Ярость". "Сопроводитель". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Брест. Крепостные герои"
01.00 "Квартирный вопрос"
02.00 "Без следа-7"
02.55 "Суд присяжных"
03.55 "До суда"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 19.45 "Полезные новости"**
**09.30 "На самом деле"**
**10.00 Д. Шостакович. "Памяти жертв фашизма и войны"**
**10.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Мастерская на колесах"**
**11.30 "Фархат - принц Персии"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15"Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 19.00, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Байык-2011"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 Дж. Верди "Реквием". НСО РБ**
**17.45 "Противостояние"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Бердэмлек-Содружество-2011"**
**19.45 "Деловой Башкортостан"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Вспомни меня"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Башкортостан в годы войны"**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 23 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Серафима прекрасная ", 7-я серия
22.30 "Крепость", 4-я серия
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Молодость без молодости"
02.10, 03.05 "День смеха"
03.00 Новости
04.00 "Охота на привидения"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Последний звонок Нестора Петровича. Михаил Кононов"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 80-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 108-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 185-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Бежать", 7-я и 8-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Дело судей. Капкан для Хрущева"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Во бору брусника-2"
03.50 "Последний звонок Нестора Петровича. Михаил Кононов"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Развод по-русски"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Ярость". "Пиковая дама". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Сталин против Красной армии". Док. фильм
00.30 "Дачный ответ"
01.30 "Без следа-7". Сериал
02.25 "Суд присяжных"
03.25 "До суда"
04.25 "Особо опасен!"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Башкорттар"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Цирк в 13 метров"**
**11.30 "Фархат - принц Персии". Мультсериал**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 19.00, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Песнь Уралу-2010"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Моя планета". Т. Ганиева**
**17.15 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.15 "Бердэмлек-Содружество-2011". Репортаж**
**19.45 "Деловой Башкортостан"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Башкортостан в годы войны"**
**23.30 "Петербургские тайны"**
**00.45 Новости (на башк. яз.)**

## 24 ИЮНЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "ДО РЕ: Игорь Николаев". Музыкальное шоу
23.45 Открытие Московского международного кинофестиваля
00.30 "Перемирие". Драма
03.30 "Охота на ведьм"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05"С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Мой серебряный шар"
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 " Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 81-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести ПФО"
16.50 "Все к лучшему", 109-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 186-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Кривое зеркало"
23.05 "Только вернись". Мелодрама
00.55 "Холодная добыча". Триллер
02.55 "Семейная жизнь". Драма

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "История всероссийского обмана. Выход есть"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "ЖКХ-потрошитель. История всероссийского обмана
23.15 "Песня для вашего столика"
00.30 "Чудовище во мраке". Триллер
02.40 "Суд присяжных"
03.40 "Прокурорская проверка"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Гора новостей"**
**11.15 "Книга сказок"**
**11.30 "Фархат - принц Персии"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15"Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 19.00, 00.30 "Надо знать!"**
**13.00 "Песнь Уралу-2010"**
**14.00 "Петербургские тайны"**
**15.00, 18.30, 22.30, 00.45 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др.**
**16.15 "Приди моей музой". Концерт Гульдар Ишкуватовой**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**19.15 "Бердэмлек-Содружество-2011"**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Деревенька моя"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Муз-базар"**
**23.30 "Петербургские тайны"**

## 25 ИЮНЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.20 "Мой домашний динозавр"
06.00 Новости
06.10 "Мой домашний динозавр". Продолжение
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Вкус жизни"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Освобождение". Военная киноэпопея
18.00 Вечерние новости
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.15 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Минута славы". Продолжение
22.20 "Что? Где? Когда?"
23.20 "22 пули. Бессмертный". Боевик
01.40 Дневник 33-го Московского международного кинофестиваля
01.50 "Глаза змеи". Боевик
03.40 "Спасая Сару Кейн"
05.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.05 "Одинокий игрок"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Газпром - в гармонии с природой"
10.35 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "И падает снег..." Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "И падает снег..." Продолжение
16.05 "Субботний вечер"
18.05 "Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
19.10 "Один единственный и навсегда". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Один единственный и навсегда". Мелодрама. Окончание
23.40 "Девчата"
00.20 "Чужой против чужого". Фантастика
02.15 "Семейная тайна". Драма
04.25 "Комната смеха"

### НТВ

04.55 "Спецгруппа". "Нехорошая квартира". Сериал
06.55 Детское утро НТВ. "Каникулы Бонифация". Мультфильм
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Медицинские тайны"
09.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Знак судьбы-2". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.55 "Последнее слово"
00.05 "Разрушитель". Фантастический боевик
02.20 "Сердце - одинокий охотник". Драма

### БСТ

**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 Музыка на канале**
**08.00 "Легенда о Сиде"**
**09.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**10.00 Третий звонок. Т. Гарипова. "Девушка с монетками"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Деревенька моя"**
**13.30 "Йома"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Хазина"**
**19.00 "С песней на века". Группа "Каравансарай"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Следопыт"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Байык-2011"**
**23.00 "Королева Болливуда"**
**00.30 "Свидание с джазом"**

## 26 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Женя, Женеяка и "Катюша"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым
10.30 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Освобождение"
15.20 Творческий вечер Александры Пахмутовой
18.00 "Валерий Золотухин. "Я устал быть Бумбарашем". К 70-летию артиста
19.00 "При загадочных обстоятельствах". Сериал
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Какие наши годы!"
23.10 "Познер"
00.15 Дневник 33-го Московского международного кинофестиваля
00.25 "Суррогаты"
02.00 "Лига джентльменов Апокалипсиса"
03.40 "Спасите Грейс"
04.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.40 "Мы с вами где-то встречались..." Комедия
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "И падает снег..." Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "И падает снег..." Продолжение
15.55 "Смеяться разрешается"
17.55 "Время счастья". Мелодрама
20.00 "Вести недели"
21.05 "Время счастья-2". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Тиски". Драма
02.40 "Скрой у всех на виду". Драма

### НТВ

04.55 "Спецгруппа". "Полный пансион". Сериал
06.55 Детское утро НТВ. "Приключения Буратино"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.50 "Пир на весь мир"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Знаки судьбы-2"
15.05 "Свой игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "История всероссийского обмана. Выход есть!"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Врача вызывали?" Криминальная драма
23.50 "Игра"
00.50 "Авиаторы"
01.20 "Главная дорога"
01.55 "Рой". Фильм ужасов

### БСТ

**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Музыка на канале"**
**08.00 "Камикадзе"**
**10.00 "Тамыр" представляет..."**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Второе рождение села. Татарбаево. Мишкинский район"**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Бердэмлек-Содружество-2011"**
**15.30 "Автограф". А. Абдуллин**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**18.00 "Полезные новости"**
**18.15 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 "Башкорттар"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Любимое дело"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык-2011"**
**23.00 "Вечер.com"**
**23.45 "Достучаться до небес"**

**✓ Шәмсиямал гел генә: "Һуғыштан һуң балаларҙы, туғандарҙы иремә иҫән-һау тапшырһам, үлһәм дә ризамын", - тип ҡабатлай ҙа йөрөй. Ысынлап та, күп тә үтмәй, яҡты донъяны ҡалдырып китә ул.**



КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ӨНДӘШМӘҪ СӨЛӘЙМӘНДЕҢ...

## ҡаһарман улдары



**-Үҙенә генә хас матурлыкты йыйған Һынташ ауылы ситтән килеүселәрҙең күңелен кинәт кенә арбап ала ла ҡуя шул, - тип һүҙ башланы Мәрхәбә инәй. - Һынташ йылғаһы урамды арҡыры ҡырҡып үтә лә, Ильяс йылғаһына ҡушылып, Һаҡмарға ҡоя. Йылға буйында бар халыкты үҙенә ҡаратып торған Яманташ мәмерйәһе лә бар. Борон бында - ҡараҡтар, аҡтар, ҡыҙылдар ваҡытында һалдаттар йәшеренгән. Элек мәмерйә ҡыуышлығында түңәрәк өҫтәлгә, ултырғысҡа оҡшаған ҙур таштар булған, унда үлгән кешеләрҙең һөйәктәре лә табылған. Бөгөн мәмерйә емерелә башлаған, инә торған тишеге ҡапланған. Ана Бизмәнташ, Ҡыҙылташ, Ҡашҡароскан тауҙары. Эй,беҙҙең яҡтың хозурлығы...**



Мәрхәбә инәй берсә моңһоу, берсә уйсан ҡараштарын алыҫтарға төбәп, көрһенеп ҡуйҙы. Оло йәштә булыуға ҡарамаҫтан, күҙҙәрендә серле нурҙар балҡый ине. Ул нурҙарҙың осҡононда сикһеҙ хәтирәләр һаҡлана, күрәһең. Мине бөтә тирә-яҡ күренеп торған мөғжизәле урынға, йәғни бейек тау башына саҡырып, әңгәмәләшеп ултырыуы юҡҡа түгелдер. Күпте белергә, төпсөнөргә яратам, ләкин бөгөн янымдағы баҫалҡы, итәғәтле инәй эргәһендә үҙемде тыныс тоторға, уның әңгәмәһен бүлдермәй генә иғтибар менән тыңларға тип ҡарар иттем. Дөрөҫ уйлағанмын икән. Ул төйөн хәтирәләрен яйлап үҙе сисә башланы.

- Ошо ауылда күпме унған кешеләр, данлы батырҙар, мәҙәктәр менән дәртләндереп йөрөүселәр, маһирҙар булды. Һәр өйҙә ниндәй ҙә булһа хәтирә һаҡлана. Мин, ана, ситтәрәк ултырған бер яңы йортҡа туҡталырға теләйем. Уның урынына элек иҫкерәк өй ине, күрәһеңме, бөгөн ҡайһылай күркәм йорт һалып ҡуйғандар. Тимәк, нигеҙҙе ҡоротмай, уны ҡәҙерләп, ата-олатайҙар аманатына тоғро ҡалып йәшәйҙәр. Ошо нигеҙҙең хужаһы Сөләймән исемле ир-ат ине, аҙ һүҙле булғаны өсөн уға "Өндәшмәҫ Сөләймән" ҡушаматы тағалар. Сөләймән ҡатыны Хәкимә менән өс ҡыҙ, өс ул үҫтерә. Мал-тыуары ишле була уларҙың. Колхозлашыу башланғас, Сөләймән булған мал-мөлкәте менән колхозға инә. Өйөндә балаларын яҙырға, уҡырға өйрәтә. Йүкә һатып, балыҡ тотоп көн итәләр.

Сөләймәндең әкиәт батырылай Оморҙаҡ (1905), Сәфәрғәле (1909), Исмәғил (1919) атлы улдары була. Өлкәндәре Оморҙаҡты фронтҡа оҙатып күп тә үтмәй, уның ике улын - Сәмиғулла менән Хәбибулланы ла һуғышҡа алалар. Аталы-уллы өсөһө лә аяуһыҙ яуҙа батырҙарса һәләк булалар. Исмәғил Алыҫ Көнсығышҡа хәрби хеҙмәткә алына. Ул командир була. Монгол республикаһына һөжүм иткән япон самурайҙарын тар-мар итеүҙә ҡатнаша, шунан Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Һуғыш яланынан бер генә хаты килә, һуңынан ул хәбәрһеҙ юғала.

Сөләймән бабайҙың тағы бер улы Сәфәрғәле колхозда механизатор булып эшләй һәм уға ла һуғышҡа саҡырыу ҡағыҙы килә. Ҡатыны Шәмсиямал береһенән береһе бәләкәй дүрт бала менән тороп ҡала. Ул мәлдә колхоз эшенең ауырлығы ҡатын-ҡыҙ, бала-саға иңенә төшә. Шәмсиямалдың атаһы Ишбулды ауылынан Әбделхәлимде хеҙмәт армияһына алалар һәм Шәмсиямал ике һеңлеһе Хәмдиниса, Рауза, ике ҡустыһы Әхмәҙулла менән Миңлегәлене үҙҙәренә ала. Өҫтәүенә, иренең Ишембайҙағы апаһы Зарифаны ла дүрт балаһы менән күсереп алып ҡайта. Шәмсиямалдың күңеле иркен, туғандарын ҡанат аҫтына алып, ярҙамлашып, ауыл менән тормош йөгөн бергә тарталар. Һарыҡ көтәләр, ололар һарыҡ ҡырҡа, балаһаға йөн тетә, күмәкләп ойоҡ, бейәләй бәйләйҙәр.

Шәмсиямал иренең хаттары аша килгән һәр яңылыҡты ауылдаштарына еткереп бара. Сәфәрғәле икенсе Украина фронтында артиллерия дивизияһында һуғыша. Яраланып, госпиталгә эләгә, һауыҡып сыҡҡас йәнә фронтҡа ынтыла. Рокоссовский етәкселегендәге полкташтары менән фашистарҙы тар-мар итеп, бик күп ауыл, ҡалаларҙы фашистарҙан азат итеүҙә, Куликово яланында ниместәрҙе ҡамауға алыуҙа ҡатнаша. Артабан Кенисберг ҡалаһын штурмлап, Берлинға тиклем барып етеп, ул енеү шатлығын Рейхстагта ҡаршылай.

Сәфәрғәле 1945 йылдың авгусында имен-аман ғаиләһе янына ҡайтып төшә. Батырлыҡтары өсөн орден-миҙалдар һәм Сталиндың грамотаһы менән бүләкләнә. Ауылда комбайнда эшләй. Өлгөлө хеҙмәте өсөн ВДНХ-ға барыу бәхете тейә уға. Шәмсиямал менән Сәфәрғәленең һуғышҡа тиклем дүрт балаһы булһа, һуғыштан һуң улдары Фәрит менән ҡыҙҙары Гөлйыһан донъяға килә. Шәмсиямал ауыр һуғыш йылдарында шул тиклем хәсрәттәрҙән арыған булғандыр инде, гел генә: "Һуғыштан һуң балаларҙы, туғандарҙы иремә иҫән-һау тапшырһам, үлһәм дә ризамын", - тип ҡабатлай ҙа йөрөй. Үҙенә шулай үлем саҡырғандыр инде, ысынлап та, күп тә үтмәй, яҡты донъяны ҡалдырып китә ул. Сәфәрғәле бөтә ҡайғыһын балалары, туғандары менән уртаҡлашып, улар менән бергә тормошон дауам итә. Оморҙаҡ ағаһының ике улы һуғышта үлә, ә өсөнсөһө Исхаҡ менән бергә эшләйҙәр. Ҡулынан балта төшмәгән оҫта, һунарсы, бейеүсе, көрәшсе була Исхаҡ. Сәфәрғәле менән Исхаҡ ауылда иң абруйлы кешеләр һанала.

Мәрхәбә инәйҙең һырланып бөткән йөҙөндә йәнә бер һыр өҫтәлгәндәй булды. Ул бер нисә минут шым ғына ултырғандан һуң зыярат яғына ҡарап, әңгәмәһен дауам итте.

-Ул ҡәһәрле һуғыш күптәрҙең ғүмерен өҙҙө, байтаҡ балаларҙы йәтим ҡалдырҙы, әллә күпме ҡатын-ҡыҙҙы тол итте, йәш ҡыҙҙарҙы һөйгәненән айырҙы. Бына беҙҙең ошо ауылдан бөтәһе 50 кеше һуғышҡа китеп, 14 кенәһе кире әйләнеп ҡайта ала. Иҫәндәүләтовтар нәҫеләнән ун кеше - Муллахәмит, Әбделхаҡ, Әбделәхәт, Муса, Йәлил, Оморҙаҡ, Исмәғил, Сәмиғулла, Хәбибулла, Сәфәрғәле киткәйне һуғышҡа, шуларҙан бер Сәфәрғәле генә әйләнеп ҡайта. Бына шулай өндәшмәҫ Сөләймәндең ҡаһарман улдарының яҙмышы. Үҙем дә Иҫәндәүләтовтар нәҫеләнән һәм оло ғорурлыҡ менән ата-бабам хәтирәләрен яҡты тарих итеп һаҡлайым һәм киләсәк быуынға ла ошо иҫтәлектәрҙе ҡалдырырға теләйем. Ҡыҙым, мөмкин булһа, зинһар өсөн ошо һөйләгәндәремде ташҡа баҫып сығар әле, Сөләймәндең ҡаһарман улдарын башҡалар ҙа белһен ине...

Бер нәҫелдән туғыҙ кешенең иле, халҡы өсөн һуғышта һәләк булыуы оло ғорурлыҡ та баһа, был турала бөтә халыҡ белергә тейеш, тип уйланым һәм ул хәтирәләрҙе үҙем яҙып уҡыған "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына ла еткерергә булдым.

**Әлнисә АЛДЫРХАНОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

ЙӘШЕЛ ДАУА

## КӨТӨҮСЕ МУҠСАҺЫ

**Халыҡ медицинаһында көтөүсе муҡсаһы үләнен һәм һутын үпкәнән, ашҡаҙандан һәм эсәктән ҡан киткәндә ҡулланырға ҡушалар. Был үлән ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарынан алмаштырғыһыҙ дауа. Шулай уҡ ул бөйөр, бигерәк тә нефрит ауырыуҙарын дауалағанда ныҡ ярҙам итә. Бауыр ауырыуҙарынан да яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Араҡыла төнәтелгән үләнде ашҡаҙан яман шеше ауырыуынан эсәләр.**

**Бауыр һәм бөйөр ауырыуҙары.** Йәйгеһен йәш үләндең һутын һығып алалар һәм 40 тамсыны шул уҡ күләмдәге һыу менән ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр ҡабул итергә. Йәки 40-50 г киптерелгән үләнгә 1 л ҡайнаған һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға һәм йылы көйөнсә яртышар стаканлап көнөнә 3-4 тапҡыр ҡабул итергә.

**Климакс.** Күпләп ҡан килгәндә 1 ҡалаҡ үләнде 1 стакан ҡайнар һыуға һалырға һәм 2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарға ярты сәғәт алда 1-2 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Бәүел тотмау.** 3 ҡалаҡ үләнгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп 3-4 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарға тиклем ярты стакан ҡабул итергә.

**Балаятҡынан ҡан китеү.** 2-3 ҡалаҡ киптерелгән үләнгә 1 стакан ҡайнаған һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә. Ғәҙәттә бер-ике көндән ҡан китеү туҡтай, шулай ҙа тағы ике көн төнәтмәне эсеүҙе дауам итергә кәрәк.

**Стресс.** Үләндең яңы һутын 40-50 тамсы һыу менән ҡатыштырып, көнөнә 3 тапҡыр ҡабул итергә.

**Гипертония.** Төнәтмә әҙерләргә. Бының өсөн быяла банканың өстөн ике өлөшөн үлән менән тултыралар, тултырғансы араҡы ҡоялар. 2 аҙнанан һуң ҡулланырға мөмкин, ә бер айҙан һуң һарҡытырға кәрәк. Көнөнә 3 тапҡыр ашарға тиклем бер ҡалаҡ һыу менән ҡушып, 25-30 тамсы ҡабул итергә.

**Был үлән ағыулы түгел, уның япраҡтарын турама эшләгәндә ҡулланалар, аштарға һалалар, уларҙан бәлештәр өсөн тәмле эслек килеп сыға. Шулай ҙа ҡан ойошоусанлығы юғары булғанда уның менән һаҡ булырға кәңәш ителә. Йөклөлөк осоронда хатта ҡан китеүҙе туҡтатырға кәрәк булғанда ла көтөүсе муҡсаһын ҡулланырға ярамай.**

## ҺАБЫН ҮЛӘНЕ

**Халыҡ медицинаһында һабын үләне төнәтмәһе йүтәлдән, бронхиттан, үпкә шешеүенән киң ҡулланыла, шулай уҡ ҡаҡырыҡты сығарыуҙы көсәйтә. Шуға күрә лә уны ларингит, фарингит, ангина ваҡытында ҡулланалар. Шулай уҡ һабын үләне һары ауырыуынан, бауыр һәм талаҡ ауырыуҙарынан, үт ҡыуығы шешеүенән (холецистит), ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарынан, эс ҡаталағандан ярҙам итә.**

**Тарҡатыусы көсәйеүсән артрит.** 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыуға 1 балғалаҡ һабын үләне тамыры алырға. Стаканды ҡайнар һыу быуында 15 минут ҡайнатырға. Һыуығандан һуң һарҡытырға. 2 аҙна дауамында көнөнә 4 стакан ҡабул итергә. 10 көн ял иткәндән һуң курсты ҡабатларға. Дауаланыуҙы 3 курс үтергә.

**Һимереү.** 1 стакан һыуға 1 балғалаҡ үлән алырға. Һүрән утта ҡайнатып алырға, 15 минут бешерергә. 1 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә өс тапҡыр ашағандан һуң 1 стакан ҡабул итергә (ас ҡарынға ҡабул итергә ярамай!). 15 көн дауам иткәндән һуң 10 көн ял итергә һәм дауаланыуҙы яңынан башларға.

**Герпес.** 2 ҡалаҡ үлән тамырына 0,5 л ҡайнаған һыу ҡойорға, тағы ла 5 минут еңелсә ҡайнатып алырға, 1 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Герпес, тимреүҙәрҙе йыуыр һәм компресс яһар өсөн ҡулланырға.

**Фурункулез**. 1 балғалаҡ иҙелгән һабын үләне тамырына 1 стакан ҡайнаған һыу ҡойорға, 4 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 2 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Үпкәләр шешеүе, бронхит.** 1 балғалаҡ үлән тамырына 1 стакан һалҡын ҡайнаған һыу ҡойорға. 8 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Төнәтмә үлән күбеген бөтөрөүҙе талап итмәй. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашағандан һуң сирек стакан ҡабул итергә.

**Ашҡаҙан ауырыуҙары булһа, һабын үләне тамырын ҡулланырға ярамай. Дозанан артыҡ ҡулланыу күңел болғаныуына, ҡоҫоуға, эс китеүгә, эс ауыртыуҙарына алып килә. Ас ҡарынға ҡабул итмәҫкә - тик ашағандан һуң ғына!**

**Рим ӘХМӘДОВ.**

АТЫҢ КЕМ?

# ҮҘҘӘРЕНӘ КИЛЕШЕП ТОРА



**Ҡыҙыбыҙ тыуғас, ниндәй исем ҡушырға белмәй аптырап ҡалдыҡ, сөнки малай булыр, тип көтөп йөрөгәйнек, Нурсолтан тип исемен дә әҙерләп ҡуйғайныҡ. Беҙ уйлап йөрөгәнсе, Ләйсән исемле әхирәтем: "Әйҙә, Гөлнәзирә тип ҡушығыҙ, матур исем, бейеүгә лә бик дәртле генә", - тигәс, ҡыҙыбыҙға ошо исемде һайланыҡ. Беҙҙән һуң күп таныштар ҡыҙҙарына ошо исемде ҡуша башланы, бөгөн был исем Өфөлә бик таралғандарҙан иҫәпләнә.**

Ә Сәләймәнгә исемде атаһы һайланы. Яҡын дуҫы Рәфистең мулла ҡушҡан исеме Сәләймән икән, яҡындары уны ошо исеме менән йөрөтә. Дуҫы кеүек яҡшы кеше булһын, тип теләнек. Сәләймән - бәйғәмбәр исеме, Сәләймән тигән батша ла булған. Һуңынан асыҡланыуынса, ата-бабаларыбыҙ араһында ла Сәләймән исемле кеше булған икән. Был исемде ҡушҡас, үҙебеҙ йәшәгән йортта тағы ла бер бәләкәй Сәләймән булыуы асыҡланды, һуңынан да ошо исемде йөрөткән бер нисә баланы осратырға тура килде. Ә беҙ һирәк исем тип уйлағайныҡ. Сәләймәндең холҡо исеменә тура килә: һәр эште, һәр аҙымды үҙ баһаһын белеп, уйлап ҡына эшләй. Исеме үҙенә бик килешә. Иптәштәре лә ҡыҫҡартып әйтмәй, башҡорт телен белмәгәндәре лә тулы итеп өндәшә.

Гөлнәзирә өс йәшенән "Сәңгелдәк" тапшырыуын алып барғас, уны урамда, автобуста йыш танығайҙар. Балалар уны яратҡас, исемен дә оҡшаталарҙыр инде. Уҙған йыл "Сәңгелдәк"кә төшөргә бер ҡыҙ килгән, ул атаәсәһенән үҙенә үҙ исеме менән түгел, ә Гөлнәзирә тип әйттерә икән. Балалар бит яратҡан телегеройҙарына оҡшарға тырыша. Телевидение, кино, интернеттың балаларға тәьҫире көслө, улар кумирҙы шунан эҙләй, таба. Шуға күрә беҙ "Тамыр" студияһында тапшырыуҙарыбыҙға бәләкәс алып барыусылар һайлағанда уларҙың зирәк, туған телен белеүенә генә түгел, исеменең мәғәнәле, башҡортса булыуына ла иғтибар итергә тырышабыҙ. Балаларыбыҙға хәҙер күпләп үҙебеҙсә, йәтеш исемдәр ҡушыу таралла барыуында беҙҙең студия хеҙмәткәрҙәренең дә роле ҙурҙыр тип уйлайым.

**Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА,**
**тележурналист.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## КӘҮҘӘП...

### сәлдереп бөткәндәр

**Һип** - әҙерәк булһа ла ярҙам. Мәҫәлән, тауыҡтарға бойҙайға һип булһын, тип болғамыҡ бирәм.
**Кәүҙәп** - сәлдереп бөткәндәр, мәғәнәһендә килә.
**Иҙем** - саҡырыу. Мәҫәлән, ҡунаҡҡа барырға минә бер иҙем булманы.
**Ҡыржыҡ** - бер ҙә тулыланмай, бер килеш ҡалған кешегә әйтәләр.
**Беше** - тығыҙ бәйләнгән, йәки ҡалынса тауар мәғәнәһендә.
**Хаттин ашкан** - артыҡ шашҡан, сама белмәгән кешегә әйтәләр.
**Һәтеүә** - унан ни һәтеүә, тиҙәр. Йәғни ни файҙа мәғәнәһендә килә.
**Һәтәү** - еңел-елпе кешегә әйтәләр.
**Бәс** - тауышланмай, шым ғына ултыр тигәндә аңлата.
**Фәстереү** - артыҡ маҡтанып һөйләү.

**Латифа МОСТАФИНА,**
**Әбйәлил районы Рыҫҡужа ауылы.**

ӘҘЛӘЙЕМ

# ҮҘҘӘРЕН ТАНЫМАҪТАРМЫ?

**Бынан 70 йыл элек икенсе Бөйөк Ватан һуғышы башланған көндө беҙ Стәрлетамаҡ башҡорт педагогия училищеһының II курсын тамамланыҡ. I курста уҡығанда Финляндия менән һуғыш булды. Беҙҙең ятаҡ, мәктәптәр казармаға әйләнде ул саҡта. Шул йылдың ноябрь айында Пролетар урамы 46-47-се йорттоң бер бүлмәһендә 16 ҡыҙ йәшәнек. Иҫтәлеккә фотоға барып төштөк. Ул ҡыҙҙар Ишембай, Ғафури, Стәрлебаш, Маҡар, Күгәрсен, Ауырғазы райондарынан ине. Мин бер үҙем Миәкә районынан инем. Уҡыу өсөн түләү тураһында закон сыҡҡас, күбебеҙ өйҙәребеҙгә таралып ҡайтып киттек.**



Ҡәһәрле һуғыш башланғас, мин Миәкә районы II Миәкәбаш ауылына ҡайтып, уҡыта башланым. 1941 йылдың 15 авгусынан 1987 йылға тиклем шул бәләкәй ауылда эшләнем, йәшәнем. 3 ҡыҙ үҫтереп тормош юлына сығарҙым. Иптәшем һуғыштан һуң да 3 йыл хеҙмәт итте. Уның был донъянан мәңгелеккә күскәненә 42 йыл тулды.

Бөгөнгө көндә мин Мәләүез ҡалаһында йәшәйем. Бында күсеп килгәс, Мәләүез мәсетендә гәрәп телен өйрәндем. Үҙем дә шәкерттәр уҡыттым.

Кеше ологайғас гел үткәндәрен уйлап йәшәй икән. Мин дә альбом ҡарап, ошо фотоны күргәс, был ҡыҙҙарҙың ҡайһылары иҫән икәнен белеп, аралашҡым килде. Береһе менән дә бәйләнеш юҡ. Ошо фотоны ҡарап, улар, бәлки, аҫлы-түҡлы, талон менән Тире заводы ашханаһында ашап йөрөгән көндәрен, бергә йәшәгән ошо 15 кенә йәшлек саҡтарын иҫкә алырҙар.

**Роза ХАЗИЕВА (ЙЫҺАНШИНА).**
**Мәләүез ҡалаһы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НӘФСЕҺЕНӘ ЭЙӘРГӘН...

### малынан да, аҡылынан да яҙыр

Аҡыл эҙләгән аҡыл табыр, мал эҙләгән мал табыр, нәфсеһенә эйәргән малынан да, аҡылынан да яҙыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Шулай ҙа була: хәйер биреүселәр хәйер һораусыға, үлтереүселәр - үлтерелеүсегә, еңеүселәр еңелеүсегә әйләнә.

**(Боронғо һинд мәҡәле).**

Мөхәббәт өсөн айырылып тороу - утҡа өргән ел һымаҡ: көсһөҙ утты һүндерә, көслөһөн тағы ла көсәйтә.

**(Р. Бюсси).**

Батырлыҡтың сере шул: үлемдән ҡурҡыу тойғоһона үҙ ғүмереңде менән идара итергә юл ҡуймау.

**(Б. Шоу).**

Ғүмер юлың ҡасан да булһа өҙөләрөнән ҡурҡма, ғүмер юлыңдың башлана алмай ҡаңғырыуынан ҡурҡ.

**(Д. Ньюмен).**

Проблеманан ҡотолоуҙың иң яҡшы ысулы - уны хәл итеү.

**(Брендан Франсис).**

Дөрөҫөн әйткәндә, бик аҙ ғына кешеләр бөгөнгө көн менән йәшәй. Күпселек киләсәктәге йәшәйешен ҡайғырта, иртәгә йәшәй башлайым, тип фекерләй.

**(Д. Свифт).**

Ярлы үҙенең тәҙрәһе төбөндә үҫкән сүп үләне сәскәһенә ҡарап тә һоҡлана ала, бай кеше иҡһеҙ-сикһеҙ баҡсаһын тултырып үҫкән сәскәләргә лә күрмәскә мөмкин.

**(П. Буаст).**

Бәлә көтөп йәшәү бәләнең үҙенә ҡарағанда ла яманыраҡ хәл.

**(Д. Писарев).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Һыу баҫа башлағас, бер кеше өйөнөң башына менеп ултыра ла, Хоҙайҙан уны ҡотҡарыуын үтенеп, уҡына башлай. Уға кәмә менән бер кеше йөҙөп килә һәм ултырырға саҡыра. "Юҡ, - ти кеше, уҡыныуын дауам итеп, - мине Хоҙай ҡотҡараса҅ҡ". Бер аҙҙан тағы бер кеше кәмәлә йөҙөп килә. "Хоҙай ҡотҡарасаҡ мине", тип, уның ярҙамынан да баш тарта өй башында ултырыусы. Ул шулай өсөнсө кәмәсенең ярҙамын да кире ҡаға һәм... батып үлә. Тege донъяла Алла ҡаршыһына барып баҫҡас, батып үлеүсе Уға "Мин һине саҡырҙым, һин мине ҡотҡарманың", тип, үпкәһен белдерә. "Мин һиңә өс тапҡыр ярҙам ҡулы һуҙҙым, ә һин өсөһөнән дә баш тарттың", ти Аллаһы Тәғәлә".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 2320